ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-2 сентябрь - октябрь (нарысай - карасай) 2020

№39 (925)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!**
**Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 1 октябрҙән 10 октябргә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2021 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә - 635 һум 82 тингә яҙыла алаһығыҙ.**
**Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.**
**МӨХӘРРИРИӘТ.**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хәләл ризыҡ - үҙ ерендә үҫкәне**



3

**Милли ғорурлыҡ һәр кемдә бар,**
тик уны уятыр шәхестәр кәрәк



8-9

**Президент Рәхимов**
Документаль романдан өҙөк



10-11

**Яңғыҙлыҡ...**
саманан да яҙҙыра



12

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Яҡшыға өмөт итеп, насарға әҙер булып йәшәү кәрәк, тигән халыҡ аҡылы бар. Һуңғы ваҡыттағы тәбиғәт катаклизмдары, урман янғындары, йоғошло сир таралыуы кеүек афәт күренештәренә әҙер инекме беҙ? Былар киләсәктә һабаҡ булырмы?

*Ғәйнетдин КАМАЛЕТДИНОВ, хеҙмәт ветераны, Мәләүез ҡалаһы:*
Ысынлап та, кеше тәбиғәте шундай: ул нисек кенә имен, яҡшы йәшәмәһен, эске аң менән барыбер көтөлмәгән үҙгәрештәр ихтималлығын күҙаллап ҡуйғылай, төрлө хәлдәргә үҙенән әҙерлеген самалай, ғаиләһе, яҡындары өсөн борсола, тормош-көнкүреш сылбырын күҙ унынан ысҡындырмай, һәр төрлө яңылыҡтар менән хәбәрҙар булып барырға тырыша. Айырыуса бөгөнгө осорҙа - һәр көнөбөҙҙә, бөгөн низәр булып китте икән, тигән эске бер хәүефләнеү менән ҡаршылап йәшәгән ваҡытта. Бөгөнгөбөҙҙә имен-аман, тыныс ҡына йәшәп, эшләп, иртәгәбеҙ хаҡында ла хәүефләнмәгән элекке "торгонлоҡ"ло булһа ла тоторокло замандар үтеп китте шул. Элеккене һағынып һөйләгәндә бик яратмай, магазиндарҙағы буш кәштәләр, аҙыҡ-түлек, промтауарҙар наҡыҫлығын иҫкә төшөрөп, битәрләй башлаусылар ҙа күп бөгөн, үндайҙарға һис юғы: "Ас тамағым, тыныс ҡолағым ине", - тип яуаплағы килеп китә. Ә шулай ҙа ул замандарҙа аслыҡтан интеккән бер кемде лә хәтерләмәйем былай. Һәр хәлдә, эшһеҙлектән яфа сикмәне халыҡ. Эшһеҙ ятҡан бер-ике кешегә лә көн булманы. Уларҙы "тунеядец" тип хурлыҡлап, эшкә урынлаштырыу хәстәрлеге күрелер ине. Ә бөгөн бит ундайҙарҙың иҫәбе-һаны юҡ: үҙ мәйеле менән дә, мәжбүр булыу сәбәпле лә. Иртәгәһен уйлаған кеше эшһеҙ ятырмы ла, яҡшыға өмөт итерме? Ә бит яҡшыға өмөт итеп йәшәү кешенең тәбиғи психологик торошо ул, тик заманалар үҙгәреүенә, климат һулышына ҡарап, кеше үҙен төрлө хәлдәргә лә әҙерләп ҡуя, ә беҙҙең арала битарафтар бик күп. Байтаҡ йылдар Эске эштәр системаһының янғын һағы өлкәһендә эшләгән кеше булараҡ, әйтә алам: бөгөн массовый төҫ алған көнкүреш һәм урман янғындарының ҡайһы бер осраҡтары тап ана шул битарафлыҡ, һаҡһыҙлыҡ арҡаһында ла килеп сыға бит. Урыҫ халҡының да ошондай хәлдәргә ҡағылышлы "Күк күкрәмәй тороп, мужик суҡынмай" тигән тапҡыр һүҙе бар. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәр йылдар буйы өйҙәрендәге иҫкергән электр үткәргестәрҙе яңыһына алыштырыу хәстәрлеге күрмәй, аҡса йәлләй, өйөнә газ хеҙмәте, электрик саҡыртып тикшертеп тороуҙы ла кәрәк тапмай, йә булмаһа, эскән килеш тәмәке тартып түшәгендә йоҡлап китә. Һөҙөмтәлә кеше үҙ битарафлығы ҡорбаны була. Әлеге пандемия шарттарына ҡарата ла шуны уҡ әйтергә мөмкин. Күпселек халыҡ хәҙер уны ысынтылап тороп был ҡырғын уйлап сығарылған нәмә тип ҡарай, сит илдәрҙә хатта санитар-эпидемиологик талаптарға ҡаршы протест сығыштары булып алды. Күрәһең, сир менән ҡайҙалыр алыҫта, кемдәрҙер ауырый, ә минең менән ундай хәл булмаясаҡ, тип фекерләй халыҡ. Бер таныш әйтмешләй, хәҙер автобуста йә башҡа йәмәғәт урындарында битлек кейеп йөрөү ҙә хатта уңайһыҙ, ояһ булып тойола башланы, сөнки әйләнә-тирәлә бер кемдең дә битлеге юҡ. Һеҙҙең һорауҙағы насарға әҙер булып йәшәү тигәндә мин икенсе төрлө тотанаҡлыҡ, тәртип, хәбәрҙарлыҡ, хатта ки мәҙәнилек, киң мәғәнәлә грамоталылыҡ тип аңлайым, сөнки бөгөнгө хәлдәрҙән тыш, үткәндәрҙе, ата-бабаларыбыҙҙың тормош-көнкүреш тәжрибәһен өйрәнеү, уларҙан отоп ҡалған һаҡсыллыҡ, алдағыны ҡайғыртып йәшәү кеүек сифаттарҙы ҡуллана белеү; үҙендән, яҡындарыңдың ғүмеренә, һаулығына янаған хәүеф-хәтәрҙе иҫкәртеү сараларына эйә булыу, йә халыҡ дауалау һәм һауыҡтырыу әмәлдәре ярҙамында сирҙе алдан иҫкәртергә өйрәнеү, дөрөҫ туҡланыу, ябай ғына кимәлдә булһа ла спорт менән дуҫлашыу, эшсәнлек, йорт-ҡуранды төҙөк хәлдә тотоу, гел ыңғай көйләнештә булыу кешене күп бәлә-ҡаза һәм сирҙәрҙән аралап ҡалыуы ихтимал. Ә психикаһы сәләмәт, иммунитеты көслө кеше теләһә ниндәй йоғошло сирҙәрҙән дә имен ҡаласаҡ, һәр хәлдә бер аҙ сирләштерһә лә, тиҙ һауығасаҡ. Яманға әҙер булып йәшәү бына шуларҙан ғибәрәттер, тип уйлайым. Киләсәген күҙаллап, иртәгәһен ҡайғыртып, насарға әҙер булып йәшәү элекке замандарҙа ата-бабаларыбыҙ өсөн дә хас булған. "Касып китһәң дә, сәсеп кит", - тип буштан ғына әйтелмәгәндер бит. Һәр выҡыт тейелгеһеҙ запас аҙыҡ-түлеге - маяны булған халҡыбыҙҙың. Бигерәк тә оҙаҡ һаҡлана торған ҡаҡлаған ит, киптерелгән ҡорот, талҡан кеүек ризыҡтар шул турала һөйләйҙер, тип тә уйлап ҡуям.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# МӘРГӘНЛЕК - МӘРТӘБӘ

**Бишенсе тапҡыр уҙғарылған "Мәргән уксы" Төбәк-ара традицион яндан атыу фестивале быйыл Иглин районы ерендә Екатеринбург, Мәскәү, Ярославль, Удмурт Республикаһы, Силәбе, Һамар өлкәләре һәм Башҡортостандың төрлө ҡала, районларынан ҡатнашыусылар йыйҙы. Йылдан-йыл билдәлелек яулай һәм географияһын киңәйтә барған сарала, коронавирусҡа бәйле сикләүҙәр сәбәпле, был юлы ни бары 53 мәргән ҡатнашты. Шуларҙың 37-һе ир-егет, 16-һы ҡатын-ҡыҙҙар булды.**

Быйыл фестивалдә өс төрлө номинацияла еңеүселәр билдәләнде. "Мәргән уксы" традицион яндан уҡ атыу турнирында һәм "3D һунар" ярышында ир-егеттәр араһында беренсе урынды Сибайҙан Хөрмәт Таһиров, ҡатын-ҡыҙҙар араһында Учалы районынан Динә Вәлиева яуланы. Ә бына ныбай уҡ атыу турнирында Ярославлдән Любовь Морока беренселекте бирмәне.



12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Яҡшыға өмөт итеп, насарға әҙер булып йәшәү кәрәк, тигән халыҡ аҡылы бар. Һуңғы ваҡыттағы тәбиғәт катаклизмдары, урман янғындары, йоғошло сир таралыуы кеүек афәт күренештәренә әҙер инекме беҙ? Былар киләсәктә һабаҡ булырмы?

(Башы 1-се биттә).

***Гүзәл ВИЛДАНОВА, философия фәндәре докторы,БДУ профессоры:*** Был һорауҙарға яуап бирер алдынан, ҡыҫҡаса ниндәй күҙлектән донъяға ҡарайһың, шул турала әйтеп китеү мотлаҡтыр, тип уйлайым. Сөнки, ниндәй кимәлдә тороуоңа ҡарап, яуаптар ҙа төрлө буласаҡ. Минең уйлауымса, фәлсәфәүи кимәлдән дөйөмләштереп әйткәндә, донъяға ике төрлө, бер-береһенә ҡапма ҡаршы ҡараш бар: беренсеһе - был донъя осраҡлы рәүештә ҡулайлы шарттар тыуғас, элементар йән эйәләренең барлыҡҡа килеп, уларҙың "Көслөнөкө - замана" ("выживает сильнейший") тигән принцип буйынса эволюция үтеп, юғары кимәлгә тиклем килеп етеүе. Был ҡараш эволюцияның иң юғары бейеклеге - кеше тип һанай. Ошо ҡараш нигеҙендә тормошон төҙөгән кеше, донъяла бөтә нәмә лә (шул иҫәптән ул үҙе лә) осраҡлы барлыҡҡа килгәс, тәбиғәт стихияларына ҡаршы көрәшергә, тәбиғәткә хужа булырға кәрәк, тип эш итә. Совет осоро - был ҡараштың хөкөм һөрөп, кире әйләнеп ҡайта алмаҫлыҡ ниндәй афәттәр сигенә килтереп еткереүенең асыҡ миҫалы булды. Тормошто былай ҡабул итеүҙең ағыуы сәләмәт экологияны юҡҡа сығарыу ғына түгел, ғаилә, тәрбиә, кеше мөнәсәбәттәренә лә ныҡ зарар килтерҙе һәм килтерә. Сөнки, был фәлсәфә яҡлы кеше нисек булһа ла тормоштан күберәк алып ҡалыу теләге менән яна, үлгәндән һуң ундайҙар кем алдындалыр яуап тотоу тураһында уйлап та бирмәй.

Донъяға икенсе, диаметраль ҡапма-ҡаршы ҡараш иһә был донъяның осраҡлы түгеллеген раҫлай. Уның аҡыллы башланғысы, был тормошто гармониялы итеп булдырыусыһы бар, ти. Тимәк, ошо ҡараш яҡлылар, был донъяға кеше хужа түгел, ул бары был гармониялы тормоштоң бер кес кенә өлөшө, тип ышана. Башҡорт халҡы, ғөмүмән, Совет идеологияһы хөкөм һөргәндә лә ошо ҡараштьı тотоп йәшәгән. Был йәшәйештең гармониялы башланғысы - Аллаһы Тәғәлә. Бәхетле булам тиһәң, Ул үҙенең илселәре аша ебәргән тәғлимәттәрҙе өйрәнеп, шуларға ярашлы тормошоңдо ҡороу. Үҙенең донъяға ҡарашын ошо ҡалыпҡа ҡорған кешене иманлы тип атау шарт. Әлбиттә, белем һәм аң кимәле төрлөсә булғанлыҡтан, иман шарттарын үтәп йәшәмәү, хәрәм (тыйылған) ризыҡтар менән туҡланыу үҙ һөҙөмтәләрен бирә: кешенең иманы ҡаҡшай, ул бер юлы ике ултырғысҡа ултырырға маташыусыға оҡшай башлай һәм һөйләгән һүҙе алып барған тормошона, ҡылған эштәренә тап килмәй, ике стандартлылыҡ барлыҡҡа килә. Ҡыҙғанысҡа күрә, хәҙерге заман кешеһенең күбеһе шундай булып бара: Аллаға ла ышанырға теләй, бер үк ваҡытта был матди тормоштоң бөтә ләззәттәрен татығыһы ла килә, ә был асылда мөмкин түгел.



Шуға ла быйыл йәй республикабыҙҙа булған тәбиғәт афәттәре, йәмғиәттәге болғаныштар бер ҙә осраҡлы түгелдер, тип уйларға нигеҙ бирә. Тәбиғәттең ҡоролоҡ (Урал аръяғы райондарында июнь айында бөтөнләй ямғырҙар булманы) шарттары, шул сәбәпле килеп сыҡҡан янғындар йәки, киреһенсә, туҡтауһыҙ ямғыр (июлдең икенсе яртыһынан ямғырҙар башланды) арҡаһында ташҡан йылғалар, серегән бесәнлектәр - быларҙы иманы булған кеше, Аллаһы Тәғәләнең һынауы итеп сабыр ғына ҡабул итә. Сөнки кешенең тәбиғәт күренештәрен үҙгәртерлек хәле юҡ. Әммә аңлы рәүештә тәбиғәткә зыян килтергәндә, иманы булған кеше тыныс күңел менән ята алмаҫ, хәленән килгәнсә, нимә лә булһа эшләр. Быны беҙ республикабыҙҙа августың икенсе яртыһындағы Ҡуштау ваҡиғаларында асыҡ күрҙек.

Һәр ҡыйынлыҡ, ауыр хәлдәр, әлбиттә, кешелеккә уйланыу һәм дөрөҫ һығымталар яһап, күңелендә, ниәттәрендә һәм йөрәгендә сафландырыу өсөн бирелә, тип уйлайым мин. Әгәр һәр бер кеше, мин был донъяла үтеп барыусы бер мосафир ғына, ҡасандыр булмаясаҡмын, киткән хәлдә лә матди байлыҡтан үҙем менән бер генә нәмәмде лә алып китә алмаясаҡмын, шуға күрә иң мөһим байлыҡ - изгелек итеү, иман шарттарына ярашлы тормош алып барыу, кеше рәхмәттәренә лайыҡ йәшәү, эскерһеҙ күңел менән ҡылынған изгелектәр, үҙ бурыстарыңды (ата-әсәңә ҡарата, хәләл ефетеңә, балаларыңа, хеҙмәтсән булараҡ, эшләгән эшеңдә) урын еренә еткереп үтәү шарт икәнен аңлаһа, беҙҙең йәмғиәт нәфсе ҡотҡоһо аша ингән аҙғынлыҡтарҙан әҙ генә булһа ла сафланыр, азат булыр ине. Шуға күрә һығымта рәүешендә шуны әйтергә була: бәхет - ул тәүфиҡлы (иманлы) тормоштоң һөҙөмтәһе. Тәбиғәт афәттәреме, кеше нәфсеһе тыуҙырған йәмғиәт проблемалары булһынмы - кешенең был донъяны барлыҡҡа килтереүсе Аллаһы Тәғәләнең гармониялы ҡанундарын боҙоп, донъяға, хатта тәбиғәт байлыҡтарына хужа булырға ынтылыуынан, үҙен мәңгегә йәшәргә килгәндәй тойоп тотоуынан килә. Тәбиғәтте һәм йәмғиәтте саҡ ҡына булһа ла яҡшы яҡҡа үҙгәртеү өсөн һәр бер кеше үҙенең уйындағын, һәр бер ҡылыҡ-ғәмәлдәрен Аллаһы Тәғәлә күҙәтеп, күреп- белеп тороуын, ғәмәл дәфтәренә теркәй барыуын белергә һәм иҫендә тоторға тейеш. Юлдарҙа ҡуйылған камералар алдында штрафтан ҡурҡып, тиҙлеген кәметкән шоферҙар һымаҡ, алдыбыҙҙа күренмәгән, әммә һәр бер ниәтеңде һәм ғәмәлеңде лә иҫәптән сығармаған "камера" - (Аллаһы Тәғәлә фәрештәләре) бар икәнен иҫтән сығармаһаҡ ине. Шул ваҡытта беҙ йәшәгән урындарҙа тәбиәғәт афәттәре лә, башҡа бик күп социаль бәләләр ҙә күпкә кәмер ине, тип уйлайым.

***Зөбәйҙә КӘЛӘМОВА, хеҙмәт ветераны, тыуған яҡ тарихын өйрәнеүсе, Учалы районы Сораман ауылы:*** Бөгөнгө ғүмерҙә лә ишетмәгән сирҙәр килеп сыға башлауы тураһында интернеттан, гәзиттәрҙән уҡып белеп, йә ишеткеләп торола. Әлеге "ҡороғор вирус" нәмәкәй тураһындағы тапшырыуҙарҙы тәүге айҙарҙа ҡыҙыҡһынып китеп, ТВ каналдары, гәзит биттәренән дә күҙәтеп барғайныҡ. Тора-бара, бер үк нәмәне тыңлау хәлде ала, йөрәккә шом һала башланы. Ирекһеҙҙән Салтыков-Щедриндың "Премудрый пескарь" әҫәре иҫкә төшә.Унда бер ташбаш балыҡтың хәүеф-хәтәрҙән ҡасып, бер кем менән аралашмай, аулаҡ өңөндә боҫоп тик ятыуына ҡарамаҫтан, ғүмеренең фажиғә менән осланыуы тасуирлана. Бөгөн кеше, айырыуса оло йәштәгеләр, тәүге осорҙарҙа ана шул боҫоп йәшәгән балыҡ хәлендә ине.Таныштарым араһында ла ҡурҡып, көн оҙоно өйҙә ултырыусылар булды. Хатта эскәмйәлә ял итеп ултырыусылар ҙа, ауылдашы күренеү менән, йылт итеп өйгә инеп китәләр икән. Метр ярым алыҫлыҡтан аралашыу хәүефһеҙлеге тураһында әллә белмәгәндәр әллә белеп тә онотҡандар йә уға ла хатта ышанмайҙар. Ә бит ауыл ерендә аралашмайынса йәшәү мөмкин дә түгел. Бер-беребеҙ менән көтөү ҡыуғанда ла көн һайын осрашырға тура килә. Һүҙ осо әлеге нәмәгә бара ла төртөлә. Шул саҡ уны икенсе йүнәлешкә борорға тырышыла. Сөнки боронғолар хуп күрелмәгән нәмәләрҙе исеме менән атауҙы тыйған. Артыҡ һөйләү, исемен йыш ҡабатлау уны саҡырыуға бәрәбәр, тиерҙәр ине. Баҡтиһәң, йыш телгә алыу туҡтауһыҙ сәбәләнеүгә тиң. Хатта, үҙең үк ауға барып эләгеү ҡурҡыныcы бар, тигәнде ишеткән бар. Шуға күрә, боронғолар өйрәткәнсә эшләргә булдыҡ. Күп ҡабатлаһаң, насар нәмә матдиләшә икән. Һулаҡай яурын аша өс мәртәбә төкөрөп, тәүбә иттек тә барыһын да Аллаһ Тәғәләгә тапшырып, ниһайәт, тынысландыҡ... Тик әҙәм балаһы яҡшыға ла, яманына лә күнегә. Шулай ҙа халыҡтың күпселек өлөшө үткәндәрҙән һабаҡ ала. Уяулыҡты юғалтмай. Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән бит Хоҙайыбыҙ ҙа.

Әйтә торған шәхси фекерем әлеге лә баяғы "ҡороғор нәмә"гә лә ҡағыла. Билдәле булыуынса, эш урынында берәү бәләгә тарый икән, уның эргәһендәгеләргә лә үҙизоляция талаптарын үтәргә ҡушалар. Әлеге сир арҡаһында яҡындарыбыҙ араһында ике аҙна өйҙә ултырып эшләүселәр ҙә булды. Был турала белеү менән, хәләл ефетем тиҙ арала барыһының да баш-күҙенән ҡорбандар салды. Даими рәүештә икәүләшеп хәжәт намаҙҙары уҡыныҡ. Аллаһ Тәғәләнең күркәм исемдәренең ҡайһы берҙәре, мәҫәлән: әс-Сәләмү (сәләмәт булыусы Зат), әл-Мөъмин (ҡолдарына именлек, тыныслыҡ биреүсе), әл-Хафиҙ (Һаҡлаусы) тип һәр көн иртән зекер әйтәбеҙ.

Бөгөнгө көн менән йәшәһәң дә, алдағы көндөң дә именлеген хәстәрләргә кәрәк, тигән ҡараштамын әлеге мәлдә. Үҙемсә, барыһын да һаҡлауҙа өлөш керетәм: урамда тиҙ ярҙам машинаһын күргәндә, ауырыуҙарҙың сирҙәре үтеүсән, алыҫ юлға сығыусыларға-хәйерле юлдар, туйфәлән машинаһындағы йәштәргә күңелемдән бәхетле ғүмер теләп ҡалам. Авария кеүек нәмәләрҙән аралау ниәтендә, барыһына ла, Йәә Нәфиғ - тимер фәрештәләренә сәләм, Аллаһ үә Әхәд, үә Рәсүли Әхмәди - ямандарҙан яҙлыҡтыр, яҡшыларға олғаштыр, тип теләп ҡаламын.

Ҡаза - ҡаш өҫтөндә, бәлә - аяҡ аҫтында, тиҙәр. Бынан ике йыл элек ейәндәр беҙгә күрһәтмәй генә, май шәм яндырып тыуған көн уйнаған. Шул сәбәпле һарайһыҙ тороп ҡалдыҡ. Бындай хәлдә, тыныслыҡ һаҡлау, үҙеңде ҡулға алыу - тәүге талап . Ярҙамға килгән кешеләр мине түгел, ә миңә уларҙы тынысландырырға тура килде. Әлхәмдулилаһ шөкөр, ваҡытында ярҙам саҡырыу, ауыл халҡының берҙәмлеге арҡаһында ғына бәләнән ҡотолоп ҡала алдыҡ. Ейәндәрҙең шаярыуы беҙгә уяу булырға, итәк-еңде йыйып йөрөргә һабаҡ бирҙе. Һаҡлана белгәнде һаҡлармын, тигән бит. Бынан шундай һығымта яһарға мөмкин: үткәндәрҙән һабаҡ алыу күп осраҡта кешенең булмышына бәйле. Һабаҡ алғаны - алыр, алмағаны - ни хәл итәһең инде - алмаҫ, үҙҙәре өсөн. Йәш саҡта ҡурҡыуҙы бөтөнләй белмәгән ваҡыттар иҫкә төшә. Беҙ, ирле-ҡатынлы Ҡәләмовтар, уҡыусылар, дуҫтар, ата-әсәләр менән бергә Ирәмәл, Арҡайым, Шүлгән мәмерйәһе һ.б. шуның кеүек ерҙәргә сәйәхәткә сыға ла китә торғайныҡ. Һәм һәр ваҡыт тик яҡшыға ғына өмөт итеп, барыһын да Аллаһ Тәғәләгә тапшырғанға, ата-әсәләр, тоғро йән дуҫтарға ышанғанға күрә, именаман сәйәхәт иткәнбеҙ. Ошо көйләнештә йәшәүебеҙҙе дауам итһәк, бер ниндәй афәттәргә лә бирешмәбеҙ, иншалла.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Статистикаға ярашлы, 2020 йылдың 25 сентябренә республикала 8592 кешелә COVID-19 диагнозы раҫланған. Сирлеләр һаны тәүлегенә 36-ға артҡан. Ауырыуҙы 8528 кеше еңгән, 36-һы яҡты донъя менән хушлашҡан. Рәсәйҙә бөтәһе 1136 меңдән ашыу кеше сирләгән, шуларҙың 7212-һе - һуңғы тәүлектә.

✓Сүп сығарыу өсөн хаҡтар арттырылды һәм Хөкүмәттәге кәңәшмә барышында республика торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляев белдереүенсә, 2020 йылдың сентябренән күп фатирлы йортта йәшәүселәр бер кешегә 75 һум, шәхси йорт хужалары 55-әр һум түләйәсәк.

✓Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарын хеҙмәтләндергән "Дюртюлимелиоводстрой" төбәк операторы ҡалдыҡтар менән эш итеүгә тәғәйенләнгән ике заманса технопарк төҙөргә ниәтләй. Был маҡсатта компания 1,1 миллиард һум инвестициялай. Яңы экотехнопарктарға Ағиҙел һәм Нефтекама ҡалалары, Аҫҡын, Балтасы, Бөрө, Борай, Дүртөйлө, Илеш, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Краснокама, Мишкә, Тәтешле һәм Яңауыл райондарынан сығарылған ҡалдыҡтар ташыласаҡ.

✓Башҡортостанда һуң өлгөрә торған культураларҙы - шәкәр сөгөлдөрө һәм көнбағышты йыялар. Республикала 333 мең гектар май бирә торған үҫемлектәр сәселгән, шуның 226 мең гектары - көнбағыш. Уңдырышлыҡ - гектарынан 11 центнер, былтыр был күрһәткес 14,5 булған.

✓"Тоталь диктант" тәүге тапҡыр көҙ - 17 октябрҙә үткәрелә. Акцияла ҡатнашыусылар махсус билдәләнгән урындарға барып та, "#пишемдома" хештегы менән өйҙә лә диктант яҙа аласаҡ. Өйҙән яҙыусылар өсөн махсус xGold ручкаһы һәм бланктар таратыла.

✓Башҡортостанда 436 меңдән ашыу кеше, йәғни республиканың 10 процент халҡы, шул иҫәптән 52 мең бала грипп ауырыуына ҡаршы прививка яһатҡан, тип хәбәр итә төбәк Роспотребнадзоры. Әлеге ваҡытта миҙгелле киҫкен респиратор инфекциялары менән сирләүселәр һаны арта, грипп йоҡтороусылар теркәлмәгән. Бөтәһе 2 миллиондан ашыу кешегә прививка яһау ҡаралған.

✔ *Картуфтың картуфын - Рәсәйҙең икенсе икмәген, үҙебеҙҙә үҫтерелгән кәбеҫтә-кишерен, һуған-һарымһағын да хатта теләгән бер магазинға инеп һатып ала алма әле!*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ХӘЛӘЛ РИЗЫҠ - ҮҘ ЕРЕҢДӘ ҮҪКӘНЕ

**"Башҡортостанда Көньяҡ Американан килтерелгән 100 килограмға яҡын һыйыр ите яндырылды... Өфөнөң "Мясоопторг" йәмғиәтенә бешмә сире таралған биләмәнән - Сантандер департаментынан 92,8 кг ит килтерелгән. Был продукциялар 8 сәғәт дауамында көлгә әйләнгәнсе яндырыу юлы менән юҡ ителгән..."**

Республика киң мәғлүмәт сараларында баҫылған бындай хәбәрҙәргә гәжәпләнмәскә өйрәндек инде: күренеүенсә, яҡшы хәбәрҙәргә ҡарағанда, хәүефлеләрҙәре, яманыраҡтары күберәк һағалай бөгөн беҙҙе һәм уларға ҡарата битарафлыҡ, бошмаҫлыҡ тигән "иммунитет" та барлыҡҡа килә бара, ахыры. Ә шулай ҙа үҙ ҡайғыңды үҙеңә хәстәрләү, үҙ хәүефһеҙлегеңде үҙең күреү кәрәклеген генә оноторға ярамаҫ бөгөн. Сит ил ризыҡтарына ҡыҙыҡмаҫҡа, Башҡортостан ерлегендә таралған, әммә һуңғы осор көн үҙәгенән юйыла барған "Выбирай свое - покупай родное!" лозунгыһын шулай ҙа һәр саҡ иҫтә тотоу кәрәклеген тағы бер киҫәтә юғарыла килтерелгән хәбәр.

Эйе, һәр кем бик теләп һатып алыр ине үҙебеҙҙекен, тик ҡайҙа һуң улар? Баҙарҙарҙа ла, магазиндарҙа ла күпселек төр аҙыҡ-түлек - ситтән килтерелгән, тик уларҙың да байтағы сауҙа кәштәләренә килеп етмәй. Һуңғы биш йыл эсендә Рәсәйгә сит илдән килтерелгән 21 тонна аҙыҡ-түлек ана шулай яндырылып йә бульдозерҙар менән тапатылып, иҙелеп юҡ ителгән. Был хаҡта РФ Таможня контроле идаралығының бүлек начальнигы урынбаҫары Рөстәм Яҡупов хәбәр итә. Ошо ризыҡтың күпселек өлөшө йәшелсә, емешеләк тиһәләр ҙә, унда әлеге һыйыр, сусҡа, ҡош иттәре лә, балыҡ һәм һөт продукттары ла бар икән. Бындай акцияның төп сәбәбе санкция икәнен дә беләбеҙ, шуға күрә был турала һүҙ ҡуйыртып тормайынса, туранан-тура күптән күңелдә өйкәгән ошо һорауҙы бирмәйенсә булмай: үҙебеҙҙә етештереү мөмкинлеге була тороп та, ни өсөн һуң шул тиклем аҙыҡ-түлек беҙгә ситтән килтерелә? Бынан бер нисә йыл элек кенә Рәсәй сауҙаһындағы аҙыҡ-түлектең 80 процент самаһы - сит илдеке, тип яҙып сыҡҡайнылар, әле килеп ошо йылдың февралендә генә РФ сәнәғәт һәм сауҙа министры Д.Мантуров, беҙҙең ил магазиндарындағы импортты тулыһынса ватан туҡланыу тауарҙары алмаштырҙы, тип рапорт бирҙе. Кемдәрҙер был хәбәргә ышанып етмәне, икеләнеү белдереүселәр күп ине, сөнки, ысынлап та, үҙебеҙҙең Өфө магазиндары һәм баҙарҙарына ғына инеп ҡарағанда ла, кәштәләреңдә һаман да - төрәк помидоры, ҡытай һарымһағы, Израилдә үҫтерелгән кишер, редиска, укроп-петрушкаһы, ҡомо



ҡойолоп яткан Египет картуфы... Израиль, тигәндәй, был ил хәҙер Рәсәйгә... ҡара ыуылдырыҡ һата башлаған хатта! Уның тарихы ла туранан-тура беҙҙең илгә бәйле икән. Бикре үрсетеүсе Рәсәй тәжрибә институтынан аталандырылған ыуылдырыҡ алып ҡайтып, йәһүд фермерҙары тиҫтә йыл эсендә тиҙләтелгән ысул менән гигант бикреләр үрсетеп, ҡара ыуылдырыҡ һатыусы донъяла иң эре экспортерға әйләнә һәм һуңғы биш йыл эсендә был ҡиммәтле продукцияны Рәсәйгә лә һата башлаған. Ошо кескенә, Рәсәйҙән 800 тапҡырға бәләкәй ил үҙ халҡын тулыһынса тип әйтерлек - 95 процентҡа аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеп кенә ҡалмай, сит илдәргә лә, шул иҫәптән Рәсәйгә лә әҙләкһеҙ рәүештә йәшелсә-емеш экспортлай. Ә ситтән үҙенә фәҡәт иген, ит, кофе, шәкәр генә һатып ала икән. Израилдең Иордания менән сиктәш Арагва бушлығында урынлашҡан тиҫтәләп фермер хужалығы саң һәм ҡом өҫтөндә ожмах баҡсаһы булдырған, беҙҙәге кеүек "икмәккә яғырлыҡ" уңдырышлы тупрағы ла, һыу ҙа, ямғыр ҙа булмаған сүллектә заманса теплица һәм фермалар төҙөп, гөрләтеп йәшелсә, емешеләктәрҙең барыһын да үҫтерә, үҙ халҡын да, сит илдәрҙе лә, шул иҫәптән Рәсәйҙе лә туйындырып тора.

Әйткәндәй, Америка Ҡушма Штаттары ла беҙҙең кеүек күпләп сит илдән аҙыҡ-түлек һатып алмай, тиҙәр. Уларҙың супермаркеттарында фәҡәт үҙҙәрендә етештерелгән ризыҡ ҡына, ә ситтән килтерелгән ҡайһы бер продукттарға бәләкәй генә урын бүленеп, улар деликатес рәүешендә генә һатыла икән. Ә Ҡытай тураһында әйтеп торорға ла түгел: тауарҙары беҙҙә тулып ятһа ла, шунсама халҡын да үҙ ризыҡ менән тәьмин итә ала улар. Был илдәр үҙҙәренең аҙыҡ-түлек проблемаларын үҙаллы хәл итә, сөнки уларҙа ауыл хужалығы фермерҙары эре кооперативтарға берләшеп, системаға һалынған тәртип буйынса эшләй.

Яңыраҡ бер кәңәшмәлә РФ Премьер-министры М.Мишустиндың әйтеүенә ҡарағанда, Рәсәй агросәнәғәт комплексында ла фермерҙар һәм шәхси эшҡыуарҙар өлөшө ныҡына бара. Дәүләт гранты алып эшләүсе фермерҙар һәм эшҡыуарҙар ауыл хужалығы етештереү күләмен байтаҡҡа арттырыуға өлгәште, тине ул. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ысынбарлыҡ икенсерәкте һөйләй. Рәсәй фермерҙары һәм эшҡыуарҙары кооперативтарға берләшеп, Европа кимәлендә үҫешеп, тулы ҡеүәтенә аяҡҡа баҫып китә алмай әле. Дөрөҫ, документтарҙа кооперативтар һаны байтаҡ күренһә лә, һөҙөмтә юҡ кимәлендә. Беҙҙең илдә ауыл хужалығы эре агрохолдингтар төҙөү юлы менән барғандай, ә ваҡ һәм бәләкәй фермер хужалыҡтарының эш һөҙөмтәләре уларҙың үҙ ихтыяждары һәм эске проблемаларынан ары китә алмай, күрәһең. Картуфтың картуфын - Рәсәйҙең икенсе икмәген, үҙебеҙҙә үҫтерелгән кәбеҫтә-кишерен, һуған-һарымһағын да хатта теләгән бер магазинға инеп һатып ала алма әле! Рәсәйҙәрҙең яратҡан һәм традицион борщ менән щи кеүек милли аш-һыуын, шулай итеп, ете-ят ситтән, диңгеҙ арьяғынан килгән йәшелсәне турап бешерергә мәжбүрбеҙ. Баҙарҙа ла хәҙер үҙе үҫтергәнде һатҡан эшҡыуар йә фермер эшсәнен, йә урындағы продукцияны тәҡдим иткән аралашсыны осратыуы ауыр. Һатыусыларҙың күбеһе шулай уҡ ситтән килтергәнде реализациялай. Һарымһаҡ, ҡабаҡ йә тәмле баҡса помидорын баҡсаһы әбей-һәбейҙән генә һатып алырға ҡала...

Һөт һәм һөт ризыҡтары менән дә шундай уҡ хәл. Ҡайҙан ғына, ниндәй юлдар аша үтеп килеп етмәй улар беҙгә. Ярай әле улары, исмаһам, сит-яттан булмаһа ла, үҙебеҙҙең Рәсәй төбәктәренән, тип йыуанырға ҡала. Ә шулай ҙа... Ҡаҙағстандан да, Белорустан да, Брянскиҙан да, Удмуртиянан да, Мәскәү өлкәһенән дә - тағы әллә ҡайҙарҙан килгән яртышар, берәр йыллыҡ һаҡлау ваҡыты һуғылған һөт ҡаптары күргәҙмәләге кеүек теҙелеп тора - алыусы бик һирәк уларҙы. Ә бына ярайһы тәмле һәм сифатлы булараҡ танылған үҙебеҙҙең Яңауыл һөтөн һәм һөт ризыҡтарын эҙләп тә таба алмаҫың, бәләкәй генә фирма магазиндары ла бик һирәк нөктәләрҙә урынлашҡан баш ҡалабыҙҙа. Ауылдыҡыса етештерелгән Илеш ҡаймағы ла юҡҡа сыҡты, дәүләт ярҙамы менән яңыраҡ ҡайтанан эш башлаған Миәкә заводының "Белое облако", Бөрө, Стәрлетамаҡ һөт ризыҡтарын да гел алып булмай, булған хәлдә лә, һаҡланыу ваҡыты үтмәһә лә, иҫкереп өлгөргән улар - 3-4 көн элеккеләре генә моңайып яталар.

Шулай итеп, үҙебеҙҙә етештерелгәнде һатып алайым, тиһәң, коронавирус-пневмониянан ҡурҡмаһаң, ураү юлдар үтеп, нышып тултырылған автобуста Үҙәк баҙарға киләһең инде. Бындағы баҙарҙа ла күп ризыҡ ситтеке, ләкин, исмаһам, урындағы етештереүселәргә лә бәләкәй генә урын бирелгән. Мәҫәлән, Тәүәкән ризыҡтары билмән, кәтлит, манты, ҡыҙҡылған туҡмас, рафинирланмаған көнбағыш майы кеүек ауылса әҙерләнгән ярымфабрикаттар тәҡдим итә. Турбаҫлы ҡошсолоҡ предприятиеһы ризыҡтарын да ошонда һатып алыу хәйерле: ассортимент төрлө һәм яңы килтерелгән ҡош ите һатып алырға була. Бындай үҙебеҙҙә етештерелгәнде һатыусы сауҙа нөктәләре баш ҡалабыҙҙың башҡа урындарында ла барҙыр, моғайын, ләкин күптәр уларҙың ҡайҙалығын да, нимәләр һатылыуын да белмәй. Шуға күрә, Башҡортостан етештереүселәре республика киң мәғлүмәт саралары аша халыҡҡа хәбәр бирһә, бер аҙ ғына үҙ тауарҙарын рекламаларға өйрәнһә, бер ҙә яҙыҡ булмаҫ ине был. Хеҙмәт емешеңде замансараҡ кимәлдә күрһәтә, танытa белергә, һатырға өйрәнергә күптән ваҡыт инде беҙгә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда 37 кеше үҙ теләге менән яңы коронавирус инфекцияһынан вакцинаны теркәүҙән һуң клиник һынауҙа ҡатнаша. Уларҙың бөтәһе лә көндәлек алып барырға һәм унда үҙҙәрен нисек хис итеүҙәре, прививкаһың башҡа әҙемтәләре тураһында яҙырға тейеш. Вакцинация Өфөнөң 52-се поликлиникаһында үтә.

✔23 сентябрҙән Бөрйән районында коронавирус инфекцияһы таралыуҙы кисектереү маҡсатында сикләүҙәр индерелде. Киләһе ике аҙнала күп кеше ҡатнашлығында саралар уҙғарыу тыйыла, Иҫке Собханғол баҙары ябылған, мәктәптәр ситтән тороп уҡыуға күсә, балалар баҡсаларында дежур төркөмдәр генә эшләй. Райондың үҙәк дауаханаһы мәғлүмәттәрендә төбәктә 14 кеше коронавирус йоҡтороуы, 43 кеше дауахананан тыш пневмония менән сирләүе күрһәтелә. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан 23 сентябрҙә Бөрйән районында Covid-19 йоҡторған 5 кеше асыҡланған, тип хәбәр иттеләр.

✔Владимир Путин Кремлдә сенаторҙар менән осрашыуҙа яңы йылдан пенсияның артыуы тураһында белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, 2021 йылда Рәсәй пенсионерҙарына түләү 6,3 процентҡа индексациялана. "Был 2021 йылда фаразланған инфляциянан 1,5 тапҡырҙан ашыуға күберәк", - тип Владимир Путиндың һүҙҙәрен килтерә "Российская газета". Бынан алда Хеҙмәт министрлығынан киләһе йылда эшләмәгән пенсионерҙарҙың уртаса йыллыҡ пенсия күләме 17 443 тәшкил итәсәген хәбәр иттеләр.

✔Рәсәйҙә 24 сентябрҙән счетчиктарҙы тикшереүгә яңы талаптар үҙ көсөнә инде. Хәҙер Росстандарттың электрон реестрындағы яҙыу ғына иҫәп приборҙарын тикшереү һөҙөмтәләре дөрөҫлөгән дәлилләүҙә юридик көскә эйә буласаҡ. Хәбәр ителеүенсә, хужа теләгәнә ярашлы тикшереү һөҙөмтәһе күрһәтелгән ҡағыҙ документ та бирелеүе мөмкин, әммә ул белешмә рәүешендә һәм юридик көскә эйә булмай.

✔Күмертау ҡалаһының К. Маркс урамы буйлап тимер юлы өҫтөнән юл күпере төҙөләсәк. Төҙөлөшкә Башҡортостан ҡаҙнаһынан 36,3 миллион һум аҡса бүленә. Проектлау эштәре 2020 йылдың 1 декабренә тиклем тамамланырға тейеш.

*✓ "Башҡортостанға, Красноярск һәм Ставрополь крайҙарына, Силәбе өлкәһенә 700 миллион һум бирелә. Шулар иҫәбенә балалар баҡсаларында меңгә яҡын яңы урын булдырыла", - тип билдәләне Михаил Мишустин.*



ҠЫҪҠАСА

# ДҮРТ БАЙРАМ - БЕР КӨНДӘ!

✓ **Быйыл, ҡатмарлы эпидемиологик хәл арҡаһында, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 466 йыллығына, Рәсәй көнөнә һәм милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 266 йыл тулыуға арналған байрам саралары 11 октябргә күсерелгәйне.** Шулай итеп, тиҙҙән бер көндә дүрт байрам үтәсәк. Төп саралар 11 октябрҙә, ғәҙәттәгесә, Салауат Юлаев һәм Шәйехзада Бабич һәйкәлдәренә сәскә һалыуҙан башлана. Баш ҡала халҡын Рус академия драма театры алдындағы майҙанда киске сәғәт алтыла байрам концерты көтә. Ул киске сәғәт 11-ҙә ҙур байрам салюты менән тамамлана. Шулай уҡ "Торатау" Конгресс-холы территорияһында ла республиканың билдәле музыкаль коллективтары, Рәсәй йондоҙҙары сығыш яһаясаҡ. Ҡаланың һәр кешеһе ҡатнаша алһын өсөн ете районда 9 майҙанда һәм мәғариф учреждениеларында байрам саралары, көҙгө йәрминкәләр үткәреләсәк. Төрлө спорт ярыштары уҙғарыу ҙа ҡаралған. Муниципаль мәҙәниәт йорттарында 7-11 октябрҙә концерттар, күргәҙмәләр, фотоконкурстар, уйындар ойоштороласаҡ. Ә 5-10 октябрҙә барлыҡ китапханалар китап күргәҙмәләре, әңгәмәләр, күҙәтеүҙәр, әҙәбиәт менән таныштырыу, конкурс һәм викториналар уҙғара. Байрам саралары планы проекты хакимиәттең рәсми сайтына ҡуйылған, унда үҙгәрештәр булыуы мөмкин.

✓ **24-25 сентябрҙә Ғафури районының "Красноусол" шифаханаһында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумы уҙҙы.** Сара Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан Башҡорт теле йылы сиктәрендә ойошторолдо. Башҡорт телен популярлаштырыу, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй төбәктәрендә телде уҡытыу шарттарын яҡшыртыу, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ киңерәк ҡулланыу мөмкинлектәрен барлау маҡсатында республика һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, район һәм мәктәп методик ойошмалары етәкселәре, инновацион дөйөм белем биреү ойошмалары директорҙары, һөнәри һәм юғары белем биреү учреждениеларының башҡорт теле уҡытыусылары, район һәм ҡала мәғариф идаралыҡтарының (бүлектәре) туған телдәр өсөн яуаплы белгестәре һәм методистары ҡатнашты. Сараға йәмғеһе 250 тирәһе кеше килде.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары студент отрядтарына дәүләт ярҙамы күрһәтеү тураһында закон ҡабул итте.** Унда педагогия, төҙөлөш, медицина, ауыл хужалығы, көнкүреш хеҙмәте һәм юл күрһәтеүселәр, ҡотҡарыусы, янғын һүндереүселәр отрядтары һәм үҫмерҙәрҙең эшсе отряды күрһәтелгән. Башҡортостан территорияһында эшләгән барлыҡ студотрядтар махсус исемлеккә индереләсәк. "Дәүләт ярҙамы студент отрядтары эшен ойоштороу менән шөғөлләнеүселәргә, йәштәрҙе эшкә алған предприятиеларға, студент ойошмалары эшмәкәрлеген популярлаштырған кешеләргә дәртләндереү рәүешендә булыуы мөмкин. Студент отрядтарына мәғлүмәт-методика яғынан булышлыҡ итәсәктәр", - тине республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КРЕДИТҠА ТЕХНИКА

**Башҡортостан АПК предприятиелары "Росагролизинг"тың льготалы һәм коммерция программалары буйынса 1,7 миллиард һумлыҡ ауыл хужалығы техникаһы һатып алған. 2,3 млрд һумға яҡын ғариза хупланған, төбәктең 3,5 млрд һумға тиклем ауыл хужалығы техникаһы алыу мөмкинлеге бар, тип хәбәр итә БР ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.**

Килешеүҙәр буйынса 1,5 млрд һумлыҡ техника әле хужалыҡтарға барып еткән һәм улар урыу-сәсеү эштәрендә ҡулланыла башлаған. Алдынғылыҡта Благовар районы предриятиелары (154 млн һум), Шишмә (135 млн һум), Бәләбәй (112 млн һум), Илеш (101 млн һум), Баҡалы (64 млн һум). "Үҙәк" МТС-ы дәүләт предприятиеһы 111 миллион һумлыҡ техника һатып алған. "Киләһе йыл лизингтың ташламалы программалары мөмкинлектәрен ҡулланып, 5 миллиард һумлыҡ техника алыуҙы маҡсат итәбеҙ, ғаризалар ноябрь-декабрь айҙарында ҡабул ителә", - тине төбәк АПК етәксеһе. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәткә хужалыҡтары кредитҡа техника ала алмаған муниципалитеттарға ярҙам итеү ысулдарын эҙләргә ҡушты.

# ТӨБӘКТӘРГӘ СУБСИДИЯЛАР АРТА

**Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин йәш ярымдан өс йәшкә тиклемге балаларға мәктәпкәсә учреждениеларҙа өҫтәмә урындар булдырыу өсөн төбәктәргә субсидия бүлеү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. "Башҡортостанға, Красноярск һәм Ставрополь крайҙарына, Силәбе өлкәһенә 700 миллион һум бирелә. Шулар иҫәбенә балалар баҡсаларында меңгә яҡын яңы урын булдырыла", - тип билдәләне Михаил Мишустин вице-премьерҙар менән кәңәшмәлә.**

Шулай уҡ Хөкүмәт ишле ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү - уларға өсөнсө һәм артабанғы балаларға айлыҡ аҡса биреү өсөн төбәктәргә субсидияларҙы яңынан бүлде. Рәсәйҙең 36 төбәге, шул иҫәптән Башҡортостан ошо маҡсатта 2,5 миллиард һумдан ашыу аҡса алырға тейеш. Шул аҡсаны иҫәпкә алып, быйыл федераль бюджеттан бындай сығымдарҙы берлектә финанслау өсөн бөтәһе 50 миллиард һумдан ашыу йүнәлтелә, тип белдерҙе премьер-министр.

"Демография" милли проекты сиктәрендә 2020 йылда Башҡортостанда 3 900 урынлыҡ 24 балалар баҡсаһы төҙөлә. Рәсәй һәм республика бюджеттарына бүленгән аҡсаның дөйөм суммаһы 3,7 миллиард һумдан ашыу тәшкил итә.

# ХЕҘМӘТТӘР ЦИФРЛАША...

**Башҡортостанда төҙөлөш өлкәһендәге биш дәүләт хеҙмәте - ер участкаһының ҡала төҙөлөш планын (ГПЗУ) әҙерләү һәм биреү, төҙөлөшкә рөхсәт, файҙаланыуға тапшырыуға рөхсәт, планлаштырылған төҙөлөш тураһында һәм төҙөлгән йәки яңыртылған объекттарҙың тура килеүе тураһындағы иғландар - электрон форматта биреләсәк.**

Был төҙөлөш өлкәһен цифрлаштырыуға бәйле мөмкин буласаҡ, уны Башҡортостан Хөкүмәте республикала булдырыласаҡ Төбәк менән идара итеү үҙәге (ЦУР) ситуацион-мониторинг проекты сиктәрендә атҡармаҡсы. ЦУР-ҙа төҙөлөш индустрияһы айырым концептуаль йүнәлеш була. ЦУР анализлау һәм ҡарарҙарҙы тиҙ ҡабул итеү маҡсатында бөтә объекттар буйынса ситуацияға йүнәлтелгән мәғлүмәти базаларҙы берләштерә. "Беҙ төбәктең үҫеше менән цифрлы мәғлүмәт моделе буйынса идара итеүҙе формалаштырыуға күсеүгә йүнәлеш алабыҙ. Бының өсөн даими рәүештә яңы мәғлүмәттәр талап ителә, - ти был турала БР дәүләт идараһының цифрлы үҫеш министры Геннадий Разумикин. - Бөгөн Республика ҡала төҙөлөш үҙәге менән берлектә РФ Дәүләт төҙөлөшө Башҡортостандың ҡала төҙөлөшө эшмәкәрлеген тәьмин итеү дәүләт мәғлүмәт системаһын тулыландырыу буйынса күп эшләй, был киләсәктә һуңғы яңылыҡтарҙы күҙәтеүҙән аныҡ ихтыяждарҙы планлаштырыу һәм модель әҙерләүгә күсергә ярҙам итәсәк. Мәҫәлән, "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә мәктәп төҙөү уның нисә урынлыҡ булыуын, торлаҡ төҙөлөшө пландарын, булған инженер коммуникацияларын, транспорт үткән ерҙән алыҫлығын һәм юл инфраструктураһын ҡарап, система тәҡдим иткән варианттарға нигеҙләнеп эшләнәсәк".

# ЭШТӘР ЙӘНЛӘНӘ...

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында" законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссияһы Терминология хеҙмәтенең яңыртылған составы менән осрашты. Терминология хеҙмәтен йәнә филология фәндәре докторы, профессор Миңһылыу Усманова етәкләйәсәк.**

Ултырышта Терминология хеҙмәтенең артабанғы эш йүнәлештәре билдәләнде: терминологик һүҙлектәр, Башҡортостан Республикаһының Терминология хеҙмәте сайтын төҙөү, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы ҡарамағында республика тәржемә үҙәген ойоштороу, башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлау буйынса республика ғилми-ғәмәли конференцияһын, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһында муниципаль берәмектәр, ҡала округтары эргәһендәге комиссияларҙың яуаплы секретарҙары өсөн квалификацияны күтәреү курстарын уҙғарыу.

Фекер алышыуҙа Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның яуаплы сәркәтибе Зөлфиә Ханнанова, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми етәксеһе, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисаметдинова, Башҡортостан Республикаһының Милли архивы директоры урынбаҫары Ниязбай Сәлимов, филология фәндәре докторы Луиза Сәмситова һәм башҡалар ҡатнашты.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында" Башҡортостан Республикаһы законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссия эргәһендә Топонимия хеҙмәте лә эшләй. Уның етәксеһе - Башҡорт дәүләт университетының физик география, тыуған яҡты өйрәнеү һәм туризм кафедраһы доценты, география фәндәре кандидаты Инбер Япаров.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөтә Рәсәй конкурсының 2019 йылғы "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" төбәк этабында "Муниципаль иҡтисад сәйәсәте һәм муниципаль финанстар менән идара итеү" номинацияһында Өфө ҡала округы беренсе урын яуланы. Әлеге ваҡытта баш ҡаланы ярыштың федераль кимәлендә ҡатнаштырыу өсөн ғариза ебәрелгән.

✓Радмил Мөслимов Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул хакимиәттең юлдар, яһалма ҡоролмалар төҙөү һәм ремонтлау идараһын етәкләне. Элекке вице-мэр Салауат Хөсәйенов Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутат булып һайланды.

✓Уҡытыусылар көнө алдынан Өфөнөң Октябрь районында " Уҡытыусы көнөндә рәхмәт менән!" флешмобы башланды. Ҡатнашыу өсөн шиғри формала мөрәжәғәт, ҡотлау һүҙҙәрен видеоға төшөрөп, "Бәйләнештә" һәм Instagram селтәрҙәренә #мойучитель #любимомуучителю #октябрьскийрайонуфы хештегтары менән һалырға кәрәк.

✓Баш ҡалала "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-заповедник фондынан алынған "Һөйәк эше оҫтаһы" күргәҙмәһе асылды. Унда "Өфө-II ҡаласығы" археология ҡомартҡыһы ерендә табылған үҙенсәлекле ҡаҙылма әйберҙәр һәм һөйәктән яһалған әҙерләмәләр күрһәтелгән.

✓Өфөлә "Уфахимпром" заводының элекке 41-се цехы ағыҙған һыуҙы тотҡарлау ҡоромалдарына капиталь ремонт яһаласаҡ. Был маҡсатта ҡала бюджетынан 97,3 миллион һум аҡса бүленә. Шулай уҡ БР Экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, "Экология" милли проекты сиктәрендә заводҡа бәйле барлыҡ мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатындағы проекты 2021 йылда финанслау ҡаралған, уның буйынса эштәр 2022 йылда башланасаҡ. Санация хаҡы 2013 йылда уҡ 4 миллиардтан ашыу тип баһаланған булған.

✓"Астра" Өфө ғилми-етештереү үҙәге һаулыҡ һаҡлау һәм башҡа өлкәләрҙә ҡулланылған ҡан, һыу һәм бәүел анализаторҙары уйлап таба һәм етештерә. Әйберҙәр халыҡ-ара сертификация алған, улар 15-20 йыл боҙолмай хеҙмәт итә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров киләһе "Һаулыҡ сәғәте"нә "Астра" үҙәге менән хеҙмәттәшлек итеү юлдарын тәҡдим итергә ҡушты.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АВТОМОБИЛДӘР

## газ яғыулығына күсә

**РФ Премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйған ҡарарға ярашлы, Башҡортостан автомобилдәрҙе метан газына күсереү федераль программаһына инә. Программала 23 төбәк ҡатнаша. Унының асылы шунда: автомобиль хужаһы газ ҡоралмалын ҡуя, дәүләт уға сығымдарының өстән ике өлөшөн компенсациялай, бер өлөштө "Газпром" ҡаплай. Милексегә ни бары 10 процентты ғына түләргә ҡала. Быйыл 1389 автомобилде йыһазландырыу планлаштырыла, киләһе йылға - 2200.**



**Программала кем ҡатнаша ала?** Теләгән һәр автоһәүәскәр ҡатнаша ала, әммә бер сикләү бар: машинаның файҙаланыу мөҙҙәте. Быйыл 2010 йылдан һуң сыҡҡан автомобиль хужаларына ташлама бирелһә, 2021 йылда - 2013 йылдан, 2022 йылда 5 йылдан да артыҡ тотонолмаған машина хужалары аласаҡ.

**Метан хәүефһеҙме?** Тәбиғи газ - яғыулыҡтың иң экологик таҙа һәм хәүефһеҙ төрө. Пропандан айырмалы, ул һауанан ике тапҡырға еңелерәк, шуға күрә баллон зыян күргән осраҡта йәки герметизация ныҡлы булмағанда бер урында тупланмай, шунда уҡ таралып бөтә.

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?** Газ ҡоралмалын ҡуйыу техник йәһәттән ҡатмарлы процедура, шуға күрә белгестәргә - партнер үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Башҡортостанда улар 17, шул иҫәптән Өфөлә - 10, Өфө районында - 1. Бер ниндәй справка ла кәрәкмәй, автомобилегеҙҙе йыһазландырыу пунктына тапшыраһығыҙ һәм 5-6 сәғәттән килеп алаһығыҙ. Ташлама автоматик рәүештә яһала.

**Ни хаҡ?** Барыһы ла автомобилдең маркаһына һәм уның характеристикаларына бәйле. Уртаса хаҡ - 90 мең һум. Һеҙгә 54 мендән алып 84 меңгә тиклем ташлама яһаясаҡтар, әммә дөйөм сумманың 2/3 өлөшөнән артыҡ түгел. Йәғни минималь хаҡтарҙа 36 мең түләргә тура киләсәк. Был аҡсаның бер өлөшөн "Газпром" ҡаплай, әммә аҡсалата түгел, ә яғыулыҡ менән. Программала ҡатнашыусы һәр кеше 27 мендән 48 меңгә тиклем сумма һалынған яғыулыҡ картаһына эйә буласаҡ. Уның менән заправкала яғыулыҡтың ярты хаҡын түләргә мөмкин. Һөҙөмтәлә, автомобилде йыһазландырыу 9 мең һумға төшәсәк.

**Отошломо?** Машинаның күпме юл үтеүе ҡуйылған баллондың күләменә бәйле. Мәҫәлән, Lada Granta автомобиленә 90 литрлыҡ баллон ҡуялар икән, уға 22 кубометр газ һыя. Бер куб 17 һум тора, йәғни тулы баллон 374 һумға төшә. 100 километрға 8 литр яғыулыҡ киткәндә, тулы заправка 270 километрға етә. Ошо уҡ аҡсаға 8 литр бензин алырға була, ул ни бары 100 километрға ғына етәсәк. Тимәк, юлда йыш йөрөгәндәрҙең ҡоралмалға тотонолған аҡсаһы үҙен тиҙ арала аҡлаясаҡ.

**Тағы нимә белергә кәрәк?**

● Иң төп уңайһыҙлыҡ - газ заправкаларының аҙ булыуы. Өфөлә улар әлегә 5 урында, тотош Башҡортостан буйынса 17 - Стәрлетамаҡта һәм Салауатта - икешәр, Күмертау, Октябрьский, Мәләүез, Сибай, Ҡырмыҫҡалыла, Мәскәү ауылында һәм Ерғән ҡасабаһында - берәр. Йыл аҙағына тиклем республикала тағы ла 7, киләһе ике йылда - 19, биш йыл эсендә кәм тигәндә 100 заправка асыу планлаштырыла.

● Газ яғыулығына күскәс, автомобиль ике яғыулыҡлы буласаҡ. Зәңгәр яғыулыҡ бөтһә, ул автоматик рәүештә бензинға күсәсәк.

● Ҡоролма ҡуйған компания иң әҙе бер йылға һәм 30 мең километр юлға гарантия бирергә тейеш.

● Газ баллоны ҡоролмаһын ҡуйыу транспорт сараһы конструкцияһына үҙгәрештәр индереү тип иҫәпләнә һәм килешеү талап итә. Быны ЮХХДИ-ҙа ПТС һәм транспорт сараһын теркәү таныҡлығына яҙып ҡуйырға кәрәк. Былларҙы йыһазландырыу пункты аша эшләргә була.

● Башҡортостанда теркәлгән һәм тәбиғи газ яғыулығына күскән автомобиль хужалары транспорт һалымын түләгәндә 50 процент ташламаға хоҡуҡлы.

**Станислав ШАХОВ.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЯМҒЫРЫ ЛА БӘЛӘ...



**Яҙын-көҙөн ямғырҙар башланһа, ҡала хакимиәтендә лә ямғыр һыуҙарын ағыҙа торған канализация мәсьәләһе күтәрелә. Сираттағы оператив кәңәшмәлә лә был тема көн үҙәгенә сығарылды.**

Был өлкәләге хәл менән "СУРСИС" МБУ-һы директоры Рөстәм Әмиров таныштырҙы. Өфөлә ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы селтәре 536,4 километр тәшкил итә, уның 182,5 километры - муниципаль милектә, 123,6 километры хужалыҡ итеүсе субъекттарҙың ведомство милегендә, 230,3 километрының хужаһы юҡ. Һуңғылары буйынса асыҡлау эштәре алып барыла һәм яйлап муниципаль милеккә тапшырыла. Алдағы йылдарҙа уларҙың 43,9 километры ҡалаға бирелгән, быйыл предприятие хеҙмәтләндергән күләм тағы ла 58,4 километрға артҡан.

Рөстәм Әмиров белдереүенсә, быйыл 175 ҡоҙоҡ ремонтланған, 100 рәшәткә алмаштырылған һәм ҡуйылған, шулай уҡ 16,6 километр селтәр таҙартылған. "Боҙлауыҡҡа ҡаршы юлдарға ҡом ҡатнашмаһын һибеү туҡтатылғас, канализацияның ләмләнеүе кәмене һәм яҙғыһын ирегән һыуҙарың тиҙерәк ағып бөтөүе күҙәтелә", - ти сығыш яһаусы.

Шулай ҙа, ҡала территорияһында бер нисә проблемалы урам бар. Канализация булыуға ҡарамаҫтан, көслө йәки туҡтауһыҙ яуған ямғырҙар осоронда СССР-ҙың 50 йыллығы, Николай Ковалев, Баҡалы, С. Юлаев проспекты, Пугачев, Армавир һ.б. урамдарҙа һыу йыйыла. Киләсәктә бындай күренештәрҙе киҫәтеү өсөн баш ҡала мэры Өлфәт Мостафин ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы булмаһа, ҡалала бер генә яңы объектты ла ҡабул итмәскә ҡушты.

Сентябрҙә иғтибар үҙәгендә булған икенсе мөһим мәсьәләләрҙең береһе - белем биреү учреждениеларында туҡланыуҙы ойоштороу. Был хаҡта ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова һөйләне. Мәғлүм булыуынса, быйыл 1 сентябрҙән уҡыусылар мәктәптәрҙә балансланған һәм Роспотребнадзор идаралығы раҫлаған берҙәм меню буйынса туҡлана. Өфөлә 59 мең башланғыс синыф уҡыусыһы бушлай ашай. Бынан тыш, 66 мең бала льготалы туҡлана (52 процент). Был - былтырғы менән сағыштырғанда 52 мең балаға күберәк. Елена Хаффазова белдереүенсә, Өфө мәктәптәрендә барлыҡ санитар-эпидемиолог талаптар үтәлә, аш-һыу әҙерләүҙә һәм таратыуҙа ҡатнашҡан хеҙмәткәрҙәр шәхси һаҡланыу саралары ҡуллана. Һәр синыф өсөн айырым тәнәфес билдәләнгән, өҫтәлдәр бер-береһенән метр ярым аралыҡта урынлаштырылған. Бер синыф ашап сыҡҡандан һуң ашханала дезинфекция үткәрелә. Октябрҙән мәктәп менюһын ата-әсәләр комитеты ағзалары ла тәмләп ҡарай аласаҡ. Гөмүмән, ата-әсәләрҙең һәр мөрәжәғәте оператив рәүештә тикшерелергә һәм хәл ителергә тейеш. Өлфәт Мансур улы бының өсөн "ҡыҙыу линия" булдырырға ҡушты.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ӨФӨГӘ ЮЛДАР КӘРӘК

Өфөнөң 2040 йылға тиклем әҙерләнгән генераль планына яңы меридиональ магистраль - Көнбайыш диаметрын төҙөү тураһында пункт та индерелгән. Күп һыҙатлы автомобилдәр юлы Телеүҙәк артындағы урындан, Ағиҙел йылғаһы аша төҙөләсәк автомобилдәр өсөн тәғәйенләнгән күпер тирәһенән башланып, яр буйлап һуҙыла һәм Интернациональ урамы сатындағы күперге барып тоташырға тейеш. Башҡортостандың баш ҡалаһы төҙөлөшө документын әҙерләгән Мәскәү Генплан институты шундай мәғлүмәттәр бирә.

"Бөгөн Өфөнөң берҙән-бер меридиональ магистрале ролен Салауат Юлаев проспекты үтәй һәм уға көндән-көн йөкләмә арта, уны алмаштырырлыҡ яңы магистраль кәрәк, - ти Мәскәү Генплан институтының ҡала транспорт системалары секторы үҫеше начальнигы Наталья Кармадонова. - Төп проблема Көнбайыш диаметр үткән урында ер ҡатламдарының тейешлесә ныҡлы булмауы һәм тигеҙһеҙ рельефта. Беҙ Димдән тарихи үҙәккә күпер һалып, яңы юл төҙөү һәм Ҡариҙел йылғаһы арьяғында Көнсығыш урау юлы кеүек альтернатив варианттарҙы ла ҡараныҡ. Әммә Көнбайыш диаметр төҙөлөшөнән баш тартыу Салауат Юлаев һәм Октябрь проспекттарына, Менделеев урамына, шулай уҡ Затон күпере - Галле урамы - М-5 һәм М-7 федераль трассаларын тоташтырыусы Көнсығыш сығыу юлына ауырлыҡ артыуға килтерәсәк. Шуға күрә Көнбайыш диаметрҙы төҙөүгә баҫым яһайбыҙ".

Өфөнөң ҡайны бер белгестәре, яңы меридиональ магистраль кәрәклеген танып, Димдән Интернациональ урам сатына тиклем автомобилдәр юлын Ағиҙелдең һул яҡ ярында, Өфө ярымутрауынан ситтә һалыу вариантын тәҡдим итә. Был осраҡта ер ҡатламдары ла, уның тигеҙлеге менән дә проблема булмаясаҡ һәм проекты тормошҡа ашырыу мөҙҙәте, хаҡы һиҙелерлек кәмергә тейеш.

**Сергей НИКОЛАЕВ.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бала тымауланһа

❖ Яңы һығылған лимон һуты һәм балды 1:1 нисбәтендә бутап, танауға 1-2 тамсы тамыҙырға.

❖ Яңы сөгөлдөр, кишер һәм һарымһаҡ һутын һығырға. Сөгөлдөр һәм кишер һутына 1:1 нисбәтендә үҫемлек майы өҫтәргә, бер нисә тамсы һарымһаҡ һуты ҡушырға. Ауырығанда көнөнә 3-4 тапҡыр танауға тамыҙырға.

❖ Алоэ һутын көнөнә 3-4 тапҡыр танауға 3-5 тамсы тамыҙырға.

❖ 1 балғалаҡ балды 2 ҡалаҡ ҡайнатылған һыуҙа иҙеп, мамыҡты сылатырға һәм 20 минутҡа танауға ябырға.

❖ Үгәй инә үләне һутын көнөнә бер нисә тапҡыр 3-5 тамсы тамыҙырға.

## Күрәгә

❖ Бөйөрҙәге ҡомдо күрәгә (курага) сығарырға ярҙам итә. Ас ҡарынға 200 грамм күрәгә ашарға, төшкө ашҡа тиклем ашамаҫҡа ла, эсмәҫкә лә. Дауаланғандың 8-10-сы көнөнә бөйәл менән ҡом сығыуы күҙәтелер. 10 көн шул рәүешле күрәгә ашап дауаланғандан һуң, 10 көн туҡтап торорға. Тулыһынса һауығыу өсөн 10 килограмм күрәгә ашарға кәрәк.

## Яҫы табанлылыҡ

❖ Яҫы табанлылыҡтан (плоскостопие) арыныу өсөн баҫып торған ерҙән аяҡ остарына күтәрелегеҙ һәм ҡапыл үксәгә баҫығыҙ. Ошо күнекмәне иртәле-кисле 30-ар тапҡыр эшләгән осраҡта, яҫы табанлылыҡ 1 айҙан бөтә.

## Имән сәтләүеге

❖ Ашҡазан эшләмәй торһа, имән сәтләүегенән яһалған эсемлек ярҙам итә. Уны әҙерләү өсөн сәтләүектәрҙе таҙартып киптерергә һәм ҡәһүә тартҡыс ярҙамында онтаҡларға. 1 балғалаҡ имән сәтләүеге онтағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һөт өҫтәргә була. Был эсемлекте ашау-ашамауға ҡарамай, сәй урынына эсергә кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Эскесе ирендә нисек тә булһа дауаларға кәрәклеге көн кеүек асыҡ. Алкоголик үҙен бер ҡасан да сирле кешегә һанамай. Үҙенең ана шул хәлен таныу бәхетенә ирешкән кеше һис шикһеҙ ошо сирҙән ҡотолорға теләйәсәк.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Өфө ҡалаһының Археология һәм этнография музейында ҡуш элмә менән ҡайылған ике алъяпҡыс һаҡлана. Береһе Әлшәй районы Тәүәтәй ауылынан (кол. Э-14-5), XX быуат башында тегелгән; икенсеһе Дәүләкән районы Буранғол ауылынан (кол. Э-27-16), һуңғыраҡ осорҙа эшләнгән. Алъяпҡыстарҙың биҙәге сәскәле. Уларҙың ҙур булмаған түш өлөштәре ҡайылған гөлләмәләр менән биҙәлгән. Беренсе алъяпҡыстың итәген һабаҡтар, япраҡтар һәм сәскәләрҙән торған ҡуйы биҙәк зауыҡлай. Икенсеһендә күк сәскәгә (василек) оҡшаш сәскәләрҙән торған гөлләмәле һауыт сигелгән. Ҡайылған әйберҙәр күп төҫлө. Бер осраҡта беж, ҡуйы ҡыҙыл, ҡыҙғылт һары, ҡара, йәшел ептәр ҡулланылған; икенсеһе беж, ҡыҙғылт һары, алһыу, зәңгәр төҫтәге ептәр менән ҡайылған.

Һуңғы осорҙарға ҡараған сәскәле орнаменттарҙың айырым үрнәктәре (сәскәһе, емештәре) ҡайһы бер осраҡта күпертеп сигеү (ҡаймалы келәм элмәһе) ярҙамында башҡарылған. Борон көньяҡ башҡорттары сәнғәтенә хас булмаған, күләмле фактура тыуҙырған был алым Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышына күсеп ултырып, башҡорттар менән бер ауылдарҙа тығыҙ аралашып йәшәгән татарҙарҙан үҙләштерелгәндер, тип фаразларға була.



*Намаҙлыҡтағы күп төҫлө орнамент (БР, Әлшәй районы). Автор фотоһы. 1969*

Баш һәм туй яулыҡтарын, ирҙәр күлдәген биҙәгәндә сатрашлап сигеүҙе ҡулланыу Урал буйы көньяғының тағы бер үҙенсәлеге булып торған. Был алым һуңғы осорҙа үҙләштерелгән тип иҫәпләргә лә булыр ине, әммә "нағыш" тигән атамаһы бар. Үрҙә әйтелгәнсә, был термин менән Урал аръяғындағы бөтә хисаплы ҡайыу алымдары аңлатылған, шул иҫәптән һарауыстарҙа һәм боронғо ирҙәр күлдәктәре орнаменттарында ҡулланылған сатрашлап ҡайыу ҙа. Музейҙарҙа Урал буйының (Ишембай районы) ирҙәр туй күлдәктәренең яғаһы һәм иҙеүендәге ҡайылған биҙәк үрнәктәре һаҡланған, улар ерлек туҡыма ебе һанына тура килтереп, шыма ҡайыу алымы менән башҡарылған. Ҡайһы бер геометрик орнаментлы һыҙаттарҙы сатрашлап сигелгән ҡайма уратҡан.



*Ирҙәр күлдәге яғаһы әҙерләмәләрендә хисаплы ҡайыу (Ишембай районы). XX б. башы.*

Урта Азия халыҡтарында сатрашлап ҡайыу алымы шаҡтай популяр булған. Т.А. Жданко хәбәр итеүенсә, ҡарағалпаҡтарҙа сатрашлап ҡайыу - "нагыс" ҡабартма ҡайыуға ҡарағанда һирәгерәк осраһа ла, "боронғо һәм ҡарағалпаҡтарҙыҡы" тип иҫәпләнә. Тажик һәм үзбәктәрҙә сатрашлап ҡайыу (крест) һәм ярым сатрашлау (полукрест) күлдәк, яулыҡ, эйәр япмаларын биҙәүҙә ҡулланылған. Был йөйҙөң ҡайһы берҙә "ираҡ йөйө" тип аталыуы уның сығышы Көньяҡ-көнбайыш Азиянан булыуы һәм бындағы халыҡтар тәьҫирендә Көнсығыш Европаға таралыуы тураһында һөйләргә мөмкин.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ШАҢДАУ*



**Гәзитебеҙҙең 36-сы һанындағы "Бәхәс ҡорайыҡмы?" тигән рубрикала Рәсилә исемле авторҙың монологын уҡып сыҡҡас, күптәр был гүзәл заттың ысынлап та бәхетһеҙ булыуына инанып, уны йәлләгәндер. Мин дә йәлләнем. Әммә, "өмөтһөҙ - шайтан", тигәндәй, үҙем шәхсән "хәл ителмәҫтәй ситуация булмай ул", тигән инаныуҙамын. Кемдер берәүҙең был ҡатын-ҡыҙға "Эскесе ирендән айырыл да кит", - тип еңел генә кәңәш биреүен дә күҙаллайым. Һирәгерәктәр "Түҙеп йәшә", - тип әйтәсәк. Мин Рәсилә һылыуға: "Башҡаларға ҡарап фекерлә лә, үҙеңә ҡарап Аллаһ Тәғәләгә шөкөр ит", - тип кәңәш итер инем. "Ни өсөн? Ирем эсексе булғаны өсөнмө?..." - тиәсәк ул мотлаҡ. "Юҡ, Рәсилә ҡыҙым, - тип әйтер инем мин уға. - Уның өсөн түгел, Аллаһ хаҡы өсөн".**

# "ТӘҮФИҠЛЫ БУЛДЫМ,

## әммә бәхеткә өлгәшә алманым"



Тирә-яғыңды байҡап, кешеләрҙең нисек йәшәгәнен ҡараһаң, ысынлап та, үҙең әйтмешләй, бик күптәр бына тигән йәшәп тик ята һымаҡ. Әммә һәр бер ғаиләнең эсенә инеп ҡарап булмай икәнлеген үҙең дә һис инҡар итмәҫһең, моғайын. Кемдер берәү һиңә ирһеҙ тыныс ҡына йәшәп ятҡан һымаҡ тойола, әммә уның яңғыҙлыҡтан ут йотоп ғүмер кисергәнлеген башҡалар белмәй. Икенсе берәү ире менән һис бер ҡайғыһыҙ ғүмер итә, әммә бик бәхетле тип һаналған ғаиләлә лә һәр саҡ ниндәй ҙә булһа проблемалар килеп сығып тора. Һәр кеше өсөн үҙенең проблемаһы иң ҙур булып тойола. Бер кем дә һиңә килеп ғаиләһенең ана шул хәлен һөйләп тормай, әлбиттә.

Уйланып алайыҡ әле, Рәсилә һылыу. Бер ғаилә финанс мәсьәләһендә һәр саҡ ҡытлыҡ кисерә, ә һин дә мин йәшәп ятҡан икенсеһе автоһәләкәткә осрап, машинаһын ватҡан, өсөнсөһөнөң йорт - ҡураһы янып, өйһөҙ ҡалған, дүртенсеһенең өйөн һыу баҫҡан һ.б.

Фәлән ғаилә бай, ир ҙә аҡсаны көрәп ала, ике ҡатлы коттежда йәшәй. Әммә, бер балаһы сирле тыуып, нисәмә йыл түшәктә ята. Инде матур егет төҫөнә ингән, мыйыҡ сығып килгән, әммә бер йәшлек сабый кәүҙәле был баланы һаман күтәреп йөрөгән, ҡалаҡ тотоп ашатҡан ата-әсәһе һиңә ҡарағанда бәхетлерәкме? Үҙеңдең янында, кемдер әйтмешләй, шалҡандай һап-һау балаларың йүгереп йөрөй, һин бәғзе ваҡыт уларға хатта асыуланып та алаһың. Ошо йәһәттән һин бит күпкә бәхетлерәк!

Икенсе бер яҡташбикәң ҡәйнә йортонда ирҙең ҡаты әсәһенә нисек ярарға белмәй аптырай. Шул арҡала яратҡан ире менән әленән-әле ҡытыршылыҡтар сығып тора. Тағы бер пар бала-сағаһы булмау сәбәпле ниндәй генә табиптарға мөрәжәғәт итмәне. Күңел баҫырлыҡ сабыйы булмаған был ғаиләнең нәфис заты ла үҙен донъяла иң бәхетһеҙ итеп тоя. Ниндәйҙер хужабикә көн дә дарыу эсеүҙе талап иткән сир менән ыҙалана, икенсеһенә үҙенең яратҡан ашамлығын ашауҙы табип тыйған, өсөнсөһө - кардиологта, дүртенсеһе офтальмологта иҫәптә тора, бишенсеһе - ҡиммәтле операцияға мохтаж, шуға аҡса йыя...

Аңлауымса, Рәсилә ханым, һин юғары уҡыу йортон тамамлағанһың, яратҡан эшең дә бар. Ә күрше урамда йәшәгән тиҫтерең күпме генә уҡырға инергә тырышып та булдыра алманы. Теләгән уҡыу йортона инә алмай, өйөнә әйләнеп ҡайтҡан һайын: "Мин - бәхетһеҙ", - тип илай ине. Тағы бер әхирәтең күптән түгел генә: "Ирем эсеүгә эсмәй ҙә ул, тик ситтә гүләйт ҡыла," - тип зарланғанын онотма. Ул да үҙен иң бәхетһеҙҙәрҙән һанай. Ә икенсе бер гүзәл зат үҙе үк ситтән "урлаштыра". Уны ла һиңә ҡарағанда бәхетлерәк түгел тип иҫәпләйем. Бындайҙарҙы һанап китә башлаһаң, осо-ҡырыйы юҡ бит ул, Рәсилә һылыу!

Ирең егет саҡта, уға тормошҡа сығырға ризалығыңды биргән мәлдә: "Мин һиңә яңғыҙ ҡалыуҙан ҡурҡып ҡына кейәүгә сығам", - тип әйтмәгәнһеңдер, моғайын. Уның һөйөүенә, наҙына шундай уҡ йылылыҡ менән дә яуап биргәнһеңдер. Баштан, йәғни, тәүге никах кисе үткәс тә, иртәгеһенә үк шулай эскесе булып китмәгәндер хәләл ефетең. Аңлауымса, балаларығыҙ ҙа берәү генә түгел. Тимәк, күпмеләр ваҡыт башҡалар һымаҡ рәтле генә йәшәп тә алғанһығыҙ. Тын алыуыңдан һиҙеп торам, Рәсилә: өйөгөҙҙә - ныҡлы тәртип, таҙалыҡ тотаһың. Балаларыңды ла әллә ни иркәләп бармайһың, уларға ярайһы ғына талапсанһың. Хәләл ефетеңде лә ныҡ ҡына итеп "тоторға" ҡаршы түгелһең, әммә ул, әлеге хәрәм эсемлек арҡаһында һиңә баш бирергә уйламай. Һин уның һайын нығыраҡ асыуланаһың. Эскесе булыуына ҡарамаҫтан, һаман да үҙенең ирлеген итергә маташып, һиңә ул айбарланған була. Күңелем һиҙә, ул һиңә ҡул күтәрергә баҙнат итмәй. Айыҡ саҡтары ла булғылай бит уның. Беҙҙең халыҡта "Бүренең ауыҙы ашаһа ла, ашамаһа ла - ҡан" тигән әйтем йөрөй. Уға ҡарата гел генә асыулы булыуың да - тәбиғи. Һинең урында бер генә ҡатын да бындай иргә шат булмаҫ ине шул. Аңлап торам, ирендең хәмер ятыуын бик ауыр кисерәһең. Рәсилә һылыу, ә башыңа бер саҡ ошондай уй килгәне бармы: бәлки, быны ошо ауыр сирҙән ул үҙе лә нисек ҡотолорға белмәйҙер? Һин уны, моғайын, һәр саҡ "алкаш", тип тиргәйһең, ә табип булараҡ, мин алкоголизмды "сир" тип атайым. Бәлки, ул һинең һәр саҡ асыуланып йөрөүеңдә түгел, ә уның менән бер аҙ ғына йомшағыраҡ мөғәмәләлә булып, матурлап ҡына һөйләшеп алыуыңа ла мохтаждыр...

Тағы бер нәмә: һинең хәмергә ҡырҡа кире ҡарашта булыуың - үҙең өсөн оло бәхет бит! Ә күпме ғаилә башлыҡтары ҡосаҡлашып ултырып йә "һөйрәлеп йөрөп" эсеп, балаларын зар илатып ғүмер итә. Минеңсә, Рәсилә һылыу, һеҙҙең ғаилә хәле башҡа бик күптәргә ҡарағанда хатта яҡшыраҡтыр ҙа. Ә эскесе ирендә нисек тә булһа дауаларға кәрәклеге, әлбиттә, көн кеүек асыҡ. Алкоголик, ғәҙәттә, үҙен бер ҡасан да сирле кешегә һанамай. Үҙенең ана шул хәлен таныу бәхетенә ирешкән кеше һис шикһеҙ ошо сирҙән ҡотолорға теләйәсәк. Ул сирҙән арына алмаған кеше әкренләп (хатта шәпләп тә) упҡын төбөнә тәгәрәй. Бындай сирҙән ҡотолорға теләмәгән кеше, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әллә ни оҙаҡҡа ла бармай (Бынан бер нисә йыл элек "Мәкерле сир" тип аталған мәҡәләм ошо гәзиттә донъя күргәйне. Ана шуны табып ireңә уҡытһаң, ифрат та файҙалы булыр ине. Бәғзе берәүҙәр шул мәҡәлә менән танышҡас: "Минең хаҡта яҙғанһың бит," - тип тә әйткеләне).

Ә ғаиләңде тарҡатырға ашыҡма, Рәсилә һылыу. Эскелектән ҡотолоп, ысынлап та, ифрат яҡшы йәшәп киткән кешеләрҙе лә күргәнем бар. Ә "...егеттәргә саф ҡыҙҙар кәрәкмәй икән, минең менән бергә уҡыған ҡыҙҙар йәштән егеттәр менән йоҡлап йөрөп, уларҙың яҡшыһын һайлап алды..." тигәнерәк уйҙарыңдан арынырға тырыш. Ир-егеттәрҙең күпселеге тормошта тап һинең һымаҡ эшсән, етди ҡыҙҙарҙы хуп күрә ул.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

✔ ***Ул, оҙаҡ уйлап тормайынса, окоптан шыуышып сығып, дошман пулеметы янына һиҙҙермәйенсә генә яҡынлашып, уның расчетын юҡ итә, шуның һөҙөмтәһендә дошман атакаһы кире ҡағыла.***



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТӘРӘН ТАМЫРЛЫ БАШҠОРТБОҘ - ГӘРӘЙ БУЛА ЫРЫУЫБЫҘ



**Тарихсылар гәрәй ырыуының килеп сығышын боронғо кирәйәт ҡәбиләһе менән бәйләй. Тикшеренеүселәр, башлыса, ошо этнонимда монгол этимологияһын төҫмөрләй: монгол телендә "кэрэ" һүҙе "ҡарға" тигәнде аңлатһа, күплек суффиксы "ит" ("әт") кирәйәттәрҙең үҙатамаһының "ҡарғалар" мәғәнәһендә ҡулланылыуын белдерә. Башҡорт ырыуҙары номенклатураһында гәрәй этнонимының "гәрә" һәм "кирәй" варианттары ла осрай.**

Кирәйәттәр хаҡында XIV быуатта фарсы тарихсыһы Рәшид ад-дин былай тип яҙған: "Улар монголдарҙың бер тоҡомо; уларҙың көнитмеше Онон һәм Кэрулен (йылғалары) буйында, монголдар ерендә. Ул округтар Хитай иле сиктәренә яҡын".

Кирәйәттәр хаҡында шундай мәғлүмәттәр булыуына ҡарамаҫтан, уларҙың килеп сығышында һәм этник составында боронғо төрки компонентының булыуын кире ҡаҡҡыһыҙ, тип әйтергә була. Беренсенән, шул уҡ Рәшид ад-дин монгол һәм төрки телле ҡәбиләләрҙе айырып ҡарамайынса, уларҙы берләштереп күрһәткән. Икенсенән, шул уҡ монголдарҙы ошо ғалим ике төркөмгә бүлә: монгол-дарлекиндар һәм монгол-нирундар, әммә кирәйәттәрҙе ошо ике төркөмдөң береһенә лә индермәй. Өсөнсөнән, монголдарҙың эпик "Йәшерен хикәйәт"ендә ошо ике халыҡ араһындағы этник бәйләнеш хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Йәнә, кирәйәт юлбашсыларының исемдәре һәм титулдары тик төркисә яңғырай: Бойороҡ хан, Тоғрул хан һ.б. Монгол сығышлы ҡәбиләләрҙән бындай титулдар найман һәм оңғоттарҙа ғына ҡулланыла. Тимәк, кирәйәттәрҙең төрки телле халыҡтарҙан булыуын нигеҙле, тип иҫәпләп була. Монгол тарихы буйынса билдәле белгес Л.Л. Викторова ла кирәйәттәрҙең ҡатнаш составлы халыҡ булып, уларҙа, төрки-уйғырҙар менән бер рәттән, кидан-монгол этник компоненттары булыуы хаҡында яҙа. Рәшид ад-дин кирәйәт юлбашсылары ҡышлауҙарының Үтекән-мурэн тигән билдәле урында булыуын күрһәтеп китә. Ә был ерҙәр күк төркиҙәрҙең төп йорто була.

Төрки һәм Уйғыр ҡағанаттары тарҡалғас, уларҙың Орхон йылғаһы буйындағы ерҙәренә монгол телле ҡәбиләләр күсеп килә. Күрәһең, ошо ерҙәрҙә тороп ҡалған төркиҙәрҙең һәм монгол сығышлы ҡәүемдәр ҡушылыуынан кирәйәт этносы хасил була. Ошондағы ерле халыҡ боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрен ташламай, шул уҡ державасылыҡ традицияларына тоғро ҡалып, монголдарҙан туру титулын да үҙләштерә.

В.И. Рассадин ошо хаҡта былай тип яҙа: "...төрки элементтары иң күбендә наймандарҙың һәм кирәйәттәрҙең шәхси исемдәрендә күҙәтелә, әйткәндәй, улар боронғо төрки мәҙәниәте йоғонтоһон, бигерәк тә дин аша, кисерә, - ҡайһы бер тарихсылар уларҙы хатта төрки ҡәбиләләре, тип иҫәпләй. "Йәшерен тарих"та найман һәм кирәйәттәрҙең Алтын Ашыҡ (боронғо төрки теленән, "алтын ашыҡ", йә иһә "алтын торҡа"), Кучулук хан (боронғо төркисәнән, "кючлюг" - көслө, ғәйрәтле), Йеди Тублук (боронғо төркисәнән, "йеди туглук" - ете байраҡлы), Инанча Билге ҡан (боронғо төркисә - Ынанчу Билге ҡан, сағыштырыу өсөн Билге Ҡаған, Көлбилге хан, Ынанчу Билге, Ынанчу Чур боронғо төрки шәхси исемдәрен килтереп була; бында "ынанчу" ышаныслы, инаныслы мәғәнәһен белдереп, бер үк ваҡытта титул рәүешендә ҡулланыла, "ынан" - ышаныу, инаныу; "билге" - боронғо төркисәнән, белемле, аҡыллы мәғәнәһендә, "бил" - белеү тигәнде белдерә)..."

Шулай итеп, кирәйәт этнонимы монгол теле менән бәйле булған хәлдә лә, был ҡәүем нигеҙҙә төрки сығышлы тип һанала. Ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең кирәйәт, меркет, найман юлбашсыларының монгол ханы Темучин (Сыңғыҙ хан) менән монгол телендә аралашыуын уларҙың монгол телле икәнлегенә дәлил итеп ҡарауы менән килешеп булмай. Онғот юлбашсыһы Алаҡош тегиндың дә Сыңғыҙ хан менән уның туған телендә һөйләшә алыуынан ғына сығып, онғоттарҙың төрки ҡәүеменән булыуын инҡар итеп булмай.

840 йылда Енисей ҡырғыҙҙары Уйғыр ҡағанатын тар-мар итә. Уйғырҙар, көнбайышҡа табан йүнәлеп, Турфан оазисында (Көнсығыш Төркөстан, Ҡытайҙың хәҙерге Синьцзян-Уйғыр автоном районы) яңы ватанын таба. Үҙәк Азияның бушап ҡалған далаларын Ҡытай сығанаҡтарында "цзубу" тип исемләнгән ҡәбиләләр конфедерацияһы үҙләштерә. Тикшеренеүсе К. Виттгофель ошо халыҡтың атамаһы "согпо" тигән тибет һүҙенә тура килә тип иҫәпләй. Тибеттар монголдарҙы шулай атаған. Әйтергә кәрәк, X-XI быуаттарҙа хәҙерге Монголия территорияһында төрки һәм монгол сығышлы ҡәбиләләр күсмә тормош алып бара. Ҡытай тарихсыһы Фэн Шэн-шун цзубу этнонимының Эске Азияла йәшәүсе күсмә халыҡтарҙың дөйөм атамаһы булып, ошо конгломераттың көнсығыш төркөмөндә джалаир (йылайыр) һәм татар ҡәбиләләре, көнбайышында - наймандар, төньяғында кирәйәттәр йәшәгән тип билдәләй.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

Т.Т. Кусимов менән йәнәшә батальон комиссары Сәғит Рәхмәт улы Әлибаев ултыра ине. Уның күкрәгендә СССР Юғары Советы депутаты значогы ялтырап күренеп тора. С.Р. Әлибаев элек Башҡорт АССР-ының мәғариф наркомы булған, рус телен яҡшы белә, әммә уның һөйләшеү манераһы шундуҡ башҡорт кешеһе икәнлеген белдереп тора. Ул яй ғына, артыҡ һүҙҙәр ҡыҫтырмайынса һөйләшә. Миңә Әлибаев бик һирәк йылмая торған кеше кеүек күренде. Әгәр Кусимов шаян һүҙҙәргә ихлас булып, ауыр минуттарҙа үҙен шулай тотоуы менән яугирҙарҙы дәртләндереп, күңелдәрен күтәрә белһә, Әлибаев үҙенең ҡул аҫтындағылар менән һәр саҡта ла тәьҫирле тонда һөйләшә ине. Күрәһең, нарком булыуы, педагог профессияһы уның характерында шулай сағылыш тапҡандыр.

Сәғит Рәхмәт улы полктың барса боецтарын һәм офицерҙарын яҡшы белде, һәр кемгә тулы характеристика бирә ала ине. Ул полктың шәхси составын тәрбиәләү буйынса ҙур эш алып барҙы, партия эшен ойоштороҙо, йүнәлеш бирҙе. Уның бөтмәҫ энергияһы арҡаһында полкта бер генә лә ҡурҡаҡлыҡ осрағы булманы.

Полк командованиеһы менән ҡыҫҡа ғына әңгәмәнән һуң мин ут нөктәләренең нисек урынлаштырылғанын, инженер ҡоролмаларын, подразделениелар араларын тоташтырыу нисек тәьмин ителеүен тикшерергә булдым. Мине полк командиры урынбаҫары, капитан Ш.Ғ. Ғайсин оҙатып йөрөнө. Һуғышҡа тиклем ул запаста торған, Өфөлә Осоавиахимдың ҡала комитеты рәйесе булып эшләгән. Ул, Т.Т. Кусимовтан айырмалы, бер аҙ флегматик холоҡло һәм үҙ йәшенә ҡарағанда тулы кәүҙәлерәк ине. Әммә ул үҙ эшен яҡшы белде һәм командирына һөҙөмтәле ярҙам итә алды. 1942 йылдың декабрендә Обливская эргәһендә барған бәрелештәрҙә полкты шәхсән үҙе атакаға күтәреп, ауыр яраланды һәм инвалидлыҡ арҡаһында тылға ҡайтарылды.

Траншеяларҙы ҡарап йөрөгәндә мин 275-се полктың тәүге алыштарҙа батырлыҡ күрһәткән офицерҙары, пулеметчиктары һәм боецтары менән осраштым.

Яугир Имам Ғәлимов Аҫҡын районының Ҡашҡа ауылынан. Уға 35 йәш, әммә ул йәшерәк күренә. Борки ауылы янындағы яу барышында И. Ғәлимов дошмандың ауыр пулеметының эскадрондың флангыһына сығып, траншеяға үлемесле ут асыуын күрә. Ул, оҙаҡ уйлап тормайынса, окоптан шыуышып сығып, дошман пулеметы янына һиҙҙермәйенсә генә яҡынлашып, уның расчетын юҡ итә, шуның һөҙөмтәһендә дошман атакаһы кире ҡағыла.

- Артабан нисек һуғышырбыҙ? - мин яугирҙан шулай тип һораным

- Как все воюют, так и моя будет бить фашистов, - Имам Ғәлимов шулай тип яуап ҡайтарҙы. Тыйнаҡлыҡ, иптәштәре араһында айырылып тороуҙы теләмәү - барса башҡорт яугирҙарына хас сифат.

Искәндәр Мәҡсүтов - 4-се эскадрондың элемтәсеһе, Башҡортостандың Учалы районы Шәрип ауылында тыуып үҫкән. Русса төҙөк һөйләшә, күҙҙәренән яугирлыҡ осҡондары сәселә. Уның фашистарға үтә үсле булыуы күренеп тора.

4-се эскадрон Кесе Борки ауылы янында ауыр оборона һуғыштары алып бара. Искәндәр полк штабынан үҙ подразделениеһына ҡайтып килгән мәлдә эскадронды дошмандың ҙур көстәре тулыһынса тейерлек ҡамап алған була. Ошо хәлде һиҙеп ҡалған Мәҡсүтов эскадрон тылына дошман пулеметы ҡуйылыуын күреп ҡала. "Тимәк, артҡа табан юл ябылды", - тип уйлап, яугир ситтәнерәк шыуышып китә. Дошман пулеметына бер нисә тиҫтә метр ер ҡала. Хәҙер инде тынысланып, хәл алып, беренсе атыуҙар менән бөтә расчетты юҡ итергә кәрәк. Вәт, хәҙер бына алығыҙ кәрәгегеҙҙе!

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1830-1833 йылдар** - Ырымбур өлкәһендә хәрби губернатор Павел Петрович Сухтелен идара итә. Был йылдарҙа Ырымбурҙа: ҡатын-ҡыҙҙар училищеһы (1848 йылда ул Император Николай 1 институтына үҙгәртелә), приход училищеһы асыла; йәрминкәләр ойоштороло, гәзит сығарыла һ.б.

➔ **1830 йыл** - Өфө собор мәсете (ямиғ) төҙәлөшө тамамлана.

➔ **1831 йылдың 26 октябре** - Батша күрһәтмәһе менән ҡулға алынған кешеләрҙе Ырымбур крайына һөргөнгә ебәреү тыйыла.

➔ **1931 йылдың 14 декабре - 1895 йылдың 8 октябре** - Мәшһүр башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир Мифтахетдин Аҡмулланың ғүмер йылдары.

➔ **1832 йыл** - Ырымбурҙа тәүге мәхәллә мәктәбе асыла һәм шул йылда уҡ унда 7 башҡорт малайы уҡырға ҡабул ителә.

➔**1832 йыл** - Ырымбурҙа көнсығыш типография асыла. Неплюев хәрби училищеһы тәрбиәләнеүсеһе Мөхәмәтгәрәй Бикчурин унда хәреф йыйыусы итеп эшкә алына.

➔ **1832 йыл** - Ырымбурҙа урындағы чиновник И.Жуковскийҙың "Ырымбур крайының хронологик тәртиптә (1246-1832 йылдар) урынлаштырылған иҫтәлекле ваҡиғаларына ҡыҫҡаса байҡау" тигән китабы баҫылып сыға. Был китап нигеҙҙә Ырымбур крайының ауыл һәм ҡалаларын һүрәтләп сығыуға ҡоролған була, әммә ул уҡыусылар күңеленә бик хуш килә, шунлыҡтан ул шул уҡ йылда Санкт-Петербургта ҡабатлап нәшер ителә. 1833 йылда И.Жуковский "Адрес-календарь" баҫып сығара.

➔ **1833-1836 йылдар** - Атаҡлы рус композиторы, "Һандуғас" исемле киң билдәле йыр авторы Л.А. Алябьевтың Ырымбур һөргөнендә булған осоро.

➔ **1833 йыл** - Йола булараҡ, Башҡортостанда үткәрелеп килгән йыйындар тыйыла.

➔ **1833 йылдың 18-20 сентябре** - Пугачев восстаниеһы тарихы буйынса материалдар йыйыу өсөн А.С.Пушкин Ырымбурға килә. Һөҙөмтәлә "Пугачев болаһы тарихы" тигән тарихи хеҙмәтен һәм "Капитан ҡыҙы" повесын яҙа.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

# МИЛЛИ ҒОРУРЛЫҠ

**Күптән түгел "Ағиҙел" журналында күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим Хисамовтың Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов тураһындағы әҫәре баҫылып сыҡты. Тотош бер һанды биләне "Мортаза Рәхимов" романы. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына Ғәлим Афзал улы менән ошо әҫәр, ғөмүмән, заман һәм шәхес хаҡында әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**Ғәлим Афзал улы, бала сағығыҙ үткән, мәктәптә, университетта уҡыған осорҙа, ғүмерегеҙҙең артабанғы өлөшөндә һеҙгә йоғонтоһо булған, аң-ҡарашығыҙҙы формалаштырыуға булышлыҡ иткән шәхестәр араһынан кемдәрҙе айырып әйтер инегеҙ?**

- Бик ауыр һорау ҡуйылды. Сөнки тормошонда ҙур роль уйнаған ниндәйҙер шәхесте башҡаларынан айырып күрһәтеү мөмкин дә түгелдер. Ни өсөн ауыр, сөнки мин бер ваҡытта ла кемгәлер оҡшарға тырышманым һәм бер кемгә лә табынманым. Шуға күрә кемделер айырып әйтергә ҡыймайым. Береһен атаһам, башҡаларын рәнйетермен һымаҡ. Мин хатта атайымды ла был урынға ҡуя алмайым. Уның кеүек булырға тырышманым да. Булманы миндә ундай ынтылыш.

**Ҡытай фәйләсуфы Ошо ла был хаҡта әйтеп үтә. Уның фекеренсә, әгәр ҙә атайҙар балалары өсөн генә йәшәһә, үҙҙәре өсөн йәшәй алмай. Балалар ҙа үҙ нәүбәтендә аталарына оҡшарға тырышһа, улар өсөн йәшәһә, уларҙың үҙ тормошо булмай. Бәлки, ошо фәлсәфә яталыр һеҙҙең бындай инаныуығыҙҙа, шулай түгелме?**

- Шулай, әммә мин бында икенсе нәмәне күрәм: ҡытайҙар ер йөҙөндәге иң боронғо халыҡтарҙың береһе һанала һәм уларҙыҡына оҡшаған фәлсәфә минең дә ҡанымда һәм аңымда йәшәй икән, минең халҡым да боронғо. Ә минең аң-ҡарашым формалашыуға булышлыҡ иткән кешеләргә килгәндә, ана шул кешеләр бөтәһе бергә халыҡты, милләтте тәшкил итә. Улар минең өсөн алтын бағана! Ғүмерем буйы шул бағана кеүек булырға ынтылып йәшәйем. Бындай ынтылыш, күрәһең, һәр кемдең үҙенән килә торғандыр. Шунан һуң ғына кемдер йоғонто яһай алалыр. Был бик киң пландағы процесс. Нигеҙҙә кешенең йәшәйеш принциптары, уның ынтылыштары, ҡайта-ҡайта ынтылыштары - былар барыһы ла ҡандан килә. Халыҡ, милләт ҡаны һалынған һәр беребеҙ шулай. Беҙ уны, теләйбеҙме-юҡмы, үҙебеҙҙән алып ташлай алмайбыҙ. Башҡорт кешеһе үҙ милләтенең бер тамсыһы! Тамсыһының да тамсыһы! Тамсыларҙан диңгеҙ, халыҡ барлыҡҡа килә. Шуға күрә мин диңгеҙҙән бер тамсыны айырып алырға теләмәйем.

**Кемделер айырып әйтергә теләмәүегеҙ йоғонтоһо булғандарының күплегенән дә килә торғандыр. Ғәҙәттә, шундай ҙа хәлдәр була: кемдәрҙеңдер исеме әйтелмәй ҡала ла, кемдәрҙеңдер күңеле ҡырыла. Был бер, икенсенән, халыҡта "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел" тип тә әйтәләр. Һин ихтирам итмәгән насар кеше лә һинең өсөн әүлиә булып сыға, йәғни һин ундайҙарҙан ғибрәт алып, насар булмаҫҡа өйрәнәһең.**

- Былар барыһы ла, дөйөм алғанда, шулай. Әммә ошоларға өҫтәп, шәхес һәм заман төшөнсәләренең бер-береһенән айырылғыһыҙ булыуы хаҡында ла әйтер инем. Беҙҙең халыҡ өсөн был төшөнсәләр меңәр-меңәр йылдар эсендә ята. Кемдер өсөн ул унар, кемдер өсөн йөҙәр йылдарға һуҙыла. Минең өсөн меңәр-меңәр йылдар. Сөнки тарихты нығыраҡ белгән һайын халҡыңдың да боронғораҡ икәнен күрә, инана бараһың. Шул боронғолоҡтоң үҙәген эҙләп, үҙең дә тарих артынан эйәрәһең. Халҡыңдың булмышына яҡын булырға тырышыу, минеңсә, ошонда. Беҙҙең рухи сығанағыбыҙ данлы һәм шанлы, шул уҡ ваҡытта ҡанлы тарихыбыҙҙан башлана. Үҙ тарихын белмәгән кешенең милли ғорурлығы ла булмай.

**Милли рухты тәрбиәләүҙә ғаиләнән, айырым шәхестәрҙән тыш, мәктәп тә ҙур роль уйнай. Был йәһәттән фекерҙәрегеҙ нисек? Уҡыған мәктәбегеҙҙең рухи булмышығыҙҙы формалаштырыуҙағы роле нимәгә ҡайтып ҡала?**

- Мәктәптә уҡығанда бер уҡытыусыбыҙ беҙҙе башҡорт булырға өйрәтте. Бәлки, уның был ғәмәле кемдер өсөн ситен дә булып тойолор. Ысынлап та, башҡорт булырға өйрәтеп буламы? Баҡһаң, була икән. Ҡанда ятҡан этәргесте ҡуҙғатып ебәреү тап шулай атала. Милли ғорурлыҡ та, милләт өсөн яуаплылыҡ та, фиҙаҡәрлек тә һәр беребеҙҙә бар. Ләкин уны ваҡытында ҡуҙғатырға ғына кәрәк. Ул тойғо ни тиклем иртәрәк ҡуҙғатылһа, кеше халҡы өсөн шул тиклем күберәкте эшләй ала. Уҡытыусыбыҙ беҙгә барыһын да аңлатып бирҙе. Шунан һуң беҙ тамырҙарыбыҙҙы эҙләй, юллай башланыҡ. Бындай ынтылыш һәр кемдә бар һәм уны һәр кем үҙенсә ҡабул итә. Туғыҙынсыунынсы кластарҙа уҡығанда беҙҙең арала башҡорттарҙан тыш, татар милләте вәкилдәре лә бар ине. Класс менән яҙған иншала бер татар ҡыҙы: "Мин саф башҡорт ҡыҙы", - тип белдереү яһағайны. Был нимә? Үҙеңдең милләтеңдән баш тартыумы? Әллә башҡорт булырға ынтылыумы? Миңә ошо һорауҙар бик оҙаҡ ваҡыт тынғылыҡ бирмәне. Мин ул ҡыҙ урынына, аҙағыраҡ уның ата-әсәһе урынына үҙемде ҡуйып ҡараным. Әммә килеп сыҡманы. Сөнки икенсе милләт вәкиле булыу - файҙаһыҙ ғәмәл. Шуға күрә, һәр кеше кем булып тыуған, шул булып йәшәргә, милләтенә хеҙмәт итергә һәм шул милләт вәкиле булып, баҡыйлыҡҡа күсергә тейеш. Баҡыйлыҡҡа кешене башҡа төрлө асыл менән ҡабул итмәйҙәр, тиҙәр.

**Тарихи тематикаға тотоноу һеҙҙең өсөн үҙмаҡсатмы? Хәҙерге заман ҡуйған һорауҙарға тарихҡа мөрәжәғәт итеп яуап эҙләүме, әллә башҡа сәбәптәре бармы?**

- Был һорауҙы мин үҙ-үҙемә лә биргәнем булды. Ысынлап та, нимә эҙләйем мин һуң унда? Ошо һорауҙарға үҙем дә яуап бирә алмайынса, тағы ла тарих төпкөлдәренә төшөп китәм. Яңыраҡ Йәдкәр Бәшировтың "Ҡол Ғәли" китабының исем туйы үтте. Йәдкәр Бәширов был әҫәрен тарихи факттарға таянып яҙған, йәғни ул художестволы әҫәр ижад итмәгән. Китапты уҡып сыҡҡас та, эх, бынан роман яҙһаң ине, тип ҡул ҡысып ҡуйҙы. Әлегә башҡа эш менән мәшғүлмен. Шуға күрә Ҡол Ғәли йәшәгән мең йыл элекке дәүергә әле генә ҡайтырлыҡ форсатым юҡ. Кем белә, бәлки...

**Кәҙимге кешенән шәхес ниндәй сифаттары буйынса айырыла тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Ғөмүмән, айырыламы һуң улар? Ни өсөн тигәндә, шәхестең бер аңлатмаһында уның башҡаларға оҡшамаған сифаттары булыуы хаҡында әйтелә. Кеше донъяға башҡалар менән тиң хоҡуҡлы булып, әммә берәүгә лә оҡшамаған булып тыуа. Хатта бер туғандар, хатта игеҙәктәр бер-береһенән ныҡ айырыла. Бына ошонда баяғы ҡан йоғонтоһо иҫкә төшә. Кеше ике ҡандан, атаһы менән әсәһенән ярала. Үҙ сиратында атаһы менән әсәһе тағы ла икешәр ҡандан барлыҡҡа килә. Шул рәүешле, ошо сылбыр донъяға кеше яралған иң боронғо замандарға барып ялғана. Ошо сылбырҙың йоғонтоһонда һәр кем айырым булып тыуа. Шәхестең башҡаларға оҡшамауы Хоҙайҙан. Тәрән тамырлы ағас кеүек йәйрәп үҫеп китеүсе киң олонло, тарбағай ботаҡлы, мул япраҡлы ағас кеүек шәхестәр була. Икенсеһенә иһә тәбиғәттән, Хоҙайҙан ниндәй генә сығанаҡтар бирелмәһен, ундай шарттар һәм мөмкинлектәр булмаҫҡа мөмкин. Өсөнсө төр ағастарҙың орлоғо ситкә генә сәселеп, ана ауам, бына тәгәрәйем, тип көн итә.

Шулар араһынан Аһура Мазданы алайыҡ. Заратуштра кешелек яралған саҡтағы хоҙайҙарҙың береһе. Уға бик күп ҡәбиләләр, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, йәғни беҙҙең халыҡты бар иткән боронғо ата-бабаларыбыҙ ҙа табынған. Бының дәлиле бик ябай. Аһура Маздаға табыныусылар - улар утҡа табыныусылар. Уттан сыҡҡан төтөн, ялҡын, йылылыҡ энергияһы күккә оса. Ошо бағана күктәге Хоҙай менән тоташа тип уйлаған был диңгә табыныусылар һәм улар бер туҡтауһыҙ ут яҡҡан. Усаҡ һүнмәһен өсөн ут соҡорҙарын йәнәш эшләгәндәр һәм улар кәмендә икәү булған. Шул ике соҡор бөгөн Ҡаҙанташ тип атала һәм улар Асылыкүл буйында. Йәғни ошо факт ҡына Аһура Мазданың беҙгә мөнәсәбәте барлығы хаҡында һөйләй. Ә инде ошо тәғлимәтте барлыҡҡа килтереүсе кеше Заратуштра. Ул үҙ динен таратып, Әзербайжан аша хәҙерге Иранға сығып китә. Артабан ул Һиндостан яғына юллана. Уның уҙған юлында, Аллаһыға шөкөр, ул халыҡ һаман да йәшәп ята. Халҡыбыҙҙың бөйөк бер башланғыстарының береһе - Заратуштра.

XX быуат башында тарихи аренаға сығыусы шәхесебеҙ - Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Ул етәкләгән башҡорт милли хәрәкәтенең этәргестәре - тарихтағы башҡорт ихтилалдары. Барлығы 88 тапҡыр башҡорттар яуға күтәрелгән. 1917 йылғы күтәрелеш 89-сыһы, 1922 йылдағыһы - 90-сыһы. Был ихтилалдарҙа күпме халыҡ ҡырылған, күпме балалар тыумай ҡалған, улар менән күпме юлбашсылар етәкселек иткән.

## тик уны уятыр

**Шәхес йоғонтоһона классик миҫал. Башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла Рәсүлев Әхмәтзәки Вәлидиҙе алтын аҡса биреп һынай. Был аҡсаға ун биш йәшлек Әхмәтзәки ул заман өсөн мөһим йөкмәткеле һаналған бик күп китаптар һатып ала. Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә был хаҡта: "Әгәр ҙә шәйехтең дәртләндереүе булмаһа, мин, ихтимал, күптәр кеүек, ун биш йәшемдән сауҙа эшендә приказчик булып китер инем", - тип яҙып үтә. Шуның кеүек, һеҙ ҙә: "Шул-шул кешеләр һәм уларҙың йоғонтоһо булмаһа, мин тыуған ауылымда көтөүсе генә булып китер инем",- тип әйтерлек кешеләрегеҙ бармы?**

- Ундай кешеләре һәр кемдең дә була. Сөнки этәргес көс булмаһа, кеше лә юҡ. Шуларҙың береһе - ул минең атай. Сөнки тарихҡа иғтибарҙы миңә ул бирҙе. Үҙе бик иғтибарлы, нәзәкәт телле, матур итеп һөйләшә торған кеше ине. Беҙ, яҙыусылар, һөйләм төҙөгән ваҡытта бер һөйләмдә бер үк яңғырашлы ике һүҙ инмәһен өсөн тырышабыҙ, тавтологиянан ҡасабыҙ. Атайым шуны автоматик рәүештә эшләй торғайны. Табын артында ултырғанда уның һөйләп бөтөүен көтөп, аштар ҙа һыуынған саҡтар булды. Фәнүр мырҙамдың да телмәре матур. Атайым тарихты бик яҡшы белде. Ауылыбыҙҙың тирә-яғындағы ер-һыу атамаларының һәр береһенең тарихын үҙе шаһит булған һымаҡ итеп түкмәй-сәсмәй бәйәнләр ине. Миңә йоғонтоһо булған икенсе кеше - башта әйткән уҡытыусым. Ул беҙгә башҡорт милләте вәкиле булырға өйрәтте. Өсөнсөһө - Мостафа Солтанов. Ул Күмертауҙа башҡорт телендәге район гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләне. Ул мине тәржемәсе итеп эшкә алды. Уның менән эштән тыш ваҡыттарҙа гел бергә йөрөй торғайныҡ. Унан миңә аҡыл, тәжрибә, минән уға энергия, көс күсте.

**Татар милләтле класташ ҡыҙығыҙҙың үҙен саф башҡорт кешеһе итеп таныуына бәйле бер хәҙис бар. "Үҙенең атаһы кем икәнен белә тороп, икенсе кешене атаһы тип атаусы кеше мотлаҡ рәүештә гонаһҡа бата, шулай уҡ үҙен башҡа милләт вәкиле итеп таныусы һәр кем тамуҡтан урын алһын", тип әйткән имам әл-Бохари. Был фекер бигерәк тә быйыл, Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу сараһы алдынан актуаль яңғырай. Был фекерҙе класташ ҡыҙығыҙ миҫалына бәйләп нисек аңлатырға була?**

- Аңлатып булмайҙыр. Әммә ошоно таратырға тырышыусыларҙың күп булыуы бөгөнгө Рәсәйҙә сәйәсәт яһай. Мин һәр кемдең үҙ милләтен һайлап алыуына ла ҡаршы. Нисек инде мин милләтемде һайлап ала алам? Миңә уны меңәр йылдар элек ата-бабаларым һалған. Ул минең ҡаныма һеңгән.

*✓ Мортаза Рәхимов ул ваҡытта күберәк иҡтисади үҙаллылыҡ тураһында һөйләне. Бында үҙенә күрә тактика ла бар. Иҡтисади үҙаллылыҡ беренсе урынға ҡуйылһа, икенсеһе - сәйәсиһе үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә.*

Нисек итеп мин үҙемде һинд йә ҡытай кешеһе итеп иғлан итәйем? Был кешенең милли ғорурлығын, милли яуаплылығын ергә һалып тапауға тиң. Был бик зыянлы ҡараш. Һуң совет милләте әүәләп ҡаранылар бит инде, һөҙөмтәһе лә билдәле булды, совет дәүләте юҡҡа сыҡты. Мин теге ҡыҙҙы ла аңлайым, ул да башҡорт булыу тойғоһон кисерергә теләгәндер. Әммә унан алдараҡ атаһы менән әсәһе, ата-олаталары тора бит. Милләтеңде инҡар итеү ата-әсәйеңде инҡар итеүгә тиң бит.

**Байтаҡ ҡына тарихи ваҡиғаларға, шәхестәргә арналған әҫәрҙәр ижад иткәнһегеҙ. Нисек уйлайһығыҙ, тарихтағы аныҡ шәхес менән әҫәр геройы араһында айырма буламы?**

- Был һорауға яуап бирер алдынан һуңғы дәүерҙәге бер шәхескә әйләнеп ҡайтайыҡ. Мин уға табыныу дәрәжәһенә барып еткәнлектән әйтмәйем. Юҡ миндә ундай тойғоларҙың береһе лә. Әгәр ҙә яҙыусы ысынбарлыҡтағы шәхестең портретын бермә-бер күсереп, фотопортрет барлыҡҡа килтерергә тырышһа, ул дөрөҫ түгел. Дөрөҫөрәге, был яҙғанын әҙәби әҫәр түгел. Һуңғы романым документаль булған сүрәттә лә, ундағы геройҙы үҙем яһарға тырыштым.



# ҺӘР КЕМДӘ БАР,

## шәхестәр кәрәк

Иң тәүҙә геройым йәшәгән дәүер характеристикаһын ҡарап үтәйек. Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап 2010 йылға тиклем ваҡиғалар күптәребеҙҙең хәтерендә. Күбебеҙҙең аңына ла, ҡанына ла һеңгән, ғәренә лә тейгән, йәненә лә еткән ваҡиғалар улар. 90-сы йылдарҙағы буш кәштәләрҙе күрмәй хәлебеҙ булманы. Сөнки һәр беребеҙгә көнөнә өсәр тапҡыр тамаҡ туйҙырырға кәрәк. Тамаҡ туймайынса тороп, бүтән нәмә тураһында уйлап булмай. Шуның нигеҙендә барлыҡҡа килгән сәйәси ҡуҙғалыштар. Кәштәләр таҡырайғас, синыфтарҙың береһе лә ҡалманы. Синыф та юҡ, идеология ла юҡ. Йәғни беренсе сиратта материя, икенсе сиратта - аң. Был совет дәүләте уйлап сығарған тәғлимәт түгел. Ул - боронғораҡ.

Шул саҡта 40-50 йәштәр араһындағы бер төркөм ир-ат үҙ-ара һөйләшеп, бер фекергә килә. Ул да булһа, Өфөнөң ҙур нефть эшкәртеү заводының генераль директоры булып эшләгән Мортаза Рәхимовты Башҡортостандың Юғары Советына депутат итеп, аҙаҡ Юғары Советҡа рәйес итеп һайлау. Әйтеүе генә еңел. Әммә ошо кешеләр шул көндә ҡорған ниәтен тулыһынса бойомға ашыра. Улар: Исмәғил Ғәбитов, беренсе сиратта - ул, уның янында йөрөүсе Венер Аҙнағолов, Юрий Шәрипов, ул ваҡытта Күгәрсен районының колхоз рәйесе Рамаҙан Әбдрәхимов. Улар тәүҙә дүртәүләп ултырып һөйләшәләр, шул уҡ көндә Мортаза Рәхимов янына бара. Тәүҙә завод директоры уларҙы: "Эшегеҙ юҡмы ни, һеҙ нимә?" - тип һүгеп ташлай. Шулай әйтерлек тә шул, сөнки ул был ваҡытта СССР Юғары Советы депутаты була бит. Шулай ҙа ул был дүртәүҙең тәҡдиме тураһында оҙаҡ ҡына уйлай. Шул ваҡытта тыуған ауылына ҡайтып килергә була. Ауылдаштары менән күрешеп һөйләшә. Уларҙың үҙе сығып киткәндәге һымаҡ ябайлығы күңеленә үтеп инә. Шул саҡта ауылға Ырымбур яғынан автолавка килгән була. Улар сауҙа итә. Шунда бер ауылдашы: "Ошо автолавканы нишләп үҙебеҙҙекеләр ойоштора алмай икән?" - тип әйтеп ысҡындыра. Быны ишеткән завод директоры уйға ҡала. Ысынлап та, ниңә ошоно үҙебеҙ ойоштора алмайбыҙ һуң, тигән һорау килеп тыуа. Был - депутат була торған кешенең беренсе уйы. Ошонан һуң, ысынлап та, депутат булырға әҙер була. Тормош, заман уға ошо юлдарҙан китергә үҙе ҡуша.

Мәжбүр итә. Шул замандағы тарҡаулыҡ, бөлгөнлөк, әр уның өсөн эҙһеҙ үтмәй. Ул заманда урамда һүгенеп һөйләшмәгән кеше юҡ ине. Урам тулы мат торҙо. Бигерәк тә башҡорт кешеһе улай һөйләшергә өйрәнмәгәйне. Мин үҙем, мәҫәлән, урамда һүгенгән кешене бик ауыр ҡабул иттем. Минең ҡайным ҡарт Башҡорт ғәскәре сафында Пертоградҡа барған. Шунда ул бөрйән ырыуы башҡорттарына аптыраған. Бар белгән һүгенеү һүҙҙәре "тыума" ти. Береһе шул һүҙҙе әйтһә, икенсеһе үсегә ти. Былары һүҙ ыңғайында ғына.

Шундай заман Мортаза Рәхимовты барлыҡҡа килтерә. Исмәғил Ғәбитов һаулығы арҡаһында эшенән китергә йөрөгәндә Мортаза Рәхимов уға рәхмәт әйтеп: "Әгәр ҙә Исмәғил Ғәбитов булмаһа, мин бөгөн һеҙҙең алдығыҙҙа президент булып баҫып тора алмаҫ инем", - ти. Әхмәтзәки Вәлиди Зәйнулла Рәсүлевты таныған һымаҡ килеп сыға был ваҡиға. Ошо хәл халыҡ менән шәхестең бер үк икәнен дә күрһәтә.

**Завод директорына сәйәсәткә тотоноуы бигүк еңелдән булмағандыр инде, тип тә уйланыла...**

- Ул генераль булһа ла, завод директоры. Бер ваҡытта ла сәйәсәт менән шөғөлләнмәгән. Рәхимов машинаһын саҡырып алып, заводына барып, халыҡты йыйып хушлаша. Рәхмәт әйтеп, күҙҙәре еүешләнер алдынан сығып китә. Рәхмәт әйтә белеү башҡортлоҡтоң бер һыҙаты. Кешегә рәхмәтле булыу ҙур нәмә. Был да шәхесте барлыҡҡа килтереүсе билдә. Ошо хәл уның артабанғы эшенә әҙерлеген күрһәтә.

Заводтан сыҡҡас, ул хәҙерге милли музейҙа урынлашҡан Юғары Советҡа килә. Уны ул ваҡытта Юғары Совет секретары Вилләр Дауытов ҡаршылай. Ул ваҡытта шәхесте күтәреүсе көс - суверенитет өсөн көрәш. Мәскәү ул саҡта мөлкәт өсөн үҙ-ара ыҙғыша. Башҡортостан ҡайғыһы уларҙа бик самалы. Юғары Совет үҙенең 2-се ултырышында Башҡортостан Республикаһы Суверенитеты тураһында Декларация ҡабул итә. Беҙҙең Декларация ул ваҡытта хәҙерге күҙлектән дә бик аҡыллы яҙылғайны. Мәҫәлән, чечендар ул ваҡытта үҙҙәрен бойондороҡһоҙ дәүләт итеп иғлан итте. Татарстан иһә үҙен Рәсәй менән тиң дәүләт тип атаны. Быны белгән Силәбе өлкәһе уларға тейешле вагондарҙы ебәрмәй башланы. Эш шуға тиклем барып етте. Башҡортостан иһә яңы Рәсәй эсендәге бойондороҡһоҙ республика. Ошо форма Башҡортостанға үҙаллы йәшәргә, ниндәйҙер дәрәжәлә айырылырға ла мөмкинлек бирҙе.

**Ғәлим Афзал улы, һеҙ ул саҡта Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда барған барлыҡ ваҡиғаларҙы ла романығыҙға индерә алдығыҙмы? Әҫәргә инмәй ҡалғандары ла барҙыр бит?**

- Әлбиттә, бар. Әйтеүемсә, роман ул ваҡыттағы ваҡиғаларҙың стенографик яҙмаһы түгел. Бына шундайҙарҙың береһе - романға инмәй ҡалған бер ваҡиға. Исмәғил Ғәбитов Мәскәүгә барып, СССР Премьер-министрына инеп аҡса һорай. Павлов уға:

- Аҡса бит үҙегеҙҙә, беҙҙә бер нәмә лә юҡ. Хәҙер республикалар ғына түгел, өлкәләр ҙә беҙгә һалым түләмәй. Ҡаҙнабыҙ буш. Хатта үҙебеҙҙең хеҙмәткәрҙәргә лә эш хаҡы түләй алмайбыҙ, - ти.

- Улай булғас, хәҙер нимә эшләргә уйлайһығыҙ инде? - тип һорай унан Исмәғил Ғәбитов.

- Һеҙгә ҡарап торабыҙ инде...

Өфөгә ҡайтҡас, был һөйләшеүҙе ул Мортаза Рәхимовҡа еткерә. Бынан һуң Башҡортостан да Мәскәүгә аҡса күсермәй башлай. Суверенитет уларға был хоҡуҡты бирә. Хәтерегеҙҙә булһа, Мортаза Рәхимов ул ваҡытта күберәк иҡтисади үҙаллылыҡ тураһында һөйләне. Бында үҙенә күрә тактика ла бар. Иҡтисади үҙаллылыҡ беренсе урынға ҡуйылһа, икенсеһе - сәйәсиһе үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә. Туҡтың хәлен ас белмәй.

Ошондай туҡтауһыҙ ҡытыршылыҡтар, көн һайын хәл ителергә тейешле мәсьәләләр Мортаза Рәхимовты көрәштең уртаһына килтереп ҡуя. Унда йә үләһең, йә тере сығаһың, башҡа юл юҡ.

Романдың тәүге өлөшө 1993 йыл менән тамамлана. 24 декабрҙә Башҡортостан Республикаһының яңы Конституцияһы ҡабул ителә. Иртәгеһенә Мортаза Рәхимовты 1-се Президент итеп ант иттерәләр. Шул ваҡиғанан алдараҡ ул Мәскәүгә кәңәшмәгә барып төшә. Домодедово аэропортынан Кремлдең автоидараһына шылтырата. Уға машина ебәрмәгәндәр. Нишләп? Уға саҡырылғандар исемлегендә фамилияһы юҡлығын әйтәләр. Такси ала ла, Кремлгә китә. Кәңәшмә башланырға күп тә ҡалмаған. Теркәлеү үтергә бара. Унда тағы ла исемлектә булмауы хаҡында әйтәләр. Эштәр идаралығына Николай Медведевҡа барып инә. Бында телеграммаға ярашлы республиканың башҡарма власть етәкселегә саҡырылыуы билдәле була. Ә ул Юғары Совет рәйесе. Ҡайтып китә Рәхимов. Ҡайтҡас та президент һайлауына тотона. Ике йыл алдан "Башҡортостан Республикаһы президенты тураһында" закон ҡабул ителгән була.

**Мортаза Рәхимовтың шундай шәхес булып китеүенә Исмәғил Ғәбитов етәкселегендәге ул төркөмдән тыш тағы ла кемдәр йоғонто яһай?**

- Исмәғил Ғәбитовтың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, ул Аҡ йортта ҡуна-ятып эшләй. Иң ауыр һәм мәшәҡәтле эштәрҙең береһе - документтар әҙерләү. Уларҙы бер ерҙән дә күсереп булмай. Сөнки өлгөләр үҙҙәре юҡ. Шул уҡ ваҡытта Исмәғил Ғәбитов тирәһендә тупланған башҡа бик күптәрҙе ситтә ҡалдырып булмай. Ә Мортаза Рәхимовтың ҙур етәксе булып китеүе иң беренсе нәүбәттә үҙенән. Ул үҙен-үҙе тәрбиәләй. Романдың 1-се өлөшөндә 5-се класс малайы Мортаза күрше ауыл кешеһе менән ер мәсьәләһе буйынса эләгешә. Ер бит ул. Бына шулай ҡандан килгән ынтылыш уны шәхес итеп күтәрә.

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Александр Филиппов Күгәрсен районының Йомағужа ауылы мәктәбендә уҡығанда Мортаза Рәхимов менән һабаҡташ булған. Уның һөйләүенсә, буласаҡ республика Президенты ошо мәктәптә уҡыған ауылдаштарын урындағы егеттәрҙән ҡыйырһытырға юл ҡуймаған, кәрәк икән, дөрөҫлөгөн йоҙроҡ менән дә раҫлаған...**

- Эйе, ул мәктәптә лидер була. Романда уның бер ҡыҙҙы яҡлап һуғышҡанын һүрәтләнем. Бер мәл ул кейем элгән бүлмәгә барып инһә, Гена тигән малай бер ҡыҙҙы урыҫса насар белгәне өсөн үсекләп маташа. Мортаза уны яҡлап һуғышып китә. Әгәр ҙә ул шунда ҡыҙҙы яҡламай ситкә китһә, тарих шуның менән ябылыр ине.

**Шул уҡ ваҡытта ауылда тыуып үҫкән башҡорт балаһының СССР кимәлендәге ҙур Нефть эшкәртеү заводының генераль директоры булып китеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй бит.**

- Эйе, кешенең ынтылышы математиканы, тригонометрияны, химияны яҡшы белеүенә генә бәйле түгел. Ул заводтың баш химигы ла булып эшләй, шунан баш инженер, шунан генераль директор, шунан Юғары Совет рәйесе, шунан президент. Бындай юғары осошло юлды кеше яҙмыш йылмайыуы арҡамында ғына үтә алмай. Бының өсөн шәхес фиҙаҡәрлеге, рух бөйөклөгө талап ителә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ **- Ярар, улым, уйлашырбыҙ. - Ғөбәйҙулла ҡапыл ғына бер өҙөп әйтә алмаһа ла, улының үҙ яҙмышын ҡорорға тырышып йөрөүе оҡшаны. Дөрөҫ әйтә бит Александр, был малайҙан рәт сығасаҡ.**






## ЕР ҺУЛЫШЫ

- 1 -

Һай, донъяның матурлығы! Ҡояш йылыны менән иркәләй, болон өҫтөнән елләс ел иҫеп үтә, йәшелгә сумған ағастар араһында ҡоштар сутылдаша. Белә Мортаза: оҙаҡламай, 22 июнь уҙғас, иң оҙон көн, иң ҡыҫҡа төн үткәс, ҡоштар һайрауҙан туҡтай. Шуны самалаптыр, моғайын, кемуҙарҙан моңдарын түгеп ҡалырға тырыша улар. Быны шулай икәнлеген Мортаза үҙе күҙәткәне юҡ-юҡлығын. Атаһы Ғөбәйҙулла әйтә. Атаһы белмәй һөйләмәҫ.

Мортаза ошолай хозурланып йәйге ялан юлынан килә ине, ғыршлатып бесән сапҡан тауышҡа шып туҡтаны. Ҡараһа, алыҫта түгел, юлдан егермеләп аҙым урман яғында берәү бесән саба. Ридуан, йәғни бесән ташый торған арбаға егелгән аты ла шунда үлән утлай. Мортаза аптырап ҡарап торҙо. Был ниткән эш ти инде? Бесән өҫтө етмәгән, ә был кирелеп һелтәп саба. Өҫтәүенә ялан ситенән дә түгел, уртаһынан тотонған. Ни ғорлом үләнде әрәм итә. Кем икән был? Әлбиттә, үҙҙәренең ауылынан түгел. Үҙҙәренекеләр ошолай бесән тәләфләй буламы? Ридуандың тәпәшлегенә, бесәнсенең күлдәген билбау менән быуғанлығына ҡарап, Алмалыныҡы, тип һығымталаны. Шунда уҡ урыҫсалап ҡысҡырҙы:

- Эй, ты что делаешь? Ҡысҡырғанға теге тертләп китте. Шулай ҙа:

- Күрмәйһеңме ни, сабам, - тине.

- Ни эшләп сабаһың? Кем рөхсәт итте? Был бит Алмалы ере түгел, Сәнкемдеке.

- Башҡорттоң ере күп, мин сапҡандан ғына бөтөп китмәҫ.

- Бөтмәҫ нәмә булмай ул. Туҡта! Кит беҙҙең ерҙән!

Бесәнсе, ысынлап та, туҡтаны, Мортазаға һынамсыл ҡарап торҙо. Уның янында - танау төбөндә йөнө лә сығып бөтмәгән малай. Һуңғы арала һонтор буйлы булып үҫеп киткәйне-китеүен, ләкин ҡаршыһындағы ир менән сағыштырырлыҡ түгел инде. Теге бер Мортазаға, бер салғыға ҡарап алды, егет арбала ятҡан һәнәккә күҙ төшөрҙө. Салғыһы йөн көсөнә ҡыҫҡырып ебәрҙе:

- Кит бынан! Хәҙер салғы менән эсеңде ярам!

Әммә Мортаза етеҙерәк булып сыҡты, күҙ асып йомған арала арбалағы һәнәкте эләктерҙе һәм ҡаршыһындағы бәндәнең салғыһына һуҡты, уныһы ҡулынан ысҡынып, һәнәк сатаһы араһында ҡалды. Теге бәндә арбаға ырғып менде лә һәм ҡысҡырып ебәрҙе:

- На!..

Ат ауыл яғына елдерҙе. Мортаза салғы менән һәнәк тотоп, тегенең артынан ҡарап ҡалды. Хужаһы ҡасты тип эш ҡоралын ташлап китеп булмай бит, егет уларҙы күтәреп Алмалыға барып инде. Урам буйлап күп тә үҙманы, ҡаршыһына класташтары Ваня менән Сергей килеп сыҡты. Мортазаны Алмалыға уҡырға килтергәс тә атаһы Ғөбәйҙулла ошо Ваня йәшәгән өйгә фатирға урынлаштырҙы. Беренсе күрешкән саҡта Ваняның атаһы ике малайҙы йәнәш баҫтырып:

- Был егет һинең тиҫтерең, һабаҡташың була, бер класта уҡыясаҡһығыҙ. Беҙҙең ауыл уның өсөн ят. Үҙ кеше булып киткәнсе, Мортазаны ҡарап йөрө, тегебыл ҡулсыр бәндәләр интылып ҡуймаһын, һағауыл булырһың, - ти әйтеп ҡуйҙы. Уны Ваня тәүҙә бәләкәй туғаны кеүек ҡараны, аҙаҡтан типә-тиң иптәш, дуҫ булып киттеләр. Ваня киң күңелле, йор һүҙле, шаян да ине. Әле лә Мортазаның ҡиәфәте быға ауыҙ йырырға етә ҡалды:

- Мортаза, һине Варвара көтәм ти ине, ышанмағайным, дөрөҫөн һайраған икән, - Ваня хәйләкәр йылмайҙы.

Варвара ла - быларҙың класташы. Малайҙар, шаярып, уны Мортазаға ҡушып һөйләгән була.

- Нишләп?

- Мортаза мине әйттерергә килә, ти ине. Ана бит, кейәү рәүешендә бик матур кейенгәнһең. Класты бөттөң, танытма кеҫәлә тиһәң дә була. Варвараны алаһың да ҡайтаһың инде. Тик уны салғыға ултыртып, һәнәк менән ҡыуып алып ҡайтмаҡсы булаһыңмы ни? Шуныһын ғына аңламайым.

Быны һүҙенә Сергей шарҡылдап көлә башланы. Уның хахылдауы Мортазаның да күңелен күтәреп ебәрҙе. Ваняға ҡарап:

- Тыңла! Аҙаҡтан, ишетмәнем, тип йөрөмә, - тине.

- Ҡаты ҡолаҡтар өсөн айырым әйтәм: был ҡорал салғы тип атала, ул үлән менән ҡуша ҡайһы бер оҙон телдәрҙе лә саба. Ә икенсе ҡорал - һәнәк. Ул сабылған нәмәләрҙе сәнсеп алып, бер урынға өйөү өсөн яраҡлаштырылған. Бармы бында оҙон телдәр?

Ваня сәбәләнгән булды.

- Юҡ, юҡ, Мортаза ағаҡайым. Оҙондар ҡыҫҡарып бөттө.

Ул арала урамда бер малай һөрәнләне:

- Әйҙәгеҙ, тиҙерәк! Башлана бит!..

Ваня менән Сергей аҙымын йышайтты. Мортаза бер үҙе торҙо ла ҡалды. Быны ҡуҙғалмағанын күргән Сергей ҡысҡырҙы.

- Әйҙә, һин бармайһыңмы ни?

- Барам да ул, тик быларҙы ҡайҙа ҡуяйым? - Ҡулындағы эш ҡоралдарына ишараланы.

- Кемдеке һуң ул?

Мортаза яланда ни булғанын һөйләп бирҙе.

- Ә-ә, Харитон булған инде. Башҡорт - контра ул, борон-борондан ере күп булған, тип ул һөйләнеп йөрөй торған. Унан башҡа берәү ҙә түгел.

- Ҡайҙа тора һуң ул? Салғы менән һәнәген илтеп бирергә кәрәк бит.

- Давай, былай итәбеҙ... - Ваня хәйләкәр йылмайҙы. - Анауында, ҡәртәләү артына һалып торабыҙ. Берәү ҙә теймәҫ. Йыйылыштан һуң ҡыҙыҡ яһарбыҙ...

Мәктәптә ҙур йыйылыш булды, балалар ғына түгел, атай-әсәйҙәр ҙә йыйылғайны. Сираттағы класты тамамлағандарға танытма тапшырҙылар. Директор беренсе итеп сәхнәгә Мортазаны саҡырҙы.

- Беҙҙең мәктәптә был егет бер генә йыл уҡыны. Башҡорт ауылынан урыҫса бер ауыҙ һүҙ белмәй килгән малай бындағы иң алдынғы уҡыусыға әүерелде. Булғас, бына ошолай булһын ул егет кеше!

Ваня янында ултырған Варвараның бөйөрөнә төрттө:

- Һинекен маҡтай!

- Кит, нишләп минеке булһын ул! Уның ҡыҙы үҙенең ауылында тора.

- Шаяртам инде, әллә белмәй тиһеңме?

Егеттәр, ҡыҙҙар танытма алғас, бер-береһе менән хушлашты. Мортаза алты саҡрымды йәйәүләп ауылына ҡайтып китте.

Салғы менән һәнәк тураһында оноҭҡайны инде ул. Мортаза танытма алған көндөң кисендә Алмалының колхоз рәйесе Ғөбәйҙулланың ҡапҡаһы төбөндә атын туҡтатты.

- Ғөбәй! Һин өйҙәме?

- Өйҙә. Әйҙә, ин. - Үҙе шул арала ҡәнәғәтһеҙлеген белдерҙе, - Ғөбәй түгел, Ғөбәйҙулла. Әйттем бит мин һиңә: исем беҙҙә үҙгәрмәй ҙә, ҡыҫҡармай ҙа, тип. Һеҙҙә үҙгәрһә лә, мин һиңә Саша тимәй, Александр тим бит. Александр олпатыраҡ.

- Ярар инде, Ғөбәйҙулла. Беҙҙең тел тупаҫыраҡ шул. Һеҙҙеке һымаҡ яғымлы ла, быуынлы ла түгел.

- Әйҙә, - тип саҡырҙы Ғөбәйҙулла. - Ҡапҡа аша ҡысҡырышып тормайыҡ. Түрҙән уҙ. - Үҙе өй яғына боролоп өндәште. - Әсәһе, сәйеңде әҙерлә. Ҡунаҡ бар.

- Сөйләп тормаҫҡа ине бит әле. - Александр ашыҡҡанын белдерҙе. - Бер йомош бар.

- Әйҙә, сәй янында әйтерһең. Көнө буйы ас йөрөгәнһеңдер әле.

- Ҡайҙан белеп тораһың, әллә әүлиәме һин?

- Эйе, әүлиә, ти. Ана, атыңа ҡара. Бөтөнләй әлһерәгән бит. Көнө буйы ялһыҙ йөрөткәнһең.

- Эйе шул. Уныһын уйламай ҙа торам. Районға барғайным, әле бер, әле икенсе конторҙа йөрөп, шунан ауылдарға һуғылып үтте көн. Юл ыңғайы булмаһа ла, һиңә лә һуғылдым.

Тамаҡ ялғап алғас, Александр төп һүҙгә күсте:

- Ғөбәйҙулла, мин һиңә яусы рәүешендә килдем бит әле.

- Кемде кемгә һоратаһың инде?

- Һинең малайыңды беҙҙең колхозға.

- Нисек була инде ул?

- Мортазаң беҙҙең мәктәптә бик яҡшы уҡыны. Кисә сираттағы класты тамамлау тураһында танытма алды. Гел "дүртле" лә "бишле". Һин малайыңды беҙҙең мәктәптән алып, икенсе ергә бирергә ниәтләйһең икән, тип һөйләйҙәр. Мортаза беҙҙә уҡып, етене бөтәрһөн. Теймә һин уға. Бөгөн райкомда мәктәпте тамамлағандарҙы артабан уҡытып, ауылға кадрҙар әҙерләү тураһында әйттеләр. Техникумға, училищеға ебәрергә уйлайҙар. Үҙең беләһең, мәктәпкә һигеҙенсегә барһа, уҡыу түләүле. Ә беҙҙең йүнәлтмә менән китһә, бушлай уҡый, өҫтәүенә аҙмы-күпме стипендия түләйҙәр. Биш-алты балалы беҙҙең ғаиләләр өсөн был бик мөһим. Әлбиттә, Мортазаны һин үҙегеҙҙең колхоздан да ебәрә алаһың. Бигерәк тә һинең бай хужалығыңа был бер ни ҙә тормай. Тик үҙегеҙҙән уҡырға китһә, Рәхимов ана үҙ балаһын колхоз иҫәбенә уҡыта, тиәсәктәр күҙеңә бәреп.

- М-дә... Дөрөҫ әйтәһең, ҡорҙаш. Малайҙың яҙмышы тураһында уйларға кәрәк. Әлегә өҙөп бер нәмә лә әйтә алмам, үҙемдекеләр менән һөйләшәйем.

- Һөйләш, ә һинең малайҙан рәт сығасаҡ ул.

- Ҡайҙан беләһең?

- Кисәге хәлдән.

- Ниндәй хәлдән?

- Бәй, үҙең дә белмәйһеңме ни?

- Александр кисә Алмалыла Мортаза менән булған хәлде һөйләп бирҙе. - Күрәһеңме, колхоз милкен хәстәрләп йөрөгән ир үҫә һинең ғаиләлә?

Александрҙың әйткәне Ғөбәйҙулланың күңеленә май булып ятты, йөҙө яҡтырып китте. Иптәше быны маһайыу тип ҡабул итмәһен өсөн башын ситкә борҙо ла:

- Салғы менән һәнәкте ташлап киткәнме? - тигән булды.

- Уныһы бер әңгәмә әле ул, - Александр көлөп ебәрҙе. - Мортаза ҡайтып киткәс, Ваня менән Сергей Харитонды эҙләп тапҡан. "Салғы менән һәнәк һатабыҙ, - ти икән былар. - Хаҡы - бер шешә сәмиғулла".

Харитон һорағандарын биргән. Өсәүләп эскәндәр. Етмәгән. Шунан Ваня:

- Һин, Харитон, тағы бер шешә ҡуй инде. Мортазаға бирербеҙ, - ти икән. - Бер аҙ майламаһаҡ булмаҫ, юҡһа районға милицияға барам, тип йөрөй. Харитондың колхоз бесәнен урлап сапҡаны аҙ, өҫтәүенә миңә салғы менән киҙәнде, тип әйтә.

Ҡайҙа барһын Харитон, йәнә бер шешә сығарған. Шулайтып, шыҡ малайҙар ныҡ ҡына һемәйткән тауыҡ башты. Был турала Мортаза үҙе белмәйҙер ҙә әле?

- Белмәйҙер. Шул турала һорамаҡ булып, Ғөбәйҙулла Мортазаны саҡыртып алды.

- Көнө буйына күренмәнең, бөгөн дә Алмалыға барҙыңмы?

- Юҡ. Танытма алдым бит, унда бүтән йомошом ҡалманы. Бөгөн Ҡашҡарға барҙым.

- Унда ни эшләнең?

- Мәктәпкә индем, уҡырға алалармы икән тип белештем.

- Шунан, нимә тинеләр?

- Алабыҙ, тинеләр. Тик китап, дәфтәр күп кәрәк, улары - түләүле. Йәйгелеккә эшкә төшһәм, бер аҙ аҡса эшләй алмаммы икән, тип һинең менән һөйләшәйем, тигәйнем.

- Ҡайҙан табырһың икән ундай эште? Колхозда трудденгә йөрөһәң, бер нисә тинлек эшләйһең инде. Яҡын-тирәлә ҡала-маҙар ҙа юҡ бит.

- Күмертауға барып ҡараһам. Иң яҡыны шул инде.

- Күмертауҙа ла эш табыуы анһат булмаҫ шул. Уларға махсус белемле кешеләр кәрәк. Ә ҡара эшкә алмаҫтар, һинең бит рәсми хеҙмәткә йәшең етмәгән.

- Һы... Ҡайһылайтып ҡарарға икән һуң?

- Ярар, улым, уйлашырбыҙ. - Ғөбәйҙулла ҡапыл ғына бер өҙөп әйтә алмаһа ла, улының үҙ яҙмышын ҡорорға тырышып йөрөүе оҡшаны. Дөрөҫ әйтә бит Александр, был малайҙан рәт сығасаҡ. Әлегә Алмалы рәйесенең тәҡдиме тураһында ла өндәшмәй торорға булды.

Мортаза иртәгәһенә үк колхозға сыҡты. Сыҡты тип инде, бригадир нимә ҡуша, шуны үтәйһең, төбөп кенә башҡара торған эше лә юҡ. Бер көн киске аш мәлендә Мортаза:

- Атай, мин иртәгә Күмертауға барып эш эҙләп ҡарайым әле? - тине.

- Бар шул.

Күмертауға Сәнкемдән ике яҡтан йөрөйҙәр: район үҙәге Йомағужа юлынан Воскресенск ауылына барып, оло юлда берәр атҡа эләгеп китергә тырышаһың, йә булмаһа, туранан Ҡаҙарма аша бараһың. Тик бында баштан аҙағынаса тәпәйләйһең, ҡырҡ саҡрым тирәһе.

Мортаза Ҡаҙарма аша китергә булды. Ворошилов ауылына барыусы элек һатыусылар менән биш-алты саҡрымды үтте, артабан үҙе генә. Ҡараңғы төшөр алдынан Күмертауға етеп, атаһының бер танышында ҡунып сыҡты. Шунан эш эҙләргә тотондо. Атаһы, белгән кеүек, дөрөҫөн әйткән икән. Ҡайҙа барһаң да, йә махсус белем, йә тулы 16 йәш һорайҙар. Мортазала тегенеһе лә, быныһы ла юҡ. Шахтаның кадрҙар бүлегенә инеп ҡарарға булды. Оҙон барактың бер бүлмәһенә инде. Дүрт кеше ултыра. Ике ир, ике ҡатын. Тәҙрә янындағы ҙур өҫтәл артындағы кеше мөдирҙер, тип шуның алдынараҡ бармаҡ булғайны, ишек төбөндәге өҫтәл янында баҫып торған ир өндәште:

- Ни йомош?

**✓ Мортаза техникумға хат яҙҙы, йәнә ике аҙнанан яуап килде. "Техникумға инеү имтихандарын яҡшы тапшырып, конкурста еңһәң, дөйөм ятаҡтан урын бирелә, стипендия түләнәсәк. Мәктәптең етенсе класын тамамлағас, беҙгә килерһең".**



- Берәр эш булмаҫмы тип килгәйнем.
- Документтарың бармы?
- Бына.

Теге ир ҡағыҙҙарҙы ҡарап сыҡты ла башҡортсалап өндәште:

- Белемең тураһында таныҡлыҡты күрһәт, ә ҡайҙа йәшәгәнлегең хаҡында ҡағыҙҙы йәшер, бер урында ла уның барлығын әйтмә.
- Нишләп?
- Ауыл кешеһенең паспорты булмаһа, йәшәгән урындан сығып китергә ярамай икәнлеген һин белмәйһеңдер, ахыры.
- Белмәйем.
- Бынан һуң ул ҡағыҙыңды күрһәтмә, төрмәгә ултыртып ҡуйырҙар: ауылдан ҡасҡан, тип. Мәктәптә уҡып йөрөүең тураһындағы ҡағыҙ һинә ситкә сығырға хоҡуҡ бирә. Шуның менән йөрөй бир. - Унан урыҫсалап өндәште. - Бына һинә иғлан, оҡшаһа, шунда уҡырға ин. - Ир кеше бер бит ҡағыҙ тоттороҙо. Күмертау ойошмаларында эшләү шарты менән техникумға ҡабул итеү тураһында иғлан ине был. Мортаза уҡып сыҡты ла өндәшмәй генә ултыра ине, теге кеше:
- Оҡшамаймы? Улайһа, быныһын ҡара, - тип икенсе иғлан тоттороҙо. Быныһы нефть техникумы тураһында ине.

Мортазаның күҙҙәре уйнап китте. Мәктәптә нефтселәр тураһында әллә күпме һөйләнеләр бит. Иң алдынғы, маҡтаулы эш, ти торғайнылар. Баяғы ир Мортазалағы үҙгәрештe шунда уҡ күрҙе.

- Нефть эше оҡшаймы? Һәйбәт һөнәр. Тик техникумдың ҡайҙа икәнлегенә иғтибар иттеңме һуң? Өфөлә. Ә күмерселәрҙең техникумы бында - Күмертауҙа. Әллә ҡайҙа ятҡан ергә бараһы түгел.
- Ярар, - тине Мортаза. - Ҡайтып, өйҙә һөйләшәм әле.
- Дөрөҫ, һөйләш.

Ҡырҡ саҡрымды кире үткәнсе Мортаза техникум тураһында ғына уйланы һәм үҙе өсөн ҡарар сығарып бөттө. Ул ғына ла түгел, ҡайтҡас та техникумға яҙасаҡ хатының йөкмәткеһен дә төҫмөрләп ҡуйғайны инде. Шуға өйҙә был турала атаһы менән тәфсирләп һөйләшеп торманы.

- Үҙеңә шул техникум оҡшай икән, тәүәккәллә, - тине атаһы. - Тик яҡын ара түгел, ҡайтып-китеп йөрөүҙәре ҡыйын буласаҡ.

Мортаза шул уҡ көндә техникумға хат яҙҙы, йәнә ике аҙнанан яуап килде. "Техникумға инеү имтихандарын яҡшы тапшырып, конкурста еңһәң, дөйөм ятаҡтан урын бирелә, стипендия түләнәсәк. Быйылдан башлап стипендия күләме арттырылды. Мәктәптең етенсе класын тамамлағас, беҙгә килерһең".

**- 2 -**

Беҙҙең халыҡта, өйҙәге иҫәпте баҙар боҙа, тигән һүҙ бар. Һин бер төрлө уйлап, шуны эшләргә ниәтләп кенә бөткәс, донъяның бүтән гәмәлдәре килеп сыға ла, уйлағаныңдың бер остоғо ла ҡалмай. Мортаза, көҙгә Ҡашҡарҙа уҡый башлармын, шуны тамамлармын да Өфөгә техникумға китермен, тип уй нығытып ҡына йөрөй ине. Бер көн атаһы, һәр ваҡыттағыса кискә ҡалмайынса, өйгә ҡайтты. Ҡатыны Ғәлимә, уландары Гәрәй, Мортаза, Рафиҡ сәй табынына ултырышып, ашап алғас, Ғөбәйҙулла тамаҡ ҡырҙы:

- Әсәһе, балалар, миңә бүтән эшкә күсерәләр. Беҙгә Йомағужаға барып йәшәргә тура килә.

Табын шып-шым булып ҡалды. Шунан Мортаза һораны:

- Воскресенканан аша китәһең, шул Йомағужамы? - Эйе. - Уны бик ҙур ауыл, тиҙәр.
- Эйе, ҙур ауыл.
- Ҙур ауыл булғас, мәктәбе лә барҙыр?
- Эйе, ун йыллыҡ.
- Башҡорт мәктәбеме?
- Юҡ. Урыҫ. Йомағужаға яҡын ғына ауылда башҡортса уҡыталар, ти.
- Мин шунда уҡыйыммы? - Гәрәй һораны.
- Эйе.
- Мин урыҫ класына барам. - Быныһын Мортаза ҡыҫтырҙы.
- Нишләп? Башҡортса уҡымайһыңмы инде?
- Әллә. Алмалыла урыҫса уҡыным да инде. Һуңынан техникумда барыбер урыҫса уҡырға тура киләсәк. Бер телдән икенсеһенә күсеп йөрөгәнсе.

Башҡалар фекер төйнәгәнсе, был малай үҙенекен хәл итеп тә ҡуйҙы, тип уйланы Ғөбәйҙулла.

- Гәрәй, ә һин ни эшләп өндәшмәйһең? Һин дә Мортаза менән бер мәктәптә уҡыйһыңмы?
- Урыҫсамы?
- Ул мәктәптә башҡорт кластары юҡ.
- Урыҫ мәктәбендә бер класҡа кире төшөп уҡырғамы? - Шулай була инде. Мортаза менән бер класта.
- Кит әле. Мырҙам менән бер класта уҡып йөрөргә ни. Улайтып әҙәм көлдөрөп йөрөгәнсе, уҡымағаның мең артыҡ.

Ярар, тип уйланы Ғөбәйҙулла, быныһы йәйләп көйгә килер әле.

- Әсәһе, ә һин ни эшләп өндәшмәйһең?
- Өндәшеп тә нимә генә тип әйтәйем инде, атаһы. Һин хәл итеп бөткәнһең бит инде. Минең һүҙемдән барыбер бер ни ҙә үҙгәрмәй. Шулай булғас, һеҙҙән айырылып, ҡайҙа барайым инде. Рафиҡ менән йәйләп өйрәнербеҙ инде Йомағужаға ла.

Ҡатынының һүҙе аҙыраҡ хәтерен ҡалдырҙы Ғөбәйҙулланың. Ҡаты ғына өндәшмәксе лә булғайны, кире ҡайтты. Һуғышҡа киткәндә ни хәлдә ҡалдырып китте бит ғаиләһен. Уғаса "Иртәбәк" промартелендә эшләй ине. Ғаиләһе янында, тик йәшәр урындары ғына юҡ. Промартелгә килгәс тә, әлегә ошонда тороп торорһоҙ, тип бер йәйге аласыҡҡа индергәйнеләр. Йәй үтте, ҡара көҙ етте, Рәхимовтарға йәшәр торлаҡ ҡына табылманы. Ғөбәйҙулла райсовет рәйесенә әйләнгән һайын шуны иҫләтте, тик файҙаһы теймәне. Ноябрь айында үҙен һуғышҡа алып киттеләр, ә Ғәлимә ҡулындағы ике бала менән һыуыҡ аласыҡта тороп ҡалды. Улайтһаң да, былайтһаң да, туғандарына һыйынаһың, тигән кеүек, ярар Ғөбәйҙулланың ғаиләһен уның туғандары онотманы. Мозафар ағаһы килеп, Тәүәкәнгә (Сәңкемгә) күсереп алып ҡайтты. Тупраҡ һыҡлап туңғансы ерҙән өй әтмәләп индерҙе. Һуғыш бөткәнсе шунда көн күрҙеләр...

Шуға үпкәләгәндәй була Ғәлимә. Ни хәл итәһең, үпкәләһә лә, урыны бар. Борон тәүҙә кеше тураһында түгел, производство хаҡында ҡайғырталар ине бит. Көтөү ҡайтыр алдынан Мортаза тамал ҡаршыларға тип өй алдына сығып ултырғайны, янына Гәрәй килеп сүгәләне.

- Урыҫҡа өйләнәһең инде һин былай булғас, - тине ул Мортазаға тура ҡарамайынса ғына.
- Нишләп улай тиһең? - Мортазаның тауышында аптырау ишетелде.
- Алмалыла уҡығаныңда урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырып һөйләшергә өйрәнгәйнең, хәҙер ни башҡортса бөтөнләй онотоп бөтөрһөң инде.
- Онотмам. Бына һинең менән башҡортса һөйләшеп ултырам да баһа, ә Ваня менән - урыҫса. Береһен дә бутамайым.
- Түбәнге сыуашта - сыуашса тип тә ебәр.
- Юҡ, сыуашса белмәйем. Ана ҡаҙарманыҡылар сыуашса таптаҙа һөйләшә. Шулар кеүек булһаң, килешер ине.
- Ишеткәнең бармы?
- Эйе, анау ваҡытта Кумертауға барғанда Ҡаҙарманың бер кешеһе менән сыуаштың һөйләшкәнен тыңлап торҙом. Сутырлыған сыға, башҡорт тип уйламаҫһың да.
- Әйттем бит, урыҫ һүҙен ҡыҫтыраһың тип.
- Нимә тип ҡыҫтырҙым?
- "Кумертау" тинең.
- Кумертау - башҡорт һүҙе ул.
- Башҡорттоҡо - Күмертау. Күмер һүҙенән. Белгең килһә, уның беренсе исеме - Бабай.
- Ҡыҙыҡ икән. Бабай исемле кеше булғанмы?
- Юҡ, Бабай тигән йылға бар унда, шуның буйына килеп ултырған Күмертауҙың беренсе кешеләре. Шуға Бабай ауылы тигәндәр. Ауыл ҙурайған, ҡасаба булған, шунан уны Күмертау ҡалаһы тип атағандар.
- Ҡайһылай күп беләһең һин.
- Мин үҙебеҙҙең ауыл тирәһендәге исемдәрҙе лә беләм.
- Йә-йә, әйт әле.
- Күнйәп, Наҡаҫ, Сәүкә, Сыбартау, Ҡойо башы, Кәзә төбәге... - Гәрәйҙең тағы ла теҙергә иҫәбе бар ине, мырҙаһы туҡтатты.
- Һе, уларҙы мин дә беләм.
- Ә Кешеҡырылғанды белмәйһең. Урыҫ үткәүе менән Шаһи һаҙын, Талаҡланды ла белмәйһең. - Гәрәйҙең тауышында еңеү тантанаһы ишетелеп ҡалды.
- Ә һин ҡайҙан беләһең быларҙы?
- Һин урыҫ араһында йөрөгәндә, Мозафар бабайым менән урман-ҡырҙа булам бит. Ул һөйләй. Бабайым әйтмешләй, ишеткәнемде мыйыҡҡа урап барам.
- Маладис. Һин минең авзыйым ғына түгел, ағайым да булдың...

Ул арала көтөү күренде, малайҙар мал ҡаршыларға йүгерҙе.

Был һөйләшеүҙең дауамы байтаҡ ваҡыт үткәс булды. Ғөбәйҙулла ҡатыны менән балаларын Йомағужаға күсереп килтергәйне инде. Бер көн Ғәлимә ауылға хат яҙырға булып китте. Яҙҙы, һуғыш ваҡытындағы кеүек әсмөйөшләп, һыуынған картуф менән елемләп йәбештерҙе. Шунан Мортазаға тоттороҙо.

- Мә тышына әҙрисен яҙ. Урыҫса кәрәк бит.

Мортаза яҙа башланы. Деревня Тауаканово тип яҙғайны, әсәһе ҡыҫҡырып ебәрҙе:

- Ауылға тинем дә инде! Һин әллә нимә яҙып ултыраһың...
- Һуң ауылға яҙып ултырам да инде. Бына "Деревня Тауаканово" тинем.
- Ниндәй Тауаканово булһын? Ауылыңдың Сәңкем икәнлеген оноттоңмо әллә?
- Урыҫса - Тауаканово, башҡортса Сәңкем була, - тине Мортаза белдекле ҡиәфәт менән.

Шым ғына тыңлап ултырған Гәрәйгә ҡыҫылырға тура килде.

- Беҙҙең ауылды башлап ебәргән кешенең исеме Тәүәкән булған. Шуға әле лә рәсми рәүештә Тәүәкән тиҙәр. Сәңкем ҡыпсаҡ башҡорттары йәшәгәнгә, кеше араһында Сәңкем ти ҙә ҡуялар.

Ғәлимә менән Мортаза белдекле кешенең һүҙенә, ҡайтарып әйтергә дәлилдәре булмағас, өндәшмәүҙе хуп күрҙе.

Шул йылды Йомағужала ҡышланылар. Кеше өҫтөндә йәшәү тормошмо ни инде, ялыҡҡайнылар. Уҡыу йылы бөтөү менән үҙҙәренең ауылына ҡайтып йәйҙе үткәрербеҙ, тип йөрөйҙәр ине, икенсе әмәл сыҡты. Ғөбәйҙулланы эшкә үҙҙәренең ауылына - Тәүәкәнгә ебәрергә булдылар. Иң ҡыуанғаны малайҙар һәм Ғәлимә булды. Гәрәй менән Мортаза иҙән уртаһына төшөп ырғанланы хатта, Ғәлимә өндәшмәй генә йылмайҙы. Быларҙы ҡарап ултырған Ғөбәйҙулла:

- Ни эшләп ҡыуанышҡан булаһығыҙ? Мортаза, бигерәк тә һин. Унда мәктәп өйөнә терәлеп тормай, Ҡашҡарға тиклем тәпәй туратта йөрөргә тура киләсәк.

Әле генә ауыҙҙарын йыйып ала алмай көлөшкән малайҙар шым булды.

- Әй, миңә барыбер. Бында Бикҡужаға йөрөнөм, унда - Теләүембәткә. Икеһенең араһы бер тиерлек.

Гәрәй Йомағужала урыҫ мәктәбенә барыбер барманы, Бикҡужала уҡыны.

- Ҡашҡар алыҫ бит әле ул. Көн һайын егерме саҡрымды ике яҡҡа үтеүҙәре... - Мортазаның күңеле төштө.

Был мәсьәләне Гәрәй үҙенсә хәл итте:

- Ҡайғырма, башҡорт телен онотоп бөтмәгәнһеңдер әле. Теләүембәттә башҡортса уҡырһың.

Мортазаның ауырһыныуын Хоҙай бабай ишеткәндер, күрәһең. Шул йылда Теләүембәттә урыҫ телле туғыҙынсы класс астылар һәм малайҙар шул мәктәпкә китте.

Унынсыны бөткәс, артабан ни эшләргә, тип торманы Мортаза. Был һорауға яуапты ул әллә ҡасан әҙерләп ҡуйғайны инде.

- Атай, мин Өфөгә нефть техникумына уҡырға китәм, - тине ул бер көн кис Ғөбәйҙуллаға.
- Йәне теләгән йылан ите ашаған, ти. Шул техникум тип хыялландың, барһаң, бар. Паспорт юллашып бирермен. Бер аҙ аҡса ла табышырмын. Ҡалғаны - үҙеңдән. Имтихандарҙы яҡшылап бирерһең, техникумына ингәс, стипендияғаса ауыҙыңды ҡуҡҡа элеп тормаҫ өсөн үҙең аҡса йүнләрһең, бер миңә генә өмөтләнеп ултыра алмаҫһың.
- Ярар.
- Имтихандар башланырға бер ун биш көн элек барырға, башкүҙ алырға, ундағы ваҡиғаларға өйрәнергә кәрәк.
- Ярар.

Ул замандa ауылдан сығып уҡырға урынлашҡан кеше бик һирәк була торғайны. Мәктәпте бөткәс, артабан уҡый торған йорт уҙа барһа техникум, тип белделәр. Унынсыны тамамлағас, тура институтта уҡый алыу уйы ни эшләптер башҡа кермәй торғайны. Унды бөтөү, шунан техникум, тик һуңынан ғына институт. Тәүәкәндә генә түгел, тирә-яҡта ла ошо фекер таралғайны. Мортаза техникумға документтарын тапшырып, еңел һулап тупһала тора ине, берәү килеп:

- Документы где принимают, здесь? - тип һораны.
- Да, - тине Мортаза. Үҙе, башҡортса әйтһә лә, аңлар инем инде, тип уйланы. Теге кешене көтәүелләп алды шулай ҙа. Ишек төбөндә был пәйҙә булғас:
- Башҡорт икәнлегең әллә ҡайҙан беленеп тора, нишләп башҡортса өндәшмәнең? - тип бәйләнде. Гәрәй ағаһының башҡортто туктауһыҙ күтәреүе эҙһеҙ үтмәгән инде.
- Бәй, һин дә башҡортмо ни? Белмәнем, - булды яуап.
- Әйҙә, танышайыҡ, мин - Мортаза, Тәүәкән тигән ауылдан, Йомағужа районынан.
- Сәңкемдән тип әйт. Мин Әхмәт булам, Ҡаҙарманан - Көйөргәҙе районынан.
- О-о! Ҡаҙарманан булғас, Сәңкемде беләһең инде. Һаумы, күрше!

Яҡташтар ошолай күреште һәм бер бүлмәгә урынлашты. Әхмәт мәктәпте Күмертауҙа бөткән. Атаһы һуғышта һәләк булған, өйҙә әсәһе менән һеңлеһе бар. Мортазаның ярҙам итерлек атаһы булһа, Әхмәттең бер кеме лә юҡ. Етмәһә, өйҙәгеләре уға күҙ төбәп тора. Шуға иң алда уның аҡсаһы ҡалмауы гәжәп түгел. Бер көн Мортаза дәрестән һуңлабыраҡ ҡайтҡайны, Әхмәт мөжөрләп йөрөй:

- Әллә ҡайҙа ғәйеп булдың. Мин бында эш һөйләшеп, һине көтәм.
- Ниндәй эш?
- Тимер юл станцияһында вагон бушатырға.
- Әйҙә һуң.

Эш ауыр ине. Иллешәр килолыҡ тоҡтарҙы йөкмәп, вагондан келәткә ташырға кәрәк. Ярар әле иңгә кәлепләп һалына торған нәмә бар, юҡһа өҫтөңдәге кейем таушалып бөтәр ине. Былай ҙа Әхмәттең күлдәге яға аҫтынан бүселеп сыҡты. Ни хәл итәһең, ултырып илап булмай. Ярар әле эш хаҡын яҡшы ғына бирҙеләр, баҙарҙа тотонолған бер күлдәк һатып алдылар.

- Бер һылтауҙан ике һылтау, - тип көлдө Мортаза. - Бына күлдәкле булдың, юҡһа йөрөр инең әле иҫкелә. Хәҙер вагон бушатырға тотона торған әҙер күлдәгең булды.

Күрҙе инде Мортаза менән Әхмәт вагондарҙы, һәр төрлөһөн бушатты. Эшкә кейер өсөн әрһеҙ кейемдә йүнләп алдылар. Техникумды тамамлағансы улар бушатҡан вагондарҙы бергә теҙһәң, әллә нисәмә состав булыр ине. Шуның арҡаһында улар ас йөрөмәне, өҫтәре лә бөтөн ине, кино-фәләнгә лә барыштырҙылар. Уның ҡарауы, аяҡтарына, беләктәренә ит ултырҙы, кәүҙәләре ҡалын ирҙәрҙекеләй булып китте. Тик вагон бушатҡандан ғына түгел инде: Мортаза алыҫ араларға йүгерергә, саңғыла йөрөргә яратты, Әхмәт бокс менән мауыҡты. Кәрәк булһа, береһе гармун тартып, икенсеһе бейеп тә ебәрә торғайны...

**(Дауамы бар).**

✓ *Ошо ваҡиғанан һуң Роберттың йәйлап үҙенә эйәләшеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ул. Бер аҙҙан егет Санияның бөтә серен, шик-шөбһәһен, ә иң мөһиме, үлемтеккә тип йыйған аҡсаһының ҡайҙа ятҡанын да белә ине инде.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨҺӘҢ...
## аҡыллыраҡ булырһың

■ Нью-Йорктың Морган Стенли исемендәге балалар госпиталенең тиҙ ярҙам бүлегендә тәжрибә рәүешендә iPad-тар индерелгән. Бындай ғәҙәти булмаған сара бәләкәй пациенттарҙы ауырттыуҙан һәм ҡурҡыуҙан ҡотолдороу өсөн ҡулланыласаҡ. Төрлө ауырыу менән әләккән баланы планшеттағы уйын, музыка, видео тиҙ генә тынысландыра ала, был уҙ сиратында дауаның һөҙөмтәһен яҡшырта. Бындай ысул ата-әсәләргә, балаларға ғына түгел, табиптарға ла бик оҡшаған, сөнки хәҙер укол ҡаҙау өсөн бала менән оҙаҡ итеп һөйләшергә лә, уны ныҡ итеп тотоп торорға ла кәрәкмәй.

■ Швед ғалимдары асыҡлауынса, туйғанса йоҡламау организмда матдәләр алмашыныуын тотҡарлай. Быға тиклем йоҡо туймауҙың артыҡ ауырлыҡҡа килтереүен асығыу гармоны кимәле күтәрелеүгә бәйләп аңлаталар ине. Яңы тикшеренеүҙәр раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ төндә йоҡо туймау һөҙөмтәһендә матдәләр алмашыныуы тотҡарланыуына бәйле икән. Эксперттар фекеренсә, күберәк йоҡлап, артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоп була.

■ Франция парламенты "Фталат, парабен йәки алкилфенолдар ҡулланып эшләнгән продукция етештереү, импортҡа сығарыу, һатыуҙы тыйыу тураһында" закон ҡабул иткән. Хәҙер был илдә косметикала парабен нигеҙендәге консерванттар ҡулланылмаясаҡ. Ғалимдар фекеренсә, заманса косметика саралары составына ингән был синтетик консерванттар түш яман шешенә килтереүе ихтимал. Был фараздар ғилми яҡтан нигеҙләнмәгән, әммә француз етештереүселәре был имеш-мимеште үҙенең файҙаһына ҡулланып, "составында парабен юҡ" тигән яҙыу менән ҡиммәтерәк хаҡҡа косметика һата башлаған. Билдәле косметика компанияһы хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, консервантһыҙ косметика етештереү бөтөнләй мөмкин түгел, уй саҡта уның һаҡланыу ваҡыты бик ҡыҫҡара. Косметиканан тыш, парабен көнкүреш химияһында, хатта Е214, Е216, Е 218 маркировкалы аҙыҡ-түлектә лә ҡулланыла. Хәҙер был закон Евросоюздың Сенатында тикшерелә.

■ Ҡытай һәм Япон халҡы араһында айҙың һәр дүртенсе көнө бәхетһеҙ, тигән ышаныу йәшәй. Табиптар был фекерҙең кешеләрҙең һаулығына йоғонто яһаймы, юҡмы икәнлеген тикшереп ҡараған. Улар 200 мең үлем тураһындағы таныҡлыҡты өйрәнеп, шуны асыҡлаған: һәр айҙың дүртенсе көнөндә үлем осраҡтары йышыраҡ теркәлгән. Ошондай уҡ статистика Европа халҡы араһында ла бар, тик ул 13 һаны менән бәйле.

■ Гарвард университеты ғалимдары фекеренсә, һыйыр, һарыҡ ите, аҡ май, һөт өҫтө, ҡаймаҡ, аҡ икмәк һәм ондан яһалған башҡа аҙыҡ оло йәштә матдәләр алмашыныуын боҙа. Бындай аҙыҡ-түлек ҡулланған 40 йәште үткән ир-ат араһында шәкәр диабеты һәм артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар 60 процентҡа күберәк. Гарвард табиптары был иттәрҙе балыҡ һәм тауыҡ итенә алыштырырға, аҡ икмәк урынына ҡара икмәк ҡулланырға кәңәш итә.

ҺАБАҠТАР

# ЯҢҒЫҘЛЫҠ...
## саманан да яҙҙыра



Сания йылдың үтеүен түҙемһеҙлек менән көтә башланы. Элек көн үтһә, ғүмер уҙа тип, һәр үткән көнгә үкенеп ултырыр ине. Хәҙер иһә күҙе - минут һайын сәғәттә. Кис еткәнен көтә ул шулай. Хатта календарҙағы иртәгәһе көндө йоҡларға ятҡансы уҡ алмаштырып ҡуйғаны ла бар.

Йыл ғәҙәттәгенән ауыр килде уға. Йондоҙнамә бик яҡшы осор вәғәҙәләһә лә, ҡатын өсөн быйыл төптө киреһе булды. Сәләмәтлегенә бер ҙә зарланғаны булмаһа, һуңғы осорҙа сир-сырхауҙан айырылғаны юҡ. Өҫтәүенә, күршекүләне менән низағлашып бөттө. Уларҙан да бигерәк - ғүмерҙә булмағанса суд юлын тапарға тура килде Санияға. Ололарҙың ҡағыҙға төшкәнсе, батҡаҡҡа төш, батҡаҡты йыуаһың да китәһең, ә ҡағыҙға бер төшһәң, унан сығыуы ҡыйын, тигәндәре ҡайһылай дөрөҫ. Быны бит суд эше бер йылға яҡын һуҙылды.

Ологайған көнөндә суд юлында йөрөрмөн тип, бер ҙә уйламағайны, әлбиттә, ҡатын. Бөтәһенә лә үҙе ғәйепле икәнлеген бик яҡшы белә, әммә судта, үҙем ғәйепле, тип ултырып булмай. Үҙең ғариза яҙ ҙа, һүҙеңдән үҙең баш тартып ултырмайһың бит инде, кеше аптыратып. Хәйер, был хаҡта ауыҙ асып ҡараманы түгел. Әйтте ул, адвокатына ла өндәште, тикшереүсегә лә. Енәйәт эше асылғас, уны ябыу хәҙер Санияның теләгенә генә бәйле түгел ине шул.

Сания - яңғыҙ ҡатын. Ике тапҡыр тормошҡа сыҡты сығыуын. Тәүгеһенән утыҙ йәшендә тол ҡалды, икенсеһе менән дә ун йыл ғына бергә йәшәргә насип булды. Тик ни тиклем балалар яратһа ла, ҡатын әсә булыу бәхетен татыманы. Төрлө шифаханаларҙа, дауаханаларҙа дауаланып ҡараны, иң яҡшы врачтарға ла күренде, имтомсолар ҙа ҡалманы, әммә балаға уҙманы.

Икенсегә кейәүгә сыҡҡас, балалар йортонан сабый алырға ла уйлағайны. Тик кеше һүҙенән ҡурҡып, ниәтенән баш тартты. Һуңғараҡ, бәлки, тәүәккәлләрмен тип, үҙен тынысландырҙы. Ә таныһын туғандарының балаларын һөйөп ҡандырҙы, аҙаҡ балалар баҡсаһына тәрбиәсе булып эшкә урынлашҡас, көнө буйы кеше балалары менән мәж килеп арып ҡайтты. Бала алыу тураһындағы уйынан шулай йәйлап төңөлдө. Хаҡлы ялға сыҡҡансы эңгәҙлығы бик беленмәне. Тәрбиәләнеүселәренең атай-әсәһе, хеҙмәттәштәре менән аралашты. Ял, байрам көндәрен йә бер танышында, йә икенсеһендә үткәрҙе, үҙе лә өйөнә кеше килгәнен яратты. Ҡыҫҡаһы, өйөнән бер ҡасан да кеше өҙөлмәне.

Тик пенсияға сыҡҡас, тормошо төптө икенсе юҫыҡҡа китер тип уйлағаны булманы. Тәүге мәлдә, әлбиттә, унан кеше өҙөлмәне, үҙе лә ҡунаҡҡа йөрөнө. Тик йәйлап таныштары, дуҫтары әйләнәһе тарайҙы. Күптәре балалары, ейәнейәнсәрҙәре менән ваҡыт үткәреүҙе хуп күрҙе.

Үҙҙәре килмәгәс, аҡрынлап туғандарына йөрөүҙе лә туҡтатты. Шулай Сания бер үҙе торҙо ла ҡалды. Байрамдарҙы, һуңғараҡ хатта тыуған көнөн дә яңғыҙы үткәргәне булды.

Ҡартая килә кешенең тормошҡа ҡарашы ғына түгел, холҡо ла үҙгәрә икән. Уҙ файҙаһын ғына ҡайғыртҡан, иҫәпсел, шиксел, ваҡсыл, мыжыҡ әбейгә әйләнде лә ҡуйҙы. Эргәтирәһендә тик кире күренеште генә күрҙе. Ташҡан талағын өйөндә бушатыр кешеһе булмағас, күршеләренә бәйләнде. Подъезд алдындағы гөлсәскәгә күмелгән түтәлде күрмәҫкә лә мөмкин, ә ундағы яңылыш ҡына һынған ботаҡ, ҡойолған сәскә әбейҙең күҙенә салынмай ҡалмай. Коридорҙың таҙалығына иғтибар итмәһә лә, дежурлыҡ бер-ике көнгә тотҡарланһа, оло ғауға сығарҙы.

Подъезда шылт иткән тауышҡа ла ишекте асып, кем ингәнен, сыҡҡанын тикшергән Саниянан тиҙҙән эргә-тирәһендәге бөтәһе лә биҙҙе. Ҡаршы күршеһе менән хатта дошманлашыуға тиклем барып етте. Йыш ҡына ҡыҙмаса йөрөгән йәш ирҙең, йәнең ҡәҙерле булһа, башҡа ҡыҫылаһы булма, тип янауын Сания ысынға алды ла ҡуйҙы. Ингәндә лә, сыҡҡанда ла башыма бер нәмә менән һуғып ҡуймаһын, тип шикләнде. Быға тиклем иртәнән кискә тиклем фатирының ишегенә бик һалмай ғәҙәтләнгән ҡатын көнә-көндәҙ ҙә бер нисә тороп биген тикшерҙе.

Тора-бара ҡурҡыуы бөтә булмышын биләп алды, тынғыһыҙға әйләнде. Йоҡоһо йоҡо, ашы аш булманы. Ә иң ауыры кемдән ярҙам һорарға белмәй аптыраныуы булғандыр. Туғандары менән яҡынлығы юҡ, полицияға әйтер ине, эште ҙурға ебәреүҙән ҡурҡты.

Күршеһенең үлтереү менән янауы хаҡында танышына әйткәйне, уныһы утҡа кәрәсин генә һипте - һағыраҡ йөрө, йәнәһе. Яңғыҙ йәшәгән оло йәштәгеләргә һунар итеүселәр йә тегендә, йә бында осрап тора, тип шиген арттырып ебәрҙе.

Кемгә барып баш төртөргә белмәй йөрөгәндә ҡаршы йорттағы Робертты, элекке тәрбиәләнеүсеһен, иҫенә төшөрҙө. Күптән түгел генә сираттағы тапҡыр төрмәнән сыҡҡайны ул. Урамда күрешеп һөйләшеп торғайнылар. Шунда егет бала саҡта Санияның уға һәр ваҡыт иғтибарлы булыуын, башҡа балалар араһында уны яҡлашыуын онотмауын һөйләп торҙо. Сания ҡыуаһын китте: хушлашҡанда егет, йомошоң булһа, мөрәжәғәт ит, мин хәл итә алмаған мәсьәлә юҡ, тигәйне бит. Күршеһенең ҡурҡытыуы тураһында уға әйтергә була ла баһа!

Сания, Роберттың бала сағын, әлбиттә, яҡшы хәтерләй. Ҡартайған әләсәһе ҡулында үҫте. Эсергә ятраҡан әбейҙән ниндәй яҡшылыҡ күрһен инде. Сания малайҙы йәлләп, йыш ҡына тәмлекәстәр һатып алды. Биргән ваҡытта, ҙурайғас, мине яҡларһың, тип әйтә лә торғайны. Егет тә әбейҙең изгелеген онотмаған, күрәһең, ярҙам кәрәкһә, өндәш, тине.

Сания әбей төндә йоҡоһоҙ үткәрҙе. Түҙемһеҙлек менән яңы көн тыуыуын көттө. Сабырһыҙ ҡыланыуы унын йәштән килә. Ниндәй ҙә булһа башына уй килһә, аҙағын уйлап тормай, шуға абына-һөрөнә ынтыла. Ошо холҡо ологайғас та ташламаны. Тороп, душта ҡойоноп сыҡты. Берәй ниәте булһа, үҙенсә шулай ғөсөлләнеп, Аллаһтан ярҙам һорарға ғәҙәтләнгән ул. Башҡа көндәрҙә иһә намаҙлығының да, тиҫбеһенең дә ҡайҙа ятҡанын белмәҫкә мөмкин.

Робертты ихатала һағалап, йомошон йомошланы. Егет шул уҡ көндө Санияның теге эсергә яратҡан күршеһен алып килеп, әбейҙән ғәфү үтендерҙе. Ҡурҡытып алғас, ҡатын йәнә подъезында башын күтәреп, элеккесә тамағының төбө менән һөйләшеп йөрөй башланы. Тәкәббер ҡыланһа, шулай итә ул, оҙағыраҡ һөйләшһә, ҡайһы берҙә хатта тамағы ҡарлығып китә. Хәҙер бына күңеле тынысланды - үс алынды, ҡон ҡайтарылды.

Ошо ваҡиғанан һуң Роберттың йәйлап үҙенә эйәләшеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ул. Бер аҙҙан егет Санияның бөтә серен, шик-шөбһәһен, ә иң мөһиме, үлемтеккә тип йыйған аҡсаһының ҡайҙа ятҡанын да белә ине инде.

Көндәрҙән бер көндө йомшаҡ креслоһында ғәҙәтенсә яратҡан тапшырыуын ҡарап ултыра ине, кемдер күҙен ҡапланы. Әбей тәүҙә, шаярталар икән, тип уйланы, ҡыпһыуыр кеүек ҡаты бармаҡтар муйынына урелгәнсе, берике тапҡыр Роберттан ярҙам һорап ҡысҡырырға өлгөрҙө, аҙаҡ иҫен юғалтты...

Аңына килгәндә диванда һуҙылып ята ине. Аҡ халатлы ҡыҙыҡай укол яһай, участковый ҡағыҙға нимәләр теркәй, уның янында - эскесе күршеһе.

- Тотоғоҙ бандитты, кеше үлтереүсене, - тип ҡыҫҡырҙы, күршеһенән ҡурҡып, әммә тауышы үҙе янынан алыҫ китмәне. Муйыны быуылған саҡта тауыш ярылары зыян күргән икән. Шулай ҙа әбейҙе ишеттеләр.

- Ул - һине үлемдән ҡотҡарыусы, үлтереүсең - ана ишек төбөндә, - тине участковый. Ынтылып ҡараһа - ике полицейскийҙың ҡамауында ҡулына бығау кейгән Роберт баҫып тора. Шаңҡыу хәлендә булһа ла әбей эштең низә икәнен шунда уҡ аңланы. Уға үҙенең элекке тәрбиәләнеүсеһен яуапҡа тарттырыуҙарын һорап, ғариза яҙмай сараһы ҡалманы...

Подъезда бөтәһенең дә эшенә ҡыҫылып, сәбәпһеҙгә бәйләнеп, биҙҙереп бөткән әбейҙе күршеләре ысын күңелдән йәлләне. Ҡан баҫымы күтәрелеп, тора алмай ятҡанында "ашығыс ярҙам" саҡырҙылар, магазиндан аҙыҡ-түлек ташынылар, алмашлап иҙәнен, керен йыуҙылар. Тамаҡ төбө менән һөйләшкән, тәкәббер, дорфа ҡатынды суд ҡарары сыҡҡандан һуң бөтөнләй иштемәнеләр: быуылғандан һуң тауыш ярыһы тәҙәлмәйенсә, бөтөнләй өнһөҙ ҡалды ул.

Санияның тормошонда йәнә үҙе генә белгән тағы бер үҙгәреш булды - ҡатын Аллаһу Тәғәләгә ысынлап һыйынды. Элеккесә, намаҙлыҡҡа нимәләр һорау, үтенеү өсөн баҫмай ул хәҙер, ә рәхмәт әйтеү, шөкөр итеү өсөн сәждә ҡыла...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР



## Ҡоллоҡтан ҡотолоу тарихы

Лоҡман-Әл-Хакимдың исеме Изге Ҡөрьәндә лә бар, уға бер сүрә арналған. Лоҡман нубийҙарҙан ҡара тәнле ҡол була. Аллаһы Тәғәлә уны ҙур хикмәт, аҡыл менән бүләкләй. Үҙенең улына бер нәсихәтендә Лоҡман-Әл-Хаким шулай ти: "Ысынбарлыҡта, хикмәт ун эште тормошҡа ашырырға ярҙам итә: ул үле йөрәкте терелтә; ярлы-ябаға менән йәнәш ултырта; батша дәрәжәһенә күтәрә; бөрәү ҙә белмәгән затты күренекле итеп таныта; ҡолдо азат итә; юлсыға ҡуныrға урын бирә; мохтаждарҙы байыта; яҡшы кешеләрҙең яҡшылығын, хакимдарҙың хакимлығын арттыра".

"Әл-Азкия" китабында хикмәтле Лоҡмандың аҡылы һәм зирәклеге арҡаһында нисек итеп ҡоллоҡтан ҡотолоуы яҙып ҡалдырылған. Бану Исраил ҡәбиләһенән кемдер бөрәү Лоҡманды үҙ янында хеҙмәтсе итеп тотор өсөн һатып ала. Хужа көнө-төнө тиерлек нардта уйнар булған. Бер мәл ул кем отола, шул минең йорт эргәһенән ағып ятҡан йылғаны эсеп бөтөргә, йәки хаҡ түләргә тейеш, ти. Һәм үҙе үк был уйында еңелә. Ә отҡан кеше:

- Йылғаны эсеп бөт, йәки шуның хаҡын ҡайтар! - тип талап итә башлай.

- Хаҡы ни саҡлы? - тип һорағас, отҡан кеше шулай ти:

- Мин һинең ике күҙеңде лә соҡоп һуҡырайтам, йә бөтөн мөлкәтеңде тартып алам!

Хужа, бурыс түләүҙе бер көнгә кисектер, тип үтенә. Өйөнә ҡайтҡас, нишләргә белмәй, көнө буйы ҡара көйөп йөрөй. Иртәнсәк уның янына утын күтәргән Лоҡман инә, иҫәнләшә, шунан йөгән бушатҡас, хужаһынан:

- Нишләп бөгөн бик ҡайғылыһың? - тип һорай (хужа һәр саҡ Лоҡманды күргән сағында шаяртып, нимәләр әйтер һәм тегенең хикмәтле яуабына ғәжәп итер булған). Хужа яуап урынына арҡаһы менән боролоп ултыра. Хикмәтле Лоҡман һорауын тағы ла ике мәртәбә ҡабатлай, хужа уға күтәрелеп тә ҡарамай.

- Һөйләһәң, бәлки, мин һиңә ярҙам итә алыр инем, - ти шул саҡ Лоҡман.

Шунда ғына хужа үҙенең ниндәй хәлгә тарығанын һөйләп бирә.

- Ҡайғырма, мин һиңә ярҙам итермен, - ти хикмәтле Лоҡман.

Хужа ҡыҙыҡһынғас, ул шулай тип аңлата:

- Теге әҙәм килеп: "Йылға һыуын эсеп бөт!"- тип әйтһә, һин: "Минә ике яр араһындағы һыуҙы эсергәме, әллә йылға буйындағынмы?" - тип һора. Ул: "Ике яр араһындағын", - тип яуап бирер. Шул саҡта һин: "Улай булғас, мин ике яр араһындағы һыуҙы эскәнсе, һин йылға буйындағы һыуҙы тотоп тор", - тиген. Ул бит йылға буйындағы һыуҙы тотоп тора алмай, һин дә был бәләнән ҡотолорһоң, - ти.

Хужаға Лоҡмандың тәкдиме оҡшай, ул терелеп китә.

Иртәгәһен уны отҡан кеше килеп етә һәм:

- Йә, шартты үтәйһеңме? - ти.

Хужа яуап бирә:

- Эйе, тик башта асыҡларға кәрәк: минә ике яр араһындағы һыуҙы эсергәме, әллә йылға буйындағыһынмы?

- Ике яр араһындағы һыуҙы эсәһең, - ти отҡан кеше.

- Улайһа, йылға буйлап аҡҡан һыуҙы тотоп тор, - ти хужа.

- Уны мин нисек тотоп тора алайым? - тип аптырап китә теге әҙәм. Һәм шунда үҙенең отолғанын таный. Бына ошо хәлдән һуң хужаһы хикмәт эйәһе Лоҡманды ҡоллоҡтан азат итә.

## Ғәжәйеп хәл

Әхмәд бин Мискин, һижрә иҫәбе буйынса өсөнсө быуатта йәшәгән ғалимдарҙың береһе. Уның һөйләгәндәренән:

"219 йылда (һижрә) мин хәйерселек менән һыналдым, ҡатыным, улым бар, ә бына ашарлыҡ бер нәмәбеҙ ҙә булмаһы. Шул тиклем асығабыҙ, хатта шунан эсебеҙ ауырта торғайны. Мин өйҙө һатырға ла, икенсе яҡҡа күсеп китергә тип уйланым. Өй алыусы эҙләп, урамға сығып киттем һәм Әбү-Насрға тап булдым. Уға торлағымды һатырға ниәтләүемде әйттем. Әбү-Наср шул саҡта уртаһына хәлүә һалынған ике көлсә бирҙе. Өйҙәгеләргә ашатырһың, тине. Ҡайтышлай, урамда улын күтәргән бер ҡатынды тап иттем. Ул көлсәгә ҡараны ла: "Әфәндем, был етем бала, аслыҡтан түҙер әмәле ҡалманы, берәй ризыҡ бирсе, һиңә Аллаһтың рәхмәте төшһөн", - тине. Мин балаға ҡараным, уның күҙҙәрен һис кенә лә онотаһым юҡ. Шул саҡ был балаға ризыҡ биргән кешегә Йәннәт үҙе ергә төшөп, үҙен тәкдим иткән һымаҡ тойолдо. Мин ҡулымдағын ҡатынға тотторҙом: "Мә, баланды ашат, Аллаһ исеме менән ант итәм, минең алтын-көмөшөм дә, ризығым да юҡ, өйҙә ошо тәғамға мохтаждар ғына бар", - тинем. Ҡатындың күҙҙәре йәшләнде, ә малайҙың йөҙө яҡтырып китте.

Мин хәсрәткә ҡалып, стена эргәһенә барып ултырҙым һәм өйҙө һатыу тураһында уйға ҡалдым. Шул саҡ яныман Әбү-Наср килеп етте. Шатлығы эсенә һыймағандай күренде: "Эй, Әбү-Мөхәммәд, нишләп бында ултыраһың? Һине өйөндә байлыҡ-муллыҡ көтә бит", - тине.

- Сөбхән Аллаһ, - тинем мин. - Ҡайҙан булһын ти инде ул байлыҡ, Әбү-Наср?

Ул Харасандан бер кеше килеп төшөүен әйтте:

- Кешеләрҙән һинең атайыңды һорашҡан, шунан уның туған-тыумасаһы бармы, тип белешкән. Ул шулай уҡ үҙе менән ҙур йөк тейәп алып килгән.

- Ни өсөн килгән ул? - тип һораным.

- Ул Басра сауҙагәре. Утыҙ йыл элек атайың уның сауҙаһын үҫтерергә үҙенең аҡсаһын һалған, тик был кеше бөлгөнлөккә төшкәс, атайың Басранан кире Харасанға ҡайтып китергә мәжбүр булған. Ә был сауҙагәргә һынауҙан һуң еңеллек килә, сауҙаһы үҫешә башлай һәм ул ҡаbаттан байып китә. Хәҙер бына Басранан килеп төшкән, бурысын түләмәксе. Уның сауҙа эшенә атайың һалған аҡсаны һәм утыҙ йыл буйына шунан килгән табышты һиңә ҡайтармаҡсы.

Мин Аллаһы Тәғәләгә шөкөр иттем. Әбү-Насрға рәхмәт әйтеп, теге хәйерсе ҡатынды балаһы менән эҙләп таптым, уларға байлыҡтан өлөш сығарҙым, шунан үҙемдең сауҙа эшемдә башлап ебәрҙем, мөлкәтемдән бер өлөшөн хәйер итеп тараттым. Байлығым бынан һуң артты ғына. Шунан үҙем менән һоҡлана башланым, изге эштәр менән үҙемдең ғәмәл дәфтәремде тултыра барыуыма ҡыуандым һәм Аллаһы Тәғәлә мине лә салихтар рәтендә яҙырына өмөтләндем.

Бер көн йоҡлаған сағымда үҙемде Ҡиәмәт көнөндә икән тип күрҙем. Кешеләрҙең диңгеҙҙәй тулҡынланғанын күрҙем, ысын тулҡын шикелле бер-береһенең өҫтөнән ҡалҡалар ине улар, гонаһтарын артмаҡлаған, йәнселгән ҡәүҙәләрҙе күрҙем. Гонаһтары әллә ниндәй сүрәттә, гүйә, гонаһ эйәләре өҫтәрендә тотош ҡалаларҙы йөкләп китеп баралармы ни. Шунан бизмәндәрҙе алдыбыҙға ҡуйҙылар, мине лә ғәмәлдәремде үлсәргә алып килделәр. Насар ғәмәлдәремде бер яғына, яҡшы эштәремде икенсе яғына һалдылар. Яҡшы ғәмәлдәр өҫкә күтәрелде, насарҙары аҫҡа тартты. Шунан фәрештәләр мин эшләгән яҡшылыҡтарҙы берәм-берәм һалып үлсәй башланы. Һәр яҡшы эш аҫтында рыялыҡ, үҙ-үҙеңде алдау һәм кешеләрҙең маҡтауын көтөү ята ине, һәм минең бер яҡшы эшем дә ҡалманы... Үҙемде аҡлаған нәмәләр мине харап иттеләр. Шул саҡ: "Бер нәмәһе лә ҡалманымы ни?" - тигән һорау ишетелде. Ошондай яуап булды: "Бына ошо ҡалды". Ниндәй яҡшы ғәмәлем тороп ҡалғанын белгем килде. Уның хәйерсе ҡатындың балаһына биргән ике көлсә икәнен күрҙем, ә биргән йөҙ динарым миңә ярҙам итмәне. Өмөтөм өҙөлдө. Бына ике көлсәне бизмәнгә һалдылар, һәм яҡшы ғәмәлдәрем ауыр тартып, түбән төшә башланы, насарҙарынан саҡ ҡына аҫкараҡ та төштө. Шунан һуң ҡатындың күҙ йәшен дә үлсәүгә һалдылар. Үҙ ғаиләмдән өҙөп, көлсәне уларға биргәнем өсөн илаған күҙ йәштәре ине һәм бизмәндәге изгелек яғым ауыр тартып, аҫҡа төшә башланы ла: "Ул ысынлап тороп ҡотолдо!" - тигән тауыш ишетелгәнгә тиклем аҫҡа табан төшөүҙән туҡтаманы.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**40-сы идея**
**Ел-дауылдарға бирешмәҫ ағас**

Беҙҙең күбебеҙ теге йәки был осорҙа үҙ һәләттәрен тикшертеү аша үткәрәләр. Беҙҙең дәүерҙә бигерәк тә. Эшкә урынлашырға йыйынған һәр кем төрлө тестар ярҙамында тәрән тикшереүгә дусар ителә.

Ҡасандыр мин кеше инженерияһы өлкәһендәге төп белгес, Стивенсон институтынан доктор Джонсон О'Коннор тураһында ҡыҙыҡлы мәҡәләләр уҡығайным. Бер ваҡыт О'Коннорҙан, уның тәжрибәһендә берәй кеше бөтә тестарҙы кире һөҙөмтә менән үткән осраҡ булдымы, тип һорайҙар. Тестар шул тиклем күп, һәм кешенең уларҙың береһенә булһа ла яуап бирмәүе мөмкин түгел. Ләкин О'Коннор көлөп ебәрә лә: "Эйе, беҙҙең тестарҙың береһенә лә яуап бирә алмаған кешеләр бар. 8000 кешенән берәүһе, ғәҙәттә, бөтөнләй өмөтһөҙ була", - тип яуап бирә. Унан: "Ундай кешеләр менән һеҙ нимә эшләйһегеҙ?" - тип һорайҙар. "Эшләйбеҙ? - тип ҡабатлап һорай О'Коннор. - Беҙ улар хаҡында борсолмайбыҙ. Улар беҙгә проблема тыуҙырмай. Ғәҙәттә, был үҙ фирмаһының управляющийы йәки президенты".

Интервью алыусы был яуапта мәғәнә күрмәй һәм төпсөнөүен дауам итә: "Нисек инде, тестар тәбиғи һәләттәргә бөтөнләй эйә булмауын күрһәткән кеше фирма президенты булыуы мөмкин?" О'Коннор бик ябай аңлата: "Бындай кешегә бер нәмә лә еңел бирелмәгәс, ул йәштән үк оҙайлы һәм ауыр эшкә күнегә, - ти ул. - Дауамлы һәм ныҡышмалы хеҙмәт уға ҙур эске көс, ҡыйыулыҡ һәм тәжрибә бирә, был реаль белем булып тора һәм уға уңышҡа өлгәшергә мөмкинлек бирә лә инде".

Мин: "Беҙ үҙ тормошобоҙҙа быға өйрәнергә тейеш түгелбеҙме икән?" - тип уйланым. Ҡаршылыҡ елдәре беҙҙең тирәләй иҫкәндә, хәлгә ҡаршы тора алмаҫыбыҙҙы тойғанда, ул елдәрҙән беҙ көслөрәк булһын өсөн иҫеүен аңларға тейешбеҙ. Әйтәйек, әгәр йәш ағасты оранжереяла ултыртып үҫтереп, һуңынан тау түбәһенә сығарып ултыртһаҡ, ул бер ҡышҡа ла сыҙамаясаҡ. Әгәр ағас үҙ тормошондағы тәүге ҡыштар менән бергә сыныҡһа ғына көслө, ел-дауылдарға бирешмәҫ булып үҫәсәк.

Кеше менән дә шулай уҡ. Беҙ проблемаларға осрап һәм уларҙы еңеп үҫәбеҙ. Был бигерәк тә балаларыбыҙға ҡарата мөнәсәбәттә мөһим түгелме ни? Әгәр беҙ балаларыбыҙҙы һәр нәмәнән ҡурсалап, өпәкәйләп үҫтереп, ҡыйынлыҡтарҙан һаҡлаһаҡ, уларҙың бурысын еңеләштерһәк, улар О'Коннор әйткән серҙе белеү мөмкинлеген ҡулдан ысҡындыра бит: уларҙы ҡалаҡтан ашатыу урынына ауыр һәм оҙайлы эш серен, өйрәнеү, тәжрибә туплау серен. Кеше шәхесе үҫешенә ауырлыҡтар менән тулы тормошта, бер нәмә лә еңел бирелмәгән осраҡта ғына өлгәшелә. Шул саҡта ул ел-дауылдарға бирешмәҫ ағасҡа әүерелә. Һынауҙар һәм ауырлыҡтар менән тулы тормош ҡына ысын тормош була.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЭЙ, ҒӘЗИЗ, КҮРКӘМ ТЫУҒАН ЯҠ, БАР ҠОТТО ҮҘЕНӘ ЙЫЙҒАН ЯҠ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**37-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Шәкүр. Аралбай. Питон. Гусар. Өршәк. Әминбәк. Иҙеүкәй. Өскөл. Етди. Буфет. Сик. Сәскә. Айыу. Әләм. Лимон. Тел. Щи. Ейәнсәр. Ыҙғыш. Ғиләжев. Ҡәнәфер.

**Вертикаль буйынса:** Игебаев. Грейпфрут. Көртмәле. Арба. Йомғаҡ. Рәйес. Штамп. Саман. Сеүәтә. Тенниска. Ирене. Район. Өкө. Сулпы. Сикә. Өрөк. Көл. Әүнәш.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (11) дүшәмбе | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 17:27 | 18:57 | 20:27 |
| 29 (12) шишәмбе | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 30 (13) шаршамбы | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 1 (14) кесе йома | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:19 | 18:49 | 20:19 |
| 2 (15) йома | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 3 (16) шәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:14 | 18:44 | 20:14 |
| 4 (17) йәкшәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

## КӨН ДӘ КӘРӘКЛЕ РИЗЫҠ

Тыуып торған бер көндө алабыҙ ҙа, уны көнсөллөк, күрә алмаусылыҡ йәки нәфрәт, күңелһеҙлек, ҡомһоҙлоҡ, тиҫкәрелек, мин-минлек, вайымһыҙлыҡ кеүек керҙән бик яҡшылап таҙартабыҙ.

Таҙартып пакланған көнгә өйөп тултырылған өс ҡашыҡ ышаныс һәм өмөт - оптимизм, бер ус иман, бер ҡашыҡ сабырлыҡ, бер нисә бөртөк түҙемлек орлоғо һәм бөтә кешеләргә, бигерәк тә үҙеңдең яҡындарыңа ҡарата бер семтем генә әҙәп һәм тыйнаҡлыҡ өҫтәйбеҙ. Шуларҙы ҡушып барлыҡҡа килгән бөтә ҡатнашма өҫтөнә мөхәббәт, һөйөү тигән нәмә һалабыҙ.

"Әҙерләгән" көндө яҡшылыҡ һәм илтифат сәскәләренән өҙөп алынған япраҡтар менән биҙәйбеҙ. Унан һуң тағы ла татлы һүҙҙәр, күңелде һәм йәнде йылытырлыҡ тәм-том менән тәмләп "табынға ҡуябыҙ".

Яҡшы уй-ниәттәр менән башлаған көндәрегеҙ уңышлы үтһен!

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры

**28 сентябрь** "Башҡортостан" ДКЗ сәхнәһендә **"Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+
**29 сентябрь "Эҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**30 сентябрь "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс 16+
**1 октябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**2 октябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+
**3 октябрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+
**4 октябрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 октябрь Премьера! "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим, З. Бураҡаева). 12+
**3 октябрь "Республика ШКИД"** (Г. Белых, Л. Пантелеев). 18.00 12+
**4 октябрь "Республика ШКИД"** (Г. Белых, Л. Пантелеев). 18.00 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 сентябрь "Море... Солнце... Джаз!"** 82-се миҙгелдең беренсе концерты. 6+
**1 октябрь "Ике король. Орган һәм рояль"** 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**26 сентябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+
**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 16.00 0+
**27 сентябрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 16.00 0+
**3 октябрь Премьера! "Коза-дереза"** (М. Супонин). 12.00, 14.00 0+
**"Етем төлкө"** (О. Штырляева). 16.00 0+
**4 октябрь "Коза-дереза"** (М. Супонин). 12.00, 14.00 0+
**"Етем төлкө"** (О. Штырляева). 16.00 0+

АЙЫҒАЙЫҠ!

## УЛ ҮЛТЕРӘ



**Ошо көндәрҙә Рәсәйҙә Айыҡлыҡ көнө билдәләнде. Башстат Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса аналитика әҙерләне.**

Йыл һайын республикала уртаса 2,5 мең кешегә "алкоголизм" диагнозы ҡуйыла. 2019 йылда спиртлы эсемлектәр менән мауығыуға бәйле сәбәптәрҙән 519 ир-егет һәм 225 ҡатын-ҡыҙ (бөтәһе 744 кеше) яҡты донъя менән хушлашҡан, уларҙың уртаса йәше - 51. Сәбәптәр араһында айырыуса алкоголь кардиомиопатияһы (390 осраҡ) һәм алкоголь менән ағыуланыу (190) киң таралған.

Алкоголизмдан үлем 100 мең кешегә 18,4 осраҡ тәшкил итә. Быны инфекция (22,2), үҙ-үҙеңә ҡул һалыу (18,2), транспортта бәхетһеҙ осраҡтарҙың бөтә төрҙәре (12,7) менән сағыштырырға мөмкин.

Ҡала халҡының алкоголдән үлем коэффициенты 100 мең кешегә - 12, ауылда иһә 29 осраҡ тәшкил иткән.

2019 йылдың аҙағына 27,5 мең ир-егет һәм 8,5 мең ҡатын-ҡыҙ "алкоголизм" йәки "алкоголь психозы" диагнозы менән наркодиспансерҙарҙа иҫәптә торған.

Һуңғы биш йылда 5,6 мең кеше иҫәптән төшөрөлгән.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "ЙӘШЛЕК ШОУ" ТАЛАНТТАР ЭҘЛӘЙ

**Республика йәштәре араһында һәләтлеләрҙе билдәләү, ижад күгендә яңы йондоҙҙарҙы ҡабыҙыуға йүнәлтелгән сараларҙы атағыҙ, тиһәләр, шунда уҡ барыһы ла "Һылыуҡай" һәм "Йәшлек шоу" тип яуап бирер. Ысынлап та, 1992 йылдан алып үткәрелгән был конкурстар йолаға әүерелеп, ҡырҡа үҙгәрештәрһеҙ генә йәшәп киләләр ине. Ине тейем, сөнки ниһайәт, "Йәшлек шоу" быйыл форматын үҙгәртеп, Бөтә Рәсәй кимәленә сыға. Был турала конкурсты ойоштороусылар журналистар менән осрашыуҙа белдерҙе.**



Өфө ҡалаһының Art-квадрат майҙанында асыҡ һауалағы ҙур концерт менән старт алған быйылғы "Йәшлек шоу"ҙың һайлап алыу турҙары 26 сентябрҙән Башҡортостандың Кушнаренко районында башланды. Жюри ағзалары республика район-ҡалаларында эште тамамлағас, Рәсәйҙең 10 төбәгендә - Татарстан, Ырымбур, Силәбе, Ҡурған, Һарытау, Свердловск, Һамар өлкәләрендә, Пермь крайы һәм Ханты-Манси автономиялы округы, Санкт-Петербург ҡалаһында башҡортса йырлаған йәштәрҙе эҙләйәсәк. Ойоштороусылар әйтеүенсә, көндәр һыуытыуға ҡарамаҫтан, "Йәшлек шоу"ҙың беренсе туры үткән һәр урында ҡатнашыусылар башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары менән берлектә асыҡ һауала концерт ҡуясаҡ. Ә инде төбәктәрҙә еңеү яулағандар 17-18 ноябрҙә Өфөлә гала-концертҡа сығыу өсөн һынау тота. Әйткәндәй, конкурста 16 йәштән 30 йәшкә тиклемге йырсылар ҡатнаша ала, уларға музыкаль йүнәлеш буйынса бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ. Ни бары башҡорт эстрадаһын, шоу-бизнесын үҫтереүҙе маҡсат иткән сара булараҡ, "Йәшлек шоу" йәш башҡарыусыларҙың йырында башҡорт телен ҡулланыу проценты 30-ҙан кәм булмаҫҡа тейеш, тигән шарт ҡуя. Ләкин телде камил белмәгән, әммә башҡортса йырларға өйрәнергә теләгән йәштәрҙе ситкә ҡаҡмай ойоштороусылар.

- Конкурс республика хөкүмәте һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ярҙамы менән шундай юғары кимәлгә күтәрелә алды. "Перезагрузка" тип атайбыҙ, сөнки башҡорт эстрадаһын йәнләндереп ебәреү маҡсатын ҡуйғанбыҙ, бында шоу-бизнеста билдәле бер һөҙөмтәләргә өлгәшкән шәхестәр жюри ағзалары булып тупланыуы ла юҡҡа түгел. Йәш башҡарыусыларҙы һайлап ҡына ҡалмаясаҡбыҙ, артабан улар менән эшләргә, үҫтерергә, хеҙмәттәшлек итергә теләйбеҙ. Эстрадаға яңы һулыш индереү, юғары сифат һәм төрлө жанрҙа башҡарыусыларҙы күрһәтеү "Йәшлек шоу"ҙың төп асылы, - ти конкурстың төп ойоштороусыһы, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Артур Әлибәков.

Билдәле булыуынса, "Йәшлек шоу" проектында ҡатнашыусыларҙың ижадын башҡорт эстрада йондоҙҙары Рөстәм Ғиззәтуллин, Элвин Грей, МС Баш, Zainetdin, Ольга Филиппова, Анжелика Якусева, Алтынай Вәлитов баһалаясаҡ. Йырсы һәм продюсер Рөстәм Ғиззәтуллин фекеренсә, яңы ғына ҙур сәхнәгә аяҡ баҫып торған йәштәргә ныҡлы таяныс булыр, йүнәлеш бирер кешеләр кәрәк һәм был йәһәттән баһалама ағзалары таланттарға ярҙам итергә әҙер. Һәләтлеләр Рөстәм Ғиззәтуллин һәм Элвин Грейҙың продюсер үҙәктәре менән бергә эшләү мөмкинлеген аласаҡ. Ә инде ойоштороусылар үҙ сиратында еңеүселәргә матди ярҙам күрһәтеүҙе хәстәрләгән: төбәк кимәлендә төп өс урынға лайыҡ булған йырсыларға 10, 7 һәм 5 мең һум приз бирелә. "Йәшлек шоу"ҙың төп финалсыларына 300, 200 һәм 100 мең һум аҡсалата приз, ҡиммәтле бүләктәр тапшырыласаҡ. "Башҡорттар үҙ мәҙәниәте, үҙ йолалары, үҙ моңо булған уникаль халыҡ. Был мәҙәниәт Бөтә Рәсәйгә генә түгел, бар донъяға танылырға тейеш, тип иҫәпләйем. Быға бөтә мөмкинлектәр ҙә бар, буласаҡ артистар үҙ-үҙенә ышанып, үҙ ижадына барлыҡ көсөн һалып үҫешергә тейеш һәм "Йәшлек шоу"ға шундай ныҡышмалдарға уңыштар теләйем!" - тине конкурстың жюри ағзаһы, йырсы Ольга Филиппова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ойоштороусылар егерме һигеҙенсе тапҡыр үткән "Йәшлек шоу" проектына яңы һулыш бирергә теләп, күп тырышлыҡ һала. Бөгөн улар вәғәҙәләгәндәр сәхнәгә күтәрелергә хыялланған һәләтле йәш кешегә ҙур мөмкинлектәр асҡан кеүек. Шулай ҙа себеште көҙ һанайҙар, тигәндәй, был ыңғай ниәтле башланғысҡа 20 ноябрҙә Өфөлә үтәсәк "Йәшлек шоу" гала-концертында һығымта яһарбыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺӨНӘР ӨЙРӘНЕРГӘ КИЛЕГЕҘ!



**14 октябрь көнө Өфөнөң "Рәсәй - Минең тарихым" мультимедия паркы нигеҙендә "Боронғо Өфө" тарихи фестивале уҙғарыла. Сараны ойоштороусылар - "Самрау" Мәҙәни мираҫты һаҡлау фонды һәм "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы.**

Был көндә мультимедия паркында төрлө һөнәр оҫталары дәрестәр үткәрәсәк. Улар араһында тимерселәр, зәргәрҙәр, балсыҡ һәм күндән әйбер яһаусылар була. Айырыуса, башҡорт халыҡ кәсептәре, башҡорт милли кейемдәре һәм биҙәүестәрен яһаусы оҫталарҙы был сарала ҡатнашырға, белемдәре менән уртаҡлашырға саҡыра ойоштороусылар. Бының өсөн алдан шылтыратып, теркәү үтергә кәрәк.

Әлеге ваҡытта "Мин Өфөнө өйрәнәм" проекты сиктәрендә баш ҡала сәнғәт мәктәптәре уҡыусылары араһында "Өфө менән аулаҡта" онлайн плэнер үтә. Балалар Өфөнөң тарихи үҙәгендәге архитектура мираҫы объекттарын һүрәткә төшөрә. Ә фестиваль уҙған көндә юғары уҡыу йорттары студенттары араһында тарихи квест ойоштороласаҡ. Еңеүселәрҙе иҫтәлекле бүләктәр көтә. "Йыл һайын уҙғарылған "Боронғо Өфө" фестивале баш ҡала тарихын өйрәнеүсе, уның архитектура һәм археология ҡомарҡылары менән ҡыҙыҡһыныусыларҙы берләштергән күркәм сараға әүерелде", - ти был турала "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулыҡ директоры Гәүһәр Батталова.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАҠ ЭШТЕ

## халыҡ һөйөр

Ҡара ерҙе яманлама, ҡайтып шунда барырһың, Ил-йортондо яманлама, ҡарғышына ҡалырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле)**

Ил - тарихи йәки сәйәси ысынбарлыҡ түгел, ул - берҙәмлек.

**(Рамон Лопез Веларде).**

Һүҙҙәр - халыҡтар шәжәрәһе.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Һеҙ нимәлер эшләргә тәүәккәлләгән көн - бәхетле көн.

**(Япон халыҡ мәҡәле).**

Яңғыҙлыҡтың ҡапма-ҡаршыһы бергә йәшәү түгел, ә рухи яҡынлыҡ.

**(Ричард Бах).**

Әхлаҡ - кешеләр араһында булған мөнәсәбәттәр һәм шунан килгән бурыстар тураһындағы фән.

**(Поль Гольбах).**

Эшегеҙгә бөтә йөрәгегеҙҙе һәм күңелегеҙҙе бағышлағыҙ, әммә башта ҡарағыҙ: был эш яҡшымы?

**(Джон Рескин).**

Ерҙә үҙегеҙ барлыҡҡа килтергәндән дә яҡшыраҡ күктәр булмай.

**(Грек халыҡ мәҡәле).**

Ул үҙ уйҙарын әйтеп бирергә өйрәнгәндән алып уға ышаныс бөттө. Тотлоғоусыларға ғына ышаналар шул.

**(Фридрих Ницше).**

Һаран ике тапҡыр түләй.

**(Бальтасар Грасиан).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Дәрүиштәрсә көн итеүгә тәүге аҙымын яһаған кеше ике нәҙер әйткән. Беренсеһе - бер тере йәнгә лә зыян килтермәҫкә, һәм икенсеһе - ялған һүҙ һөйләмәҫкә.**

**Бер ваҡыт ул ҡалын урманда ағас төбөндә Хоҙайҙан ошо ике антына тоғро ҡалырға ярҙам итеүҙе һорап, доғалар ҡылып ултырғанда һунарсыларҙан ҡурҡып, ҡасып барған матур боланды күреп ҡала. Бер нисә минуттан һунарсылар ҙа күренә. Улар дәрүиштән: "Болан ҡайһы яҡҡа ҡасты?" - тип һорай. Бахыр ҡарт ни әйтергә белмәй, аптырап ҡала. Әгәр ҙә ул ҡыуаҡтар араһына йәшеренгән боланды күрҙем тиһә, һунарсылар уны тотоп үлтерәсәк. Һәм был беренсе нәҙерҙе тотмау була. Ә инде болан ҡайҙа киткәнен белмәйем тиһә, икенсе антын боҙасаҡ. Бер аҙ уйланып торғандан һуң дәрүиш: "Күҙ күрә, һөйләй алмай. Тел һөйләй, тик күрмәй. Мин күҙҙе һөйләргә, ә телде күрергә мәжбүр итә алмайым".**

**Бынан эш сыҡмаҫын аңлаған һунарсылар үҙ юлын дауам иткән..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 25 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 770/09